ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23-29 сентябрь (һарысай)

2023

№37 (1079)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Бала саҡ хыялына...**

тоғро ҡал!



2

**Алтын урталыкта бул!**

Етәксенең аҫыл ҡағиҙәһе был



8-9

**Яҙмыштың үҙенә тәғәйенен...**

тамырҙарынан һут алғанын һайлаған



11,16

**Ҡомалаҡ йыйыйыҡ та...**

магазин сүпрәһенән ҡотолайыҡ!



12-13


@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Иғтибар! 1 сентябрҙән 2024 йылдың беренсе яртыһы өсөн гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы башланды. Аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы ошо осор өсөн дә "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзитенә 857 һум 04 тингә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр биреүҙе дауам итербеҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе еткерәбеҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

*МӨХӘРРИРИӘТ.*

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ӘЙҘӘ, УЙНАРҒА!

**"Әйҙә, уйнарға!" тигән саҡырыуҙы ишеткәс, өлкәнерәк быуын кешеһе дуҫтар менән урамда "өлкән өй", "бәләкәй өй", баҫтырыш, йәшенмәк, бура һуғыу, тип күҙ алдына килтерәлер. Ә бөгөнгө балаларҙың аңында ниндәй образдар тыуа икән был һүҙҙәрҙе ишеткәндә? Улар бит бөтөнләй икенсе төрлө күҙаллай уйындарҙы. Һәр хәлдә, бына яңыраҡ ҡына ла һәр баланың ҡулында өсмөйөш башлы, ыржайған тешле Хагги Ваггиҙарҙы, һәр үҫмерҙә зыр әйләнгән спиннер күрергә була ине, малайҙар Кеше-үрмәксе булырға, ә ҡыҙҙар бармаҡ башындай ғына Лол-ҡурсаҡтар тураһында хыялланды. Сит илдән килгән был тенденцияларҙың бала аңына, сәләмәтлегенә нисек йоғонто яһауы тураһында уйланғанығыҙ бар инеме?**

Ошо көндәрҙә баш ҡаланың Совет майҙанында шау-гөр килеп үткән "Әйҙә, уйнарға!" Бөтә Рәсәй уйындар фестивале ҡатнашыусыларҙың иғтибарын тап ошо мәсьәләгә йүнәлтте лә инде.

**Сөнки балалар яратып уйнатҡан уйынсыҡтар уларҙың физик һәм психик сәләмәтлегенә тик ыңғай йоғонто яһарға тейеш, ә был инде уларҙың мәғәнәүи йәһәттән дә, сифаты буйынса ла хәүефһеҙ булыуын аңлата. Барыһына ла мәғлүм, уйынсыҡтар етештереү өлкәһендә ҡытайҙар төп урын биләй бөгөнгө көндә, ә урында эшләнгән әйберҙәр улар араһында юғалып ҡалғандай. Ә бит үҙебеҙҙә етештерелгәнден сифаты уларҙыҡынан күпкә яҡшыраҡ, етмәһә, рухи-мәҙәни тәрбиә йәһәтенән дә атай-әсәйгә беренсе ярҙамсы булып тора улар. Бына, әйтәйек, башҡортса һөйләшкән, йырлаған һәм милли кейемдәге ҡурсаҡтар балаға туған теленә ҡарата һөйөү уята.**

Әйткәндәй, бығаса былдай ҡурсаҡтарҙы үҙ балаһына ғына эшләгән һәм артабан таныш-белештәренә заказға ғына таратҡан ғәмле башҡорт атай-әсәйҙәре менән таныш булһаҡ, фестивалдә Киров өлкәһенән һигеҙ тиҫтә йыл эшләгән "Весна" фабрикаһының башҡорт ҡыҙы һәм малайы һынландырылған ҡурсаҡтарын да күрҙек. Бөтә уйынсыҡ магазиндарына Рәсәй халыҡтарын сағылдырған шундай уйынсыҡ киң һатыуға сығарылһа, һатып алыусы табылмаҫ инеме ни?

**(Дауамы 5-се биттә).**




АФАРИН!

**Күптән түгел Венгрияның Сегед ҡалаһында уҙғарылған IOI-2023 Информатика буйынса халыҡ-ара олимпиадаһында Рәсәй командаһындағы дүрт уҡыусы ла алтын миҙал яулап ҡайтты. Олимпиадала ҡатнашҡан 89 ил вәкиле араһында былдай юғары баһаға Ғимран Марат улы АБДУЛЛИН атлы башҡорт егете лә лайыҡ булғайны. Ошо форсаттан файҙаланып, һәләтле яҡташыбыҙ менән гәзит уҡыусыларын да таныштырабыҙ.**



# БАЛАНЫ ЛА...

## шәхес итеп күрһен өлкәндәр!

**Һин Өфө егетеһең бит инде, эйеме?**

- Эйе, мин Өфө ҡалаһында тыуғанмын, тамырҙарым Әбйәлил районына барып тоташа. Бишенсе класты тамамлағансы Өфө районының Шамонино ауылы мәктәбендә белем алдым, хәҙерге көндә Ҡаҙан ҡалаһының 2-се лицей-интернатында 10-сы класта уҡыйым. Бала саҡтан кубик Рубика йыйыу, шахмат уйнау, футбол менән мауыҡтым, мәктәптә математика дәрестәре ҡыҙыҡлы була торғайны. Ә инде лицей-интернатҡа килгәс, информатика дәрестәрен оҡшаттым: бирелгән төрлө эштәрҙе атҡарыу уйын һымаҡ тойола ине. Шулай яйлап информатиканың математикаға ҡарағанда ла күңелемә яҡынораҡ булыуын аңланым һәм уның менән етдиерәк шөғөлләнә башланым. Компьютерҙың минән миллион, миллиард тапҡырға аҡыллыраҡ булыуы, әммә уға күрһәтмәләр биреп кенә төрлө эштәрҙе атҡартып булыуы оҡшаны. Быға уҡытыусымдың дәрестәрҙе мауыҡтырғыс итеп алып бара белеүе лә, һәр матур башланғысымды хуплап торған ата-әсәйем дә булышлыҡ иткәндәр.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

12+

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# ЭЙ, АҠМОРОН ЮЛДАРЫ...

## Һындырырһың муйыңды



**Ысын, бер ҙә арттырыу юҡ. Кем Баймаҡ районының Аҡморон - Ишбирҙе юлын бер генә тапҡыр булһа ла үтеп ҡараған, ул ҡабат бында аяҡ та баҫмаясаҡ.**

Ә ошо юлдан эш йәки йомош менән йөрөгән урындағы халыҡ нишләйме? Үҙем дә аптырайым. Улар ошо "кер йыуғыс" таҡтаһынан көн дә йөрөп күнеккән йә булмаһа, тотошлайы менән соҡор-саҡыр юлды бар көстәренә күрмәҫкә лә, һиҙмәҫкә лә тырыша. Тик был мөмкин түгел, валлаһи! Башың машина түшәмен тишеп сығырлыҡ итеп һикерткәндә нисек һиҙмәҫкә була? Ә улар һиҙмәҫкә тырышып күҙ йома ла йөрөүҙәрен дауам итә...

Хәҙер нисә йылдыр инде был юлдарҙа ремонт булғаны юҡ. Бәлки, урындағы халыҡ көләмәс итеп һөйләгән ошо замандарҙандыр, моғайын: тәүге Президентыбыҙ Мортаза Рәхимов Баймаҡ - Йылайыр трассаһынан үтеп барған, имеш. Баймаҡтан күп тә бармай, ошо асфальт трассанан уңға юлдың бер армыты Аҡморонға айырылып китә. Ғәжәп, ул да - асфальт! Тик был ҡыуаныс 200-300 метрға ғына етә, арьяғында - йәһәннәм. Машина-автобустар кенгурунан кәм һикермәй. Баяғыса, Йылайыр тарафына үтеп барған Президент бөтә тирә-яҡ юлдар ҙа көҙгө кеүек ялтырап ята икән, тип уйлаһын өсөн генә эшләнгән тоҙаҡ булып сыға был 200 метр асфальт, сөнки Мортаза Ғөбәйҙулла улы уң яҡҡа боролоп киткән ауыл юлын күреп ҡалһа, мотлаҡ шул юлға боролорға ҡушасаҡ һәм бының һөҙөмтәһендә байтаҡ түрәләр йомшаҡ урындарынан осасаҡ ине. Ә былай 200 метрлыҡ асфальт түшәп кенә ҡотолоп ҡалғандар. Гәрлектең дә гәрлеге инде бөгөнгө заманда шундай юлдарҙан йөрөүе.

Баймаҡ районы түрәләренең, әйткәндәй, ошо юлдан бер булһа ла үткәне булдымы икән? Юҡтыр, тиғән һығымтаға килдем, сөнки улар был ғибрәт юлдарҙы күрһә, үҙҙәренең йомшаҡ урындарында татып ҡараһа, моғайын, берәһе булһа ла был хаҡта һүҙ күтәрер ине. Бәлки. Ә бәлки, юҡ, сөнки район башлығына ҡаршы һөйләгән кеүек була бит! Һәр кемгә лә йылыҡай урыны ҡәҙерле, ни әйтәһең инде...

Бөтөн мәсьәлә урындағы властар һәм халыҡ башланғысына килеп төртөлә: нинә ошо юлдан йөрөүсе Аҡморон, Аҡтау, Комсомол, Йомаш, Юлыҡ, Ишбирҙе, Йылым халҡы, ауыҙҙарына һыу уртлағандай, бер ни өндәшмәй? Янғыҙ активистарҙы ни көткәне билдәле, шуға күрә күмәк хат менән төрлө урындарға, республиканың Ҡоролтай - Дәүләт Йыйылышы, РФ Дәүләт Думаһы депутаттарына мөрәжәғәт итмәй? Республика Башлығына бик күп яҙалар, әлбиттә, ул бер үҙе бөтәһен дә күҙәтеп тә бөтә алмаҫ, шулай ҙа күмәк ҡултамғалы хатты ул да укыр ине, бәлки, кем белә. Тамсы тама-тама таш тишә, тигәндәй, берәй һөҙөмтә булыр ине, моғайын да.

Ысын булһа, ошо маршруттағы ауылдарға газ килә ята икән, тиҙәр. Был юл буйынса теҙелеп яткан торбаларҙан да күренә былай. Ә инде тегеләй әйткәндә, газ үткәргесте лә Аҡморонға тиклем генә һуҙып, артабан шып туктап ҡалмаҫтар, тимә...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәпләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

# БАЛА САҠ ХЫЯЛЫҢА...

## тоғро ҡал!



***Мирас ҮҘӘНБАЕВ, З. Исмәғилев исемендәге Өфө сәнғәт институтының "7 егет" телепроектында ҡатнашҡан студенты, мультиинструменталист:*** Һәр кемебеҙ был юлды үткән, был һорауҙар алдында булған: төп белем алғандан һуң артабан мәктәптә ҡалырғамы йәки урта һөнәри уҡыу йорттарына уҡырға китергәме? Бына шул ҡайҙа уҡырға барырға, ниндәй һөнәр үҙләштерергә, тигән һорауҙар торған осорҙа ата-әсә уҡытырға теләгән һөнәр менән баланың үҙ күңеленә ятҡаны араһында һайлағанда, икенсеһенә өҫтөнлөк бирелһен ине. Әммә йәш кеше үҙе теләгән уҡыу йортонда, күңеленә ятҡан һөнәрҙе үҙләштергән саҡта һәм йәш белгес булып сыҡҡас та юлында осрап торған һынауҙарға бирешмәҫкә әҙер булырға тейеш.

Үҙем туғыҙынсы кластан һуң Сибай сәнғәт колледжында белем алдым һәм тиҫтерҙәремдең күптәренең артабанғы яҙмыштарын сәнғәткә бәйләмәүен, бала саҡ хыялдарын тормошҡа ашыра алмауын күреп, шул тиклем йәнем әрней торғайны. Дүрт йыл буйы ваҡыт әрәм итеп белем алғас, йә шул йүнәлештә эш башларға, йә артабан белем алыуҙы дауам итергә кәрәк ине бит. Әйтәйек, колледжда уҡып, ҡурайҙа өйрәнгәндәр аҙаҡ монтажлаусы булып китә. Ҡурай уйнау һәм цемент болғау - ике төрлө эш, әлбиттә, аҡса табыу, үҙеңде һәм ғаиләңде ҡарау мәсьәләһенә лә бәйле был. Бәлки, йәш кеше эш башлағанда уҡ күп аҡса эшләргә, уныш ҡаҙанырға теләйҙер. Минә лә ҡайсаҡ: "Мирас, нишләп һин ҡурайсы булып йөрөйһөң, бына мин бер йыл эшләнем, машина алдым", - тигәндәре бар. Улар һымаҡ монтажлаусы булып барһам, экскаваторға ултырһам, мин дә эшләй алам, әммә унан күңелемдә ҡәнәғәтләнеү хисе тоймайым. Шуға яратҡан һөнәрең буйынса эш хаҡы ҡәнәғәтләндермәһә, үҙең бер аҙ әүҙемерәк булып, төрлө ысулдарын табыуҙы өҫтөн ҡуям.

Бына яңыраҡ ҡына Санкт-Петербургта йөрөп ҡайттым, унан һуң өйҙә ике көн генәме йоҡланым да, Түбәнге Новгородҡа сығып киттем, иртәгә тағы ҡайҙа алып китерҙәрен белмәйем. Уның араһында юғары белем алырға, мәктәптә балаларҙы төрлө уйын ҡоралдары буйынса уҡытырға өлгөрәм. Шуға һис зарланырлыҡ түгел һөнәремә лә, эшемә лә.

Буласаҡ һөнәрен һайлауҙы еңеләйтеү өсөн балаларҙы мәктәптә 7-8 кластарҙа уҡ республикабыҙҙағы төрлө ойошма, предприятиеларға экскурсияға йөрөтөү, төрлө һөнәр кешеләре менән осраштырыу, эштең айышына төшөндөрөү бик яҡшы булыр ине, минеңсә. Мәҫәлән, бер көндө Баймаҡ ПМК-һына барып, унда ниндәй һөнәр кешеләре талап ителеүен күрһендәр. Йәки Һаҡлыҡ банкына экскурсия ойошторолһон, йәки шунда эшләгән берәй хеҙмәткәрҙе мәктәпкә саҡырып, ул үҙенең хеҙмәт юлы тураһында һөйләһен. Балаларҙы шулай алдан әҙерләргә кәрәк. Юғиһә, сығарылыш класына етһәләр, ата-әсәһе бер йүнәлештә уҡытырға теләй, бала - икенсе, һөҙөмтәлә хатта уның фекерен һанға ла һуҡмауҙары бар. Аҙаҡ ул бала күңеленә ятмаған һөнәрҙе үҙләштереп, яратмаған эштә эшләүенә зарланып йәшәй - былдай осраҡтар бихисап.

Бөгөн йәштәргә бер нисә сит тел белеүҙең дә мөһимлеген билдәләп үткем килә. Мәктәптә уҡыған йылдарҙа инглиз телен өйрәнеүгә артыҡ иғтибар итмәгәнмен, аҙаҡ артынан ҡыуырға кәрәк булды. Бөгөн хатта иретеп йәбештереүсегә лә инглиз телен белеү кәрәк, үҙ һөнәреңдең оҫтаһы булыуҙан тыш, донъяның ҡайһы өлөшөндә лә үҙеңә эш таба аласаҡһың. Сәнғәт кешеһенә лә сит тел белеү бик күп өҫтөнлөктәр бирә: ҡурайҙа уйнап, сәхнәнән төшөп китеү генә түгел, үҙең һәм уйын ҡоралың тураһында һөйләп тә таныта алаһың. Әлбиттә, беҙ бөтә донъя белеме ҡулдағы телефонда булған заманда йәшәйбеҙ һәм бының менән ҡулланырға, үҫешергә, файҙалана белергә лә кәрәк.

**Сәүиә МӨХӘМӘҘИЕВА яҙып алды.**

СӘХИФӘНӘН

# ЕЙӘНЕМ, ЕЙӘНСӘРЕМ, ТИП ӘЙТСӘЛЕ....



**Ҡолаҡҡа ятмаған берәй йыр йырлаусыны тәнҡитләһәң - "Йырҙың йыртығы юҡ", тип, балаларына әллә ниндәй сит-ят исем ҡушҡандарға иҫкәртеү яһаһаң - " Исемдең матуры, ҡотһоҙо булмай" тип аҡланыуҙарҙы йыш ишетәбеҙ генә түгел, ә ул күренештәр хәҙер ғәҙәтигә әйләнде.**

Һеҙ нисектер, әммә мин ошондай саҡта Сыңғыҙ Айтматов әҫәрендәге "манҡорт"то иҫкә төшөрәм. Шул образды күҙ алдына килтерһән, өс башҡорттоң икеһе маңкорт булып сыға. Ни өсөн? Сөнки башҡорт үҙенең асылын онотто. Был бик әсе хәҡиҡәт! Мәҫәлән, яңы тыуған бәпестәргә ҡушылған исемдәргә иғтибар иткәндә генә лә ошондай һығымтаға киләһең. Ҡарағыҙ, ул ниндәй Аделина, Ангелина, Вадим, Юля, Карина, Адриана, Джулия, Ева, ти инде!

Үҙ-ара аралашыуҙарҙа туғанлыҡ терминдарының, шулай уҡ кешегә апай йә ағай тип, йәш буйынса атап өндәшеүҙәрҙең юҡҡа сығыуы ла бор-

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, пандемия башланғандан алып - 371 176, һуңғы тәүлектә 55 кеше коронавирус менән ауырыған. Стационарҙарҙа 88 кеше дауалана, уларҙың 47-һе 60 йәштән өлкәндәр. 805 кеше амбулатор дауалана, уларҙың 363-ө өлкәндәр. Вирус 6105 кешенең ғүмерен өҙгән, аҙаҡҡы осорҙарҙа үлем осраҡтары теркәлмәгән.

✓Республикала 85 процент майҙанда уңыш йыйып алынған тиерлек. 10 район урып-йыйыу кампанияһын тамамлаған. Яҡынса 280 мең гектар уңышты йыйып алырға ҡалған, был башлыса ҡарабойҙай, һоло, кукуруз, тип хәбәр итте вице-премьер, ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов. Бойҙай һуғыу буйынса Стәрлетамаҡ районы лидер, бында аграрийҙар 180 мең тонна уныш йыйып алған. Артабан исемлектә - Ауырғазы (130), Ҡырмыҫҡалы (127), Дәүләкән (109), Шишмә (109) райондары.

✓2023 йылда Башҡортостан орлоҡ экспортын 30 процентҡа арттырған. Вика, гәрсис, ҡандала үләне, люцерна, эспарцет, тары орлоҡтарынан торған 70 партия Әрмәнстан, Беларусь, Германия, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстанға оҙатылған, уларҙың дөйөм күләме - 1352 тонна. "Россельхознадзор"ҙың Башҡортостан буйынса идаралығы билдәләүенсә, орлоҡтар бөтөн экспертизаларҙы үткән һәм һатып алыусы илдәрҙең талаптарына тулыһынса яуап бирә.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай тураһындағы законға үҙгәрештәр индерелә. Ведомствоның матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, даими эшләгән комитеттар структураһына рәйестең беренсе урынбаҫары вазифаһы индерелә. Парламент рәйесе Константин Толкачев әйтеүенсә, был профилле комитеттар эшен сифатлыраҡ итергә, вәкәләттәрҙе аныҡыраҡ бүлергә һәм тәҙәйенләргә булышлыҡ итәсәк. Әле закон Башҡортостан Башлығына ҡул ҡуйыу өсөн ебәрелгән.

✓Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы белдереүенсә, быйыл 11 октябрь - Республика көнөндәге ял көнө шаршамбыға тура килә. Шишәмбе эш сәғәте 1 сәғәткә ҡыҫҡара. РФ Хеҙмәт кодексына ярашлы, байрам отпуск ваҡытына эләгә икән, ул бер көнгә оҙайтыла.

✓ *Был форумдың иң төп сит ил ҡунағы кем булды, тип беләһегеҙ? Төньяҡ Корея етәксеһе Ким Чен Ын. Ул Рәсәйгә бронепоезда килеп төштө - бына кемдең визиты Көнбайыш киң мәғлүмәт сараларында шау-шыу тыуҙырҙы!*



*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ДУҪТАР ЙЫЙЫЛҒАН ЕРҘӘ

**Үткән аҙналарҙа донъяны шаулатҡан ваҡиғаларҙың иң мөһим беренсеһе - Көнсығыш иҡтисади форум (ВЭФ-2023) һәм уның пленар ултырышында РФ Президенты Владимир Путиндың сығышы булһа, ҡалғандары хаҡында мәҡәлә һуңында әйтелер.**

Ил етәксеһенең телмәре был юлы йыйнаҡ һәм ҡыҫҡа булды, сөнки ул нигеҙҙә Алыҫ Көнсығыш мәсьәләләренә генә бағышланғайны. Шуға ла, күрәһең, Kommersant-ru күҙәтеүсеһе мәрәкәләүенсә, икенсе сәғәт поясынан килгән вәкилдәр хатта "серем итергә лә" өлгөрмәй ҡалды. Ҙур залдың түге "почетлы" рәтенән Рәсәй бизнесмендары урын алғайны. Уларҙан тыш, беренсе рәттә ярайһы ҙур делегацияны тәшкил иткән Ҡытай бизнесмендары ултырҙы. Дөйөм алғанда, форум эшендә 62 илдән 7000-гә яҡын кеше, ә уның сессияларында 700 спикер һәм журналист ҡатнашты. "Рәсәйгә теләктәшлек күрһәткән илдәрҙән тыш, унда АҠШ, Бөйөк Британия, Япония, Германия һәм Франциянан да вәкилдәр килде. Күрәһең, Алыҫ Көнсығыш мәсьәләләре уларҙы ла нығ ҡыҙыҡһындыра",- тине вице-премьер һәм Президенттың ошо төбәк буйынса тулы хоҡуҡлы вәкиле Юрий Трутнев.

Үҙенең сығышында Владимир Путин Алыҫ Көнсығыштың һуңғы ун йылдағы үҫешенә йомғаҡ яһаны. Был йылдар эсендә, Президент билдәләүенсә, Алыҫ Көнсығыш проекттарын бойомға ашырыуҙа дәүләт ярҙамы менән 7,7 триллион һумдан ашыу инвестиция килешеүенә ҡул ҡуйылған, 125 мең эш урыны булдырылған, 700-ләп яңы предприятие эш башлаған. Бынан тыш, федераль округ төбәктәренә финанс ағымы үҫеше дөйөм Рәсәй күрһәткесенән өс тапҡырға артып киткән. "Алыҫ Көнсығыш федераль округы Рәсәй территорияһының 40 процентын тәшкил итә, - тине сығышында В.Путин. - Бында беҙҙең урмандарҙың һәм алтын запасының яртыһы тип әйтерлек тупланған, балыҡтың һәм алмаздың - 70 проценты, титан, баҡырҙың - 30 проценттан ашыуы һәм башҡалар. Мөһим стратегик предприятиелар, диңгеҙ порттары һәм тимер юлдары эшләй. Ҡыҫҡаһы, илебеҙ, уның киләсәге, күп йүнәлешле донъяла Рәсәйҙең урыны өсөн Алыҫ Көнсығыштың әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ... Алыҫ Көнсығыштың алдынғы темптар менән үҫеше - тотош XXI быуатҡа беҙҙең иң ҙур приоритет", - тип билдәләне ил Президенты. Артабан был төбәккә бәйле ниндәй мөһим пландар һәм ниәттәр менән таныштырҙы ул форумда ҡатнашыусыларҙы? Был, иң беренсе сиратта, Алыҫ Көнсығыш үҫеше сиктәрендә



бойомға ашырыласаҡ "Себер ҡеүәте" менән Сахалин - Хабаровск - Владивосток газ үткәргестәрен берләштереп, уны илдең берҙәм газ тәьминәте системаһына индереү. Шуның менән бергә БАМ һәм Транссиб тимер юл магистралдәрен яңыртыуҙы дауам итеү, башҡа мөһим проекттарҙы ғәмәлгә ашырыу күҙаллана.

Президент В. Путиндың сығышынан һуң пленар ултырыш "сәхнәһе" уны алып барыусы РБК телеканалы директоры Илья Доронов ҡарамағына күсте, тиһәң дә була, сөнки артабан формат уның һорауҙарына Президент яуаптарынан торҙо һәм был залда бермә-бер йәнләнеш тыуҙырҙы. Ни тиһәң дә, Илья Доронов былтырғы баҫалҡыраҡ тәжрибәһенән һуң быйыл ярайһы ҡыйыулана төшкән һәм ил етәксеһенә урыны менән "уңайһыҙыраҡ" тойолған һорауҙар биреүҙән дә тартынып торманы. Хәйер, Владимир Владимирович та юғалып ҡала торғандарҙан түгел, ул модераторҙың һәр һорауына ентекле яуаптар бирҙе, хатта бер нисә тапҡыр залдағыларҙы көлдөрөп тә алды. Ғөмүмән, уның тура һорауҙарға тура яуаптары ихлас ҡул сабыуҙар менән хупланды.

Шулай ҙа бер-ике моментҡа туҡталып китеү кәрәктер. Доронов Путиндың Рәсәй бизнесмендарына төбәп: "Аҡсағыҙҙы Рәсәйгә инвестициялағыҙ! Ниндәй хәлдәр барғанын күреп торабыҙ - бер үк тырмаға икенсе тапҡыр баҫмағыҙ!" - тип өндәшеүенә бәйле: "Уларға һаман барып етмәйме, ни өсөн ул хаҡта ҡабатлайһығыҙ?" - тигәнерәк һорау бирҙе. Президент капиталдарҙы Рәсәйгә һалыу ышаныслыраҡ, тине, сөнки, күреүебеҙсә, сит илдә Рәсәй бизнесмендары "ҡыҫымға алынды": Рәсәй активтары, шул иҫәптән санкция исемлегенә ингән дәүләт структураларының да, айырым кешеләрҙең дә аҡсалары "туңдырылды", ә уларҙың дөйөм суммаһы 280 млрд доллар тәшкил итә. Был аҡсаларҙы Көнбайыш властары Украинаға ярҙамға йүнәлтеүе ихтимал, тине Путин һәм бизнесмендарҙы ошонан ғибрәт алырға, бер үк тырмаға икенсе тапҡыр баҫмаҫҡа саҡырып, бер нисә тапҡыр иҫкәртеүе хаҡында әйтте.

Модераторҙың долларға ҡарата һумдың көсһөҙләнә барыуы хаҡындағы һорауы ла көнүҙәк ине. "Эйе, был мәсьәлә Үҙәк банк, РФ Хөкүмәте һәм "шулай тип аталыусы финанс властары" тарафынан ентекле тикшереүҙе көтә. Дөйөм алғанда, мин бында көс етмәҫтәй ниндәйҙер ҡатмарлыҡтар барҙыр, тип уйламайым... Был идара ителә торған хәл", - булды яуап. Сит ил, Рәсәй һәм Ҡытай машиналары, ил чиновниктарын ватан машиналарына күсеп ултыртыуҙы талап итеү, үҙебеҙҙең автомобиль төҙөлөшө тармағын үҫтереү хаҡында төплө һөйләшеү булды. Ағыулыҡҡа хаҡ артыуы мәсьәләһе менән Хөкүмәттә шөғөлләнеүҙәре хаҡында ла белдек, тик бынан әлегә бер ниндәй һөҙөмтә лә юҡ... Сит илгә китеүселәргә һәм унан кире ҡайтыусыларға Президент тыныс ҡарауын белдерҙе: "Рәсәй дәүләте сәйәсәте менән риза булмаҫҡа мөмкин, ләкин барыбер ошонда йәшәргә була, уларҙы бер кем дә ҡыумай... Ә бит улар сит илдәрҙә күсемһеҙ милек - йорт, фатирҙар һатып алған. Аҡсалары шунда. Улар шуны юғалтыуҙан ҡурҡа. Ҡайһыларына Рәсәйҙе тәнҡитләргә, ҡаршы һүҙ һөйләргә ҡушалар, талап итәләр..."

Шулай итеп, 10-13 сентябрҙә Владивостокта булып үткән 8-се Көнсығыш форумы Рәсәй менән Азия-Тымыҡ океан илдәренең эшлекле даирәләре өсөн һөйләшеп килешеү, аңлашыу майҙансығы булды. Унда "Рәсәй- АСЕАН", "Рәсәй-Һиндостан", "Рәсәй-Ҡытай", "Рәсәй-Монголия", "Рәсәй-Филиппиндар" берлектәге проекттарҙы бойомға ашырыу буйынса бизнес-диалогтар алып барылды. "Торт өҫтөнә - сейә" тигәндәй, был форумдың иң төп сит ил ҡунағы кем булды, тип беләһегеҙ? Төньяҡ Корея етәксеһе Ким Чен Ын. Ул Рәсәйгә бронепоезда килеп төштө - бына кемдең визиты Көнбайыш киң мәғлүмәт сараларында шау-шыу тыуҙырҙы! Эйе, был үҙенә күрә Көнбайыш менән АҠШ алдында иғтибарға лайыҡ ваҡиға ине, сөнки бөтөн донъяға ябыҡ булған илдең "серле" етәксеһе үҙе килеп төшһөнсәле! Путин менән Ким Чен Ындың осрашыуы АҠШ, Япония һәм Евросоюзда ярайһы ғына борсолоу тыуҙырҙы, тип яҙҙы мәғлүмәт сығанаҡтары бер тауыштан. Әйткәндәй, улар Төньяҡ Корея етәксеһенең, "Бөгөн Рәсәй үҙенең дәүләт суверенитетын һәм хәүефһеҙлеген яҡлау өсөн изге көрәшкә күтәрелде", тигән һүҙҙәрен цитата итеп килтерәләр. АҠШ менән "коллектив Көнбайыш" Рәсәйҙең Ҡытай һәм Төньяҡ Корея менән яҡынлашыуынан үҙҙәре өсөн сиктән тыш хәүефле коалиция барлыҡҡа килеүен күреп, асыуҙарынан шартлар хәлгә еттеләр, ләкин бер ни эшләй алмайҙар: яңы донъя ҡоролошона "поезд" ҡуҙғалды, аҙағы хәйерле булһын.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**10 сентябрҙә Владивостокта УШ Көнсығыш иҡтисади форумы башланған мәлдәрҙә Һиндостандың Нью-Дели ҡалаһында G20 төркөмөнөң саммиты, Рәсәйҙең Украиналағы хәрби операцияһы мәсьәләһен ҡарап тормайынса, донъя иҡтисады үҫеше, уны тотороҡло итеү мәсьәләләре буйынса йомғаҡлау декларацияһы ҡабул итеү менән тамамланды. Мәскәү был документты Рәсәйгә теләктәшлек күрһәтеүсе Глобаль Көньяҡ илдәре вәкилдәренең әүҙемлеге арҡаһында ирешелгән уңыш тип баһаланы. Декларацияла аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге һәм тирә-яҡ мөхиттең пластик һәм углеводород ҡалдыҡтары менән бысраныуы, яһалма интеллект, терроризм, ядро ҡоралы ҡулланмау кеүек пункттар теркәлде. Саммитҡа рәйеслек итеүсе Һиндостан ягы Украина мәсьәләһен ҡарауҙан баш тартыуын G20-нең геосәйәсәт бәхәстәре урыны түгел, ә иҡтисад форумы, тип белдерҙе.**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

сой мине. Мәҫәлән, өләсәйҙәрҙең "внугым, внучкам" тиеп һөйләшеүҙәре шулай уҡ ғәҙәткә инеп китте түгелме? Башҡортта шул тиклем наҙлы, матур "ейәнем, ейәнсәрем" тигән һүҙҙәр барлығын онотоп та бөттөләр, ахры. Аптырарлыҡ бит!

Ололарҙан ҡалған шундай ышаныу бар: ғаиләләге йә туғандар араһындағы бер оло кеше аша Юғары, хикмәтле көстәр Хоҙай тәғәйенләгән исемде бәпестең атай-әсәйенә ишаралап еткерә. Атай-әсәй был ишара-ымды ишетмәһә, бала ошо Хоҙай тәғәйенләгән исемдән мәхрүм ҡала, һөҙөмтәлә йә йыш ауырый, йә тағы ла ниндәйҙер ҡыйынлыҡтар кисерә. Ҡайһы берәүҙәргә төштәрендә икенсе, Хоҙай ҡушҡан исемдәре менән өндәшеү осраҡтары тураһында ла ишеткәнегеҙ барҙыр. Шулай кеше ике төрлө тормош менән йәшәй һәм ҡайһы яҡта булырға белмәй ҡаңғыра. Уны русса "раздвоение личности", тиҙәр...

Бер көндө радиола ла ошо башҡорт бәпестәренә сит-ят исемдәр ҡушыу темаһына арналған тапшырыу тыңланым. Көлкөгә бормай ғына ҡолаҡҡа элеп ҡуяйыҡ әле: дөрөҫ ҡушылһа ғына баланың исеме есеменә тура килә. Беҙ был хаҡта халҡыбыҙға туҡтауһыҙ аңлатырға бурыслы. Беҙ Адриана, Платон түгел, ә Әминә, Айтуғандар тыуҙырырға тейешбеҙ. Ошо өлкәлә тағы ла нимәләр эшләй алабыҙ? Әйҙәгеҙ әле, бергәләп уйлашайыҡ!

**Гәрәй КИЛМӨХӘМӘТОВ.**
**Ейәнсура районы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республикала балалар араһында респиратор инфекция таралды. Әлеге мәлдә киҙеүгә ҡаршы прививка кампанияһы бара. Башҡортостанға "Ультрикс" препаратының 850 мең дозаһы килде, ул балаларға, хроник сирлеләргә, ауырлы ҡатындаға тәғәйенләнә. Өлкәндәр өсөн "Совигрипп" вакцинаһы ҡулайлы.

✓РФ Оборона министры Сергей Шойгу мобилизация осоронда, хәрби положение, һуғыш осоронда контракт буйынса хәрби хеҙмәткә ниндәй сирҙәре булған граждандар саҡырыла алмауын махсус ҡарар менән аныҡланы. Исемлек 26 пункттан тора, диагноздар араһында 1-се типтағы диабет, ВИЧ, урта ауырлыҡтағы ҡурылдай астмаһы, күҙҙәрҙең насар күреүе, быуындар хәрәкәтен сикләгән йәрәхәт эҙемтәләре һ.б. бар. Был ҡарар хөкөм ителеүселәргә контракт буйынса хәрби хеҙмәтте рөхсәт итеүсе законды тормошҡа ашырыу өсөн булдырылған.

✓Башстат рәйесе итеп 37 йәшлек Илдар Ҙаһиҙуллин тәғәйенләнде. Илдар Заһиҙуллин Өфөлә тыуған, Өфө дәүләт авиация техник университетын тамамлаған. Статистика органдарында 2009 йылдан эшләй, 2018 йылдан ведомствоның рәйес урынбаҫары вазифаһында була.

✓Дәүләт Думаһы Советы депутаттары Рәсәй автомобилдәрендә генә йөрөйәсәк. 2024 йылдан һайланған округтарында депутаттар тик Рәсәй машиналары менән генә тәьмин ителәсәк. Быға тиклем парламенттың түбәнге палата рәйесе Вячеслав Володин Дәүләт Думаһы Мәскәүҙә хеҙмәт автотранспортын ватан маркаларына алыштыра башлауын хәбәр иткәйне. Был урындағы автомобиль етештереү сәнәғәтен үҫтерәсәк, ә бюджет саралары илдә ҡаласаҡ, тигән фекерҙә улар.

✓Беренсе Президент Мортаза Рәхимов исемендәге Башҡорт республика гимназия-интернатында йырсы Юрий Шатуновҡа мемориаль таҡтаташ ҡуйылды. Таҡтаташты асыу тантанаһы күренекле яҡташыбыҙҙың тыуыуына 50 йыл тулыуға арналды. Билдәле булыуынса, 1982-1984 йылдарҙа Юрий Шатунов Күмертау мәктәбендә белем алған. Ул саҡта уҡыу йорто Ю.А. Гагарин исемендәге 2-се мәктәп-интернат тип йөрөтөлгән.

***✓ Башҡортостан халҡы ялғанға ҡаршы көрәшергә, фактарҙың тап килмәүен аңларға һәм социаль селтәрҙәрҙә таратылған дөрөҫ булмаған мәғлүмәтте кире ҡағырға ярҙам итә ала.***



*ҠЫҪҠАСА*

# КИҘЕҮ БАШЛАНА

**Етди сәбәптәр булмаһа, Башҡортостанда респиратор инфекцияны ауырыуҙарына бәйле сикләү сараларын, шул иҫәптән битлек режимын индерергә уйламайҙар. Был турала Роспотребнадзорҙың төбәк идаралығы хәбәр итте.** Күҙәтеү ведомствоһы билдәләүенсә, ауырыу таралған ваҡытта учреждениелар үҙҙәре локаль сикләүҙәр индерә ала. Башҡортостанда грипҡа ҡаршы вакцинация дауам итә. Әлеге ваҡытта республиканың 672 мең кешеһе иммунизацияланған, тип белдерҙе республиканың Һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Айрат Рәхмәтуллиндан һәм Роспотребнадзорҙың төбәк идаралығы начальнигы Анна Казактан респиратор ауырыуҙарға контролде көсәйтеүҙе һораны. Республикала балаларҙың респиратор инфекция менән сирләү осраҡтарының артыуы күҙәтелә. Роспотребнадзорҙың Башҡортостан идаралығы төркөмдә йәки кластағы балаларҙың дөйөм һанының 20 проценты ауырыһа, бер тулы класс дистанцион уҡытыуға күсеү тураһында хәбәр итте.

✓ **2023 йылдың апреленән сентябргә тиклем "Һаулыҡ поезы" бригадалары республиканың 316 тораҡ пунктында булған һәм 150 190 кешене ҡабул иткән - был планлаштырылғандан өс тапҡырға тиерлек күберәк. Республика табиптары бөтәһе 22 012 ауырыуҙы асыҡлаған, һәр өсөнсө диагноз тәүге тапҡыр яһалған.** Был турала социаль селтәрҙәрҙә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итте. "Быйыл беҙ бизнесте тапҡыр "Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһын үткәрҙек. Алты маршрут булдырылды, республика ауылдары халҡы өсөн күсмә һауыҡтырыу үҙәктәре, фельдшер-акушерлыҡ пункттары, флюорограф һәм маммографтар, Ҡыуатов исемендәге республика клиник дауаханаһының диагностик комплексы, кардиомобилдәр, күсмә стоматология кабинеты эштәрен ойоштороҡ", - тине Радий Хәбиров һәм республикала һәр кешенең тикшереү үтергә һәм сифатлы медицина ярҙамын алыу мөмкинлеге булһын өсөн "Һаулыҡ поездары" артабан да эшләйәсәге хаҡында ла белдерҙе.

✓ **Ҡарасәй-Черкес Республикаһында "Иң яҡшы туған тел һәм туған әҙәбиәт уҡытыусыһы - 2023" Бөтә Рәсәй һөнәри конкурс асылды.** Быйыл унда 104 педагог ҡатнаша: иң яҡшы исемгә 72 уҡытыусы һәм 32 тәрбиәсе көс һынашасаҡ. Енеүсе үҙ төбәгендә конкурста ҡатнашыу хоҡуғына эйә була. Башҡортостандан Өфөнөң 202-се полилингваль балалар баҡсаһының өлкән тәрбиәсеһе Гөлсинә Ишбаева һәм Нефтекама башҡорт гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Гүзәл Гайсина сығыш яһай. Ойоштороусылар хәбәр итеүенсә, конкурстың йомғаҡлау сараһы 18-23 сентябрҙә Ҡарасәй-Черкес Республикаһы Черкесск ҡалаһында уҡытыусылар өсөн һәм Төньяҡ Осетия Республикаһының Владикавказ ҡалаһында - Аланияла - тәрбиәселәр өсөн үткәрелә. Конкурс 23 сентябрҙә гала-концерт һәм еңеүселәрҙе бүләкләү менән тамамлана.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

## БУЛАСАҠ ГЕОЛОГТАР ЯРЫША

**Баш ҡалабыҙҙа "ГеоВызов" тип нарыҡланған беренсе Халыҡ-ара геологик чемпионат булып үтте. Унда Рәсәйҙең 17 төбәгенән - 20 (Грозный, Владивосток, Төмән, Пермь, Мәскәү, Ҡаҙан, Магнитогорск, Красный Луч, Һамар, Новосибирск, Екатеринбург, Миәс, Санкт-Петербург ҡалаларынан) һәм Ҡаҙағстандан бер команда, Башҡортостандан Өфө дәүләт нефть техник университеты, Өфө фән һәм технологиялар университеты һәм Октябрьскийҙың нефть колледжы командалары ҡатнашты.**

Рәсәйҙең һәм Ҡаҙағстандың урта махсус һәм юғары һөнәри белем биреү уҡыу йорттарының геологик профиле студенттары өсөн 6 көн буйына геология фәне һәм практикаһы буйынса ярыштар һәм конкурстар, мәҙәни һәм спорт саралары, экскурсияларға, музейҙарға йөрөү, геологик семинарҙар һәм остаз-кластар ойошторолдо. Чемпионат 11 этаптан торҙо, уларҙа ҡатнашыусыларҙың геология буйынса теоретик һәм ғәмәли белем-күнекмәләренә баһа бирелде. "Роснедра" етәксеһе Евгений Петров ошо чемпионаттың тәүләп Башҡортостанда уҙғарылыуына айырым баҫым яһаны: "Башҡортостан үҙенең геологик мәктәбе менән дан тота, ул илебеҙҙә иң алдынғыларҙан һанала. Был үтә бай тараф, бында тәбиғи ресурстар бик күп. Республикала барса эталон геологик киҫелештәре урынлашҡан һәм һеҙгә уларҙы ҡарап сығыу мөмкинлеге бар. Беҙҙең илебеҙҙәге һәр бер геолог та ошондай киҫелештәрҙе барып күреүе менән маҡтана алмай, ә һеҙ уларҙа эшләй ҙә алаһығыҙ. Һәм был һеҙҙең геолог булараҡ үҫеүегеҙ өсөн бик мөһим. Яҡын йылдарҙа һеҙ үҙләштергән компетенциялар беҙҙең иҡтисад өсөн асҡыс кеүек буласаҡ, сөнки һәр бер етештереү сылбыры башында минераль-сеймал базаһы тора", - тине ведомство етәксеһе.

## МЕДИЦИНА КАДРҘАРЫ ҠЫТЛЫҒЫ...

**Һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә бар замандарҙа ла кадрҙар мәсьәләһе үтә мөһим булған. Бер нисек тә инҡар итеп булмай - йыш ҡына, бигерәк тә төпкөлдәге район һәм ауылдарҙа, кесе медицина персоналына ҡытлыҡ кисерелә. Өфөлә медицина колледжында уҙғарылған кәңәшмәлә тап бына ошо проблемалар хаҡында һүҙ барҙы.**

Бында Рәсәйҙең һаулыҡ һаҡлау министры Михаил Мурашко ла сығыш яһаны. "Беҙҙең медицина учреждениелары юғары технологиялы йыһаздар менән тәьмин ителгән, һәм уларға уҡып сыҡҡандан һуң килгән медицина персоналының барса һөнәри күнекмәләргә эйә булыуы, ҡатмарлы медицина приборҙары менән эшләй белеүе фарыз. Мәғлүмәти системалар - яңы йүнәлеш, улар йәштәрҙән яңы белемдәр талап итә. Беҙ Рәсәйҙең барса төбәктәрендә лә яһалма интеллект программаларын индерәбеҙ, шуға күрә медицинала ғы үҙгәрештәр медперсоналға яңы талаптар ҡуя. "Земский фельдшер" программаһы һәм амбулатория-поликлиника звеноһындағы, үҙәк район дауахаһаларындағы медицина персоналына өҫтәмә социаль түләүҙәр медицина хеҙмәткәренә үҙен-үҙе тулыһынса раҫлар өсөн кәрәк булған контурҙы хасил итә. Медицина ярҙамын күрһәтеү менән генә түгел, яңы технологиялар менән эш итә белеү ҙә ҡәнәғәтләнеү килтерә ала", - тине министр. Ул ФАП-тарҙы транспорт менән тәьмин итеү менән генә ҡәнәғәтләнмәйенсә, фельдшерҙарҙың үҙҙәрен ошо машиналарҙы ҡуллана алырлыҡ кимәлдә автомобиль йөрөтөргә өйрәтеү зарурлығы хаҡында ла әйтеп китте. Ул Башҡортостанда "Цифрлы ФАП" программаһының бик һөҙөмтәле ғәмәлгә ашырылыуына ла һәйбәт баһа бирҙе. Әлеге көндә Башҡортостандың медицина колледждарында 8755 студент белем ала. Уҡыуҙарын тамамлағас, уларҙың 85 - 90 проценты дәүләт медицина учреждениеларына эшкә килә. Был, әлбиттә, бик яҡшы күрһәткес.

## АУЫЛ ИПОТЕКАҺЫ БУЛАСАҠ!

**Рәсәйҙең Ауыл хужалығы министрлығы 2024 йылда ауыл ипотекаһы программаһын тергеҙергә иҫәп тота һәм 2023 йылдың аҙағына тиклем ауыл хужалығы тармағын льготалы кредитлауҙы тергеҙеү өҫтөндә эшләй.**

Был хаҡта 6 сентябрҙә Дәүләт Думаһының контроль һәм аграр мәсьәләләр буйынса комитеттарының берлектәге ултырышы барышында ауыл хужалығы министры Дмитрий Патрушев белдерҙе. "Льготалы ипотеканы яңы йылдан башларбыҙ тип уйлайым... Аҡсаның бер өлөшө, ысынлап та, бөттө, төп ставканың артыуын иҫәпкә алып, беҙҙең элек бирелгән кредиттар буйынса бурыстар күбәйҙе. Шуға ҡарамаҫтан, аҡса алырбыҙ һәм яңы йылда ауыл ипотекаһын бирә башларбыҙ тип уйлайым", - тине Патрушев.

Билдәле булыуынса, вәкәләтле банктар Үҙәк банк төп ставкаһын йылына 12 процентҡа тиклем арттырғандан һуң 25 августан "Ауыл ипотекаһы" программаһы буйынса яңы ипотека кредиттарын биреүҙе ваҡытлыса туҡтатҡайны. Хәбәр ителеүенсә, ауыл ипотекаһы проекты 2020 йылда "Ауыл биләмәләрен комплекслы үҫтереү" программаһында төп проекттарҙың береһе булараҡ эшләй башланы һәм ҙур популярлыҡ менән файҙаланды, бигерәк тә Башҡортостанда. 2022 йылда "ауыл ипотекаһы" мөҙҙәтһеҙ тип иғлан ителде, ә 2023 йылдың июлендә уның күләме 6 миллион һумға тиклем арттырылды. Ауыл ипотекаһының ставкаһы 3 проценттан артмаЙ. 2023 йылдың тәүге алты айында торлаҡ һатып алыу өсөн льготалы программа буйынса дөйөм суммаһы яҡынса 1,2 миллиард һумлыҡ кредиттар бирелгән.

## ЯЛҒАНҒА ҠАРШЫ - БЕРГӘЛӘП!

**Башҡортостан халҡы ялғанға ҡаршы көрәшергә, фактарҙың тап килмәүен аңларға һәм социаль селтәрҙәрҙә таратылған дөрөҫ булмаған мәғлүмәтте кире ҡағырға ярҙам итә ала.**

Республика менән идара итеү үҙәге мәғлүмәттең теүәллеген тикшереү буйынса инструкция һәм мөһим ҡағиҙәләр баҫтырып сығарҙы. Уны "Лапша Медиа" проекты ярҙамында эшләргә мөмкин. 2023 йылда интернет селтәрендә 12,5 миллиондан ашыу фейк барлыҡҡа киләсәк - бындай фаразды проект белгестәре бирә. Ике йылда ялған хәбәр 8 тапҡырға артты, икенсе йыл тағы ла күберәк буласаҡ. Мәҫәлән, әлеге ваҡытта мессенджерҙарҙа һәм чаттарҙа, йәнәһе, Ишембай районының Эткол ауылында бөшмәк йыйыусы ир менән ҡатынды айыу талауы тураһында фейк таралды. Әммә был мәғлүмәтте Башҡортостан буйынса Рәсәй Гәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Баш идаралығы ла, республиканың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты ла раҫламаны. Эткол ауылының үҙендә лә был хаҡта бер кем дә белмәй. Фотоһүрәттәрҙең беҙҙең республика менән бер ниндәй ҙә бәйләнеше юҡ. Ул интернет селтәрендә 2016 йылдан алып йөрөй. Фактың дөрөҫлөгөн һәр кем "Лапша Медиа" проекты аша кире ҡаға һәм үҙенең ферен яҙа ала. Алданмағыҙ һәм башҡаларға ла быны асыҡларға ярҙам итегеҙ, был хаҡта һөйләгеҙ, тип өндәй проектты ойоштороусылар.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡорт опера һәм балет театры Рәсәйҙең Ҙур театрында сығыш яһаны. Өфө артистары театрҙың тарихи сәхнәһендә Николай Римский-Корсаковтың "Садко" операһын тәҡдим итте. Премьераға Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров һәм абруйлы ҡунаҡтар саҡырылғайны. Мәскәү тамашасыһына үҙенең премьера спектаклдәрен күрһәтеү Башҡорт опера һәм балет театры өсөн йолаға әүерелде. Рәсәйҙең Ҙур театрының тарихи һәм яңы сәхнәләрендә "Фауст" (2019), "Аттила" (2020), "Дон Кихот" (2021) һәм "Vita Nuoxa" (2022) опералары башҡарылды.

✓ Башҡортостандың ауыл хужалығы министрлығы "Татлы бал" йәрминкәһенең һөҙөмтәләрен билдәләне. Ул үткән аҙнала Өфөнөң бөтөн райондарында ла үткәйне. Унда республиканың 30 районынан 120 умартасы үҙенең продукцияһын тәҡдим иткән. Йүкә, сәскә, солоҡ балдарының дөйөм күләме 15 тоннаға еткән.

✓Өфөләргә үҙен бәхетле тойоу өсөн айына 205 мең аҡса етә, тип яҙа SuperJob. Был ресурс бөтөн ил буйынса һорау алыуҙар ойошторған. Мәскәүҙәр - 265, Санкт-Петербург һәм Владивосток халҡы - 230, Хабаровскиҙа йәшәүселәр 220 мең, тип яуап биргән. Ярославль, Барнаул, Киров, Волгоградта был һан 177-180 мең һум тирәһендә. Өфөләр иһә йыышраҡ 205 мең һум, тигән. 2022 йылдың октябрендә был сумма - 185, 2019 йылда - 170, 2018 йылда 169 мең һум тәшкил иткән.

✓Өфөнөң Нижегородка микрорайонында "Ҡурай сәскәһе" тип аталасаҡ сквер барлыҡҡа киләсәк. Урындағы халыҡ бындай тәҡдим менән депутаттарға мөрәжәғәт иткәйне. Унда күп функциялы спорт майҙансығы буласаҡ, уны баш ҡала бюджетынан һәм республика субсидияларынан финанслау ҡаралған. 30 сентябрҙә "Йәшел Башҡортостан" республика акцияһы сиктәрендә скверҙа эре олонло ағастар ултыртыла.

✓Баш ҡала урамдарын сүп-сарҙан таҙартыу өсөн тәүге шәмбе өмәләре үтте. Унда торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәте эшселәре, предприятие, йәмәғәт ойошмалары ҡатнашты. Барлығы 565 берәмек техника йәлеп ителгән, 2517 кубометр сүп сығарылған, парк, урман парктары, скверҙар таҙартылған. Киләһе өмәләр 23, 30 сентябрҙә үтә. 23 сентябрҙә "Йәшел Башҡортостан" акцияһының көҙгө этабы була.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ *Төбәктең үҙенсәлектәрен өйрәнгәндә үҙем дә хатта хайран ҡалдым, бактиһәң, тик Башҡортостанда ғына егеүгә ҡулайлаштырылған һарыҡ төрөн сығарғандар! Донъяла бүтән ундай һарыҡ юҡ икән.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ӘЙҘӘ, УЙНАРҒА!



**(Башы 1-се биттә).**

Йәки балаға дуҫлыҡ, ярҙамсыллыҡ кеүек мөһим төшөнсәләрҙе аңлатҡан, яҡшылыҡҡа, тәртипле булырға өндәгән совет осоро йәнһүрәттәре, халыҡтар әкиәттәре геройҙарын һынландырған уйынсыҡтар сит ил ҡиммәттәрен сағылдырғандарынан өҫтөнөрәк түгелме? Был турала "Фанкластик" конструкторын етештереүсе "ХИЗ" акционерҙар йәмғиәтенең коммерция директоры Нина Мышанская менән әңгәмәбеҙ файҙалы булды: "Беҙ Дмитрий Соколов уйлап тапҡан балалар конструкторын етештерәбеҙ. Мәктәпкә тиклемге һәм башланғыс синыф уҡыусылары өсөн эшләнгән улар. Конструктор менән бергә методик ҡулланмала үҙебеҙҙең мәҙәниәт, тарих, көнкүреш тураһында бик файҙалы мәғлүмәттәр ҙә тәҡдим итәбеҙ. Фестивалгә әҙерләнгәндә "Тыуған ауыл" тигән яңы йыйылма эшләнек. Унда балалар башҡорт ауылы, тирмәһе, балағаны, аты һәм башҡа элементтарҙы төҙөгән арала тарих та һөйләйәсәкбеҙ. Шулай уҡ балалар "Ҡуныр буға" башҡорт халыҡ әкиәтен тыңлаясаҡ, ҡуңыр буғаны йыйырға өйрәнәсәк. Төбәктең үҙенсәлектәрен өйрәнгәндә үҙем дә хатта хайран ҡалдым, бактиһәң, тик Башҡортостанда ғына егеүгә ҡулайлаштырылған һарыҡ төрөн сығарғандар! Донъяла бүтән ундай һарыҡ юҡ икән. Башҡорт халҡының борон өҫтөнлөклө этнос булыуын, илде яҡлап бик күп һуғыштарҙа ҡатнашыуын, төбәктәргә ҡарап торлаҡ-көнкүреш шарттарының айырылып тороуын да белеп ғәжәпләндем. Шуға конструкторҙа башҡорт тирмәһен генә түгел, башҡорт балағанын да тәҡдим иттек. Бөгөн майҙансығыбыҙға килгән кескәйҙәрҙе түҙемһеҙләнеп көтәбеҙ, был белемдәрҙең барыһын да улар менән бүлешке килә. "Фанкластик" конструкторы балаларға ниндәйҙер фигуралар төҙөргә, ҡул хәрәкәттәрен үҫтерергә генә ярҙам итеп ҡалмай, донъяға ҡараштарын, белемдәрен киңәйтергә лә ярҙам итә", - тине Нина Мышанская.

"Әйҙә, уйнарға!" фестивалендә уйынсыҡ етештереүселәрҙән тыш, мәктәпкәсә белем биреү ойошмалары, ата-әсәләр өсөн консультация үҙәге, театрҙар, балалар баҫмалары, музейҙар, төрлө шөғөл оҫталарына ла урын табылды. Балалар бигерәк тә төрлө интерактив уйындарҙа, оҫталыҡ дәрестәрендә ихлас ҡатнашты, яңы уйынсыҡтарҙы һынап ҡараны, күңелендә ятҡан шөғөлдәрҙе үҙләштерҙе, "йәнле" уйынсыҡтар менән фотоһүрәткә төштө. Күптән түгел Башҡортостан кинотеатрҙарында күрһәтелә башлаған "Төньяҡ амурҙары" анимацион фильмы геройҙары ла килде был фестивалгә, кемдәрҙер улар менән фотоға төшөргә, тауышландырған кешеләргә һорауҙар бирергә өлгөрҙө. Совет балаларының яратҡан "Простоквашино", "Чебурашка" йәнһүрәттәренең айырым майҙансыҡтары бар ине һәм унда ла балалар ваҡыттарын бик ҡыҙыҡлы үткәрҙе. "Милли уйындар" майҙансығында иһә, балаларға уҡ атыу, Аҡбуҙат һәм Һомайҙың ағастан эшләнгән һындарын буяу, әүҙем уйындар ҙа ойошторолдо. Республика Халыҡ ижады үҙәге методисы Линиза Солтанғужина әйтеүенсә, бындай майҙансыҡты улар тәүге тапҡыр ғына ойоштормай. Санкт-Петербург ҡалаһында уҙғарылған Башҡортостан Республикаһы көндәрендә лә ошондай әүҙемлектәрҙә балалар бик теләп ҡатнашҡан, бигерәк тә уҡ атыуға сиратҡа теҙеләләр икән. Был майҙандың иң үҙенсәлекле күренеше - кейеҙҙән һуғылған шахмат булғандыр. Уйынсыҡты Сибай ҡалаһынан билдәле сәсәниә, фольклорсы, педагог Асия Гәйнуллина эшләгән. Балалары менән фестивалде килеп күргән ата-әсәләр шулай уҡ ағас уйынсыҡтарҙың бик сифатлы һәм мауыҡтырғыс булыуын, оҫталыҡ дәрестәренең төрлөлөгөн, виртуаль ысынбарлыҡ күҙлектәрен ҡыҙыҡһынып ҡарауҙарын, саҡырылған ҡунаҡтарҙың матур сығыштарын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

- Балалар менән килһәң, бында 4-5 сәғәт йөрөүҙе планлаштырырға кәрәк. Улыма 5 йәш, уға төрлө башватҡыстар, тәҙөп-ҡорай торған уйынсыҡтар оҡшай, өҫтәл уйынсыҡтарын ярата. "Простоквашино" йәнһүрәтен дә яратып ҡарай, сарала улың геройҙары - "тере" ҡурсаҡтар менән фотоға төшөүҙе лә әллә күпме ыңғай хәтирәләр уятты. "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосы геройҙарын матур итеп эшләп һатыуға ҡуйыуҙары, кисәге генә барып ҡараған "Төньяҡ амурҙары" йәнһүрәтенә ҡағылышлы стендтар ҙа бик оҡшаны. Гөмүмән, балалар өсөн Башҡортостанда сығарылған йәтешйәтеш әйберҙәрҙе бер урында күреп ҡыуандым. Бындай махсус сараларҙа ғына түгел, көндәлектә ҡапыл кәрәк булғанда милли уйынсыҡтарҙы барып һатып алыр бер урын булһа икән, - тине фестиваль тураһында Өфө ҡалаһынан Айгөл Вәлиева.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Дүрт көн эсендә Өфөләге "бала саҡ иле"нә 250 меңдән ашыу кеше "сәйәхәт ҡылған". Рәсәй мәғариф министры Сергей Кравцов үткәргән кәңәшмә барышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров был көтөлмәгән һөҙөмтә булыуын билдәләп, "Әйҙә, уйнарға!" Бөтә Рәсәй уйын фестивале киләһе йылда ла уҙғарыласағы тураһында хәбәр иткәс, министр уға федераль кимәл бирергә тәҡдим итте. "Был бик дөрөҫ һәм актуаль сара. Мәғариф министрлығы уны үҙ ҡанаты аҫтына алырға һәм финанслау мөмкинлеген ҡарарға әҙер", - тине Сергей Кравцов. Был иһә, "Әйҙә, уйнарға!" фестиваленең киләсәктә тағы ла киңерәк ҡолас алырына, тимәк, балаларыбыҙ өсөн уйынсыҡ һәм уйындарҙың йөкмәткеле һәм хатта асылыбыҙға ярашлы булыуы хәстәрләнеренә ишара.**

**Айгөл ҒАБДИНОВА.**

ҠЫҪҠАСА

# ЯҢЫ ИЖАДИ КИҢЛЕК

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров студенттар һәм ғалимдар өсөн яңы эш һәм ижади киңлектә - Евразия фәнни-мәғариф үҙәге йортонда булды. Ул 2023 йылдың авгусында республиканың Фәндәр академияһында асылды.** Башҡортостан Башлығын күп функциялы спорт майҙансығы һәм воркаут булған фиджитал-үҙәк төҙөү концепцияһы, шулай уҡ ғилми үҙәктең киберспорт клубы аудиторияһында балалар өсөн фәнни майҙансыҡ менән таныштырҙылар. Фиджитал-үҙәк киберспорт клубын һәм спорт майҙансыҡтарын берләштергән үҙенсәлекле спорт инфраструктураһы объекты булып тора. Унда Playstation, VR һәм компьютер зонаһы йыһазландырыла, "аҡыллы" спорт майҙансығында мини-футбол, баскетбол, паннафутбол, воркаут менән шөғөлләнергә мөмкин. Радий Хәбиров ошондай үҙәк булдырыу идеяһын хупланы һәм уны төҙөү өсөн участка һайлау буйынса тәҡдимдәр индерергә ҡушты. "Донъя кимәлендәге Евразия ғилми-белем биреү үҙәге ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә республиканың фән һәм юғары белем биреү үҫешенә этәргес бирҙе. Бында беҙ фән ҡаҙаныштарын, бизнес һәм юғары мәктәпте берләштерәбеҙ", - тине Радий Хәбиров йәш ғалимдар һәм аспиранттар менән аралашыу барышында.

✔ **Башҡортостанда быйылғы миҙгелдә 28 муниципалитетта 77 бина яңыртылған. Был мәктәптәрҙә 1 сентябрҙән 17 мең самаһы бала уҡый башлаған.** Уҡыу йылы башланғансы ремонт эштәре ике йыл дауам иткән (Мишкә, Бәҡалы, Бөрө райондарында һәм Стәрлетамаҡта) һигеҙ мәктәптә, Стәрлебаш районындағы ике мәктәптә, мәктәптәрҙе яңы ҡорамалдар менән йыһазландырыуҙы иҫәпкә алып, тамамланды. Ремонт яһалған мәктәптәрҙең һаны буйынса республика Рәсәйҙә икенсе урында тора. "Быйыл яңыртылған 63 мәктәпкә 21 меңгә яҡын уҡыусы барҙы. Быйыл 16,6 мең бала белем алған 77 мәктәптә ремонт башҡарыла. 2026 йылға тиклем республикала бөтәһе 365 белем усағын капиталь ремонтлау планлаштырыла. Ике йылда 140 мәктәптә төҙөкләндерҙек", - тип белдергәйне Радий Хәбиров мәғариф буйынса республика август кәңәшмәһендә.

✔ **Өфөлә йыл башынан 905 юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән, был уҙған йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда 24 осраҡҡа аҙыраҡ.** 10 кешенең ғүмере өҙөлгән, 1109-ы төрлө дәрәжәләге йәрәхәттәр алған. Был турала Эске эштәр министрлығының Өфө буйынса идаралығының ЮХХДИ бүлеге етәксеһе, полиция подполковнигы Рауил Бикбулатов хәбәр итте. "Юл фажиғәләренең һаны ғына түгел, зыян күргәндәр ҙә аҙайҙы, юлдарҙа үлем осраҡтары 68 процентҡа тиерлек кәмене, ләкин Өфөнөң Калинин һәм Совет райондарында юл-транспорт ваҡиғаларының һәм йәрәхәтләнгәндәрҙең артыуы билдәләнә", - тип хәбәр итте Рауил Бикбулатов. Уның һүҙҙәренсә, автоһәләкәттәрҙең йыш теркәлгән төрө - бәрелешеү һәм йәйәүлеләрҙе тапатыу.

Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Тын ҡыҫылыу

❖ Тын ҡыҫылғанда көнөнә 4 тапҡыр сирек стакан һаҙанаҡ һәм кесерткән төнәтмәһе эсергә кәрәк. Уны әҙерләү өсөн 25 грамм ваҡланған һаҙанаҡ үләне һәм 10 грамм кесерткән япрағына 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға, 8 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә.

## Быуындар һыҙлаһа

❖ Етен орлоғон ыуып ваҡлап, кәрәкле ҙурлыҡтағы киндер муҡсаға һалырға. Шуны 10 минутҡа ныҡ эҫе һыуға тығырға. Шунан ауыртҡан урынға терәп, һыуынғансы тоторға. Йылыһы оҙағыраҡ һаҡланһын өсөн йылыға төрөнөргә.

## Иммунитет

❖ Һаулыҡты нығытыу өсөн ярты килограмм мүк еләгенә 1 стакан таҙартылған әстерхан сәтләүеге, 2-3 йәшел алманы дүрткелләп турап ҡушырға. Ҡатышмаға ярты килограмм шәкәр һалырға һәм ярты стакан һыу ҡойорға. Талғын утҡа ҡуйып, ҡайнар хәлгә еткерергә, уттан алып таҙа банкаларға ҡойорға. Был тәмлекәсте иртән һәм кис 1-әр ҡалаҡ ашау файҙалы.

## Ҡул быуындары һыҙлаһа

❖ 10 литрлыҡ кәструлдә һыу ҡайнатып, шуға ус тирәһеләй ваҡланған кесерткәнде һалырға һәм 5 минут тотҡас, утын һүндерергә. 10-15 минут төнәткәндән һуң, төнәтмәне таҫҡа ҡойоп алырға. Ошо таҫҡа ҡулдарҙы 15 минут тығып торорға. Һыу һыуына барған һайын, иплап кенә эҫеһен өҫтәп торорға. Ҡулдарҙы төнәтмәлә тотҡан көйө бөтә быуындарға еңелсә генә массаж яһарға. Тәүге ике көндә 5-7 минутлыҡ массаж кәрәк, аҙаҡ 3-5 минутлыҡ та етә. Процедура тамамланғас, ҡулдарҙы золотой ус йәки гөлйемеш төнәтмәһе (дарыуханан алырға мөмкин) менән ыуырға. Шунан бейәләй кейеп, йоҡларға ятырға. Ошо рәүешле 5-7 тапҡыр дауаланыу ҙа һөҙөмтәле, әммә кәрәк саҡта бер айҙан ҡабатларға мөмкин.

**Гәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Һәр хәлдә, бөтәһе лә телефондан уҡып, ниндәйҙер яңы белем үҙләштерәләр тип уйламайым. Дуҫтары менән аралашырға, социаль селтәрҙәр киңлеген гиҙергә, видеолар ҡарарға инәләр. Быларҙың барыһы ла кәрәк түгел.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Мөншөгөр
**(Большая выпь)**



Селәнгә оҡшаш. Кәүҙәһе өйрәк тиклем, башы ҙур, суҡышы көслө һәм тура. Ерән-һоро төҫтә, ҡара төҫтәге таптары бар. Сағыштырмаса ҡыҫҡа тәпәйҙәре һәм суҡышы йәшкелт-һары. "Мыйыҡ"тары һиҙелерлек күренеп тора. Нимәнәндер ҡурҡһа, муйынын һуҙа ла, урынында ҡата ла ҡала һәм шул саҡта ситтән ҡарағанда ҡамышты хәтерләтә. Ҡош туйы мәлендә тауышы нык көслө, үгеҙ үкереүен хәтерләтә.

Төньяҡ Африканан алып Сахалинға, Камчатҡаға тиклем йәшәй. Башҡортостанда Асылыкүлдә, Шиңәккүлдә, Агиҙелдең, уның ҡушылдыҡтары Танып, Дим, Еҙем, Инйәр, Ләмәз, Нөгөш, Сим, шулай уҡ Ҡариҙел, Әй, Лаҡлы, Йылайыр, Һаҡмар йылғалары, Павловка һыуһаҡлағысы, Белорет быуаһында оялай. Таулы райондарҙа осрамай. Башҡортостанда яҡынса 600-800 пар бар тип иҫәпләнә. Һаҙлыҡта, ҡамыш баҫҡан һыу яҡтылыҡтарын ярата. Һыуы аҡмаған һыу яҡтылыҡтарын үҙ итә. Ояһын ергә ҡора, 3-6 йомортҡа баҫып сығара. Көндөҙгө ҡош. Төп ризығы - балыҡ, шулай уҡ тәлмәрйен, уларҙың селбәрәләрен, селәүсендәрҙе, һыу бөжәктәрен ашай.

## Ваҡ мөншөгөр
**(Малая выпь)**



Улар иң ваҡ селәндәр, ҡарғанан да бәләкәйерәк. Ҡурҡыныс тыуғанда, йәшенәләр һәм ҡапыл ғына осоп китәләр.

Ваҡ мөншөгөрҙәң түбәһе һәм арҡаһы ҡара төҫтә, муйыны һәм түше ҡыҙыл, ҡанаты алһыу-һары, остары ҡара. Суҡышы менән тәпәйҙәре йәшкелт.

Сите йәшеллек менән ҡапланған һыу яҡтылыҡтарын үҙ итә. Дим, Ағиҙел, Өршәк, Оло һәм Бәләкәй Ыҡ, Тиҙ Танып, Таналыҡ, Урал һ.б. йылғалары буйында йәшәй. Көҙгә күренеп бармай, әммә бәпкәләрен ашатҡан мәлдәрҙә көндөҙ ҙә осрай.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

*АФАРИН!*

# БАЛАНЫ ЛА...

## шәхес итеп күрһен өлкәндәр!



**(Башы 1-се биттә).**

**➔ Һин әле уҡыған белем усағы башҡаларҙан нимәһе менән айырыла? Унда уҡытыу нисек ойошторолған?**

- Ҡазан ҡалаһының 2-се лицей-интернатына бишенсе йәки алтынсы класты тамамлаған уҡыусыларҙы ҡабул итәләр. Бында теүәл һәм гуманитар фәндәр йүнәлештәрендә тәрәнәйтеп белем бирәләр. Тағы ла белем усағында тик малайҙар ғына уҡый, шуныһы менән дә айырылып тора ул. Уҡыусыларҙың барыһына ла шәхси уҡыу планы тәҡдим итә алалар: беҙ үҙебеҙҙе ҡыҙыҡтырған предметҡа күберәк иғтибар бүлә, ә дөйөм үҫеш өсөн кәрәк булған башҡа предметтар буйынса уҡытыусынан шәхси өйгә эштәр алып үҙаллы өйрәнеп, ваҡытында тапшыра барыу ҙа етә. Мәҫәлән, мин география, химия кеүек дәрестәргә йөрөмәйем, уҡытыусылар миңә айырым күнегеүҙәрҙе эшләргә бирә, үҙаллы уҡыйым һәм эште тапшырам.

Иң мөһиме, бында тик яҡшы өлгәшкән, аҡыллы, көслө уҡыусыларҙың бер урынға тупланыуы күңелемә яҡын. Тиҫтерҙәремдең һәр береһе күңеленә ятҡан өлкәлә юғары уңышҡа өлгәшергә ынтылышлы, маҡсатлы, алдынғылар. Минең менән бер класта химия, астрономия, информатика буйынса Бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара олимпиадаларҙа ҡатнашҡан, еңгән малайҙар уҡый.

**➔ Халыҡ-ара кимәлдә иң яҡшылар араһына инеү өсөн ниндәй әҙерлек үттең?**

- Информатика менән етенсе кластан уҡ етди шөғөлләнә башланым. Һигеҙенсе класта уҡығанда Бөтә Рәсәй олимпиадаһында 350 ҡатнашыусы араһында 37-се урын алдым һәм көмөш миҙал яулауыса абсолют енеүсе тип танылдым. Шуны әйтеп китергә кәрәк, башҡа фәндәрҙән олимпиадаларҙа уҡыусылар нисәнсе класта белем алыуына ҡарап бүленеп, үҙенең тиҫтерҙәре менән генә ярышһа, информатика буйынса олимпиаданың шарттары башҡасараҡ. Бында нисә йәштә, нисәнсе класта белем алыуға ҡарамаҫтан, бөтәһе лә бер төрлө мәсьәләләрҙе сисә, бер төрлө эш башҡара. Шуға мин 8-се класта булһам да, 9-сы, 10-сы, хатта 11-се класс уҡыусылары менән ярыштым. Әйткәндәй, был Бөтә Рәсәй олимпиадаһы һөҙөмәләре буйынса билдәләнгән 120 призерға илдең теләһә ниндәй юғары уҡыу йортона һынауҙарһыҙ уҡырға инә алыу хоҡуғы бирелә. Мин был хоҡуҡты 8-се класта уҡ яуланым.

Ғөмүмән, информатиканы яҡшы аңлау өсөн математика, инглиз телен дә белергә кәрәк. Юғары һөҙөмтәгә өлгәшәм тиһәң, инглиз телен бик яҡшы аңлау талап ителә, сөнки мәсьәләләр ҙә, алгоритмдар, код та, бөтә донъя белеме шул телдә. Информатика буйынса уҡытыусы аңлатып, һөйләп тормай, интернетҡа инәһең дә, үҙеңә кәрәкте табып, өйрәнәһең. Шуға үҙаллылыҡ, эске тәртип, маҡсатҡа ҡуйыуға һәм шуларға ирешеү теләге булырға тейеш. Халыҡ-ара кимәлдәге олимпиадала миңә шулай уҡ спортсыларға хас сөм, үҙ-үҙемә ышаныс та ярҙам итте. Үҙ көсөмә ышанмаһам, бәлки, быйыл булдыра алмам, тип ҡул һелтәр ҙә ҡуйыр инем. Ныҡышмаллыҡ, түҙемлек тә кәрәк ярышта. Шунһыҙ бер нәмә лә килеп сыҡмаясаҡ.

**➔ Венгриянан алған тәьҫораттар ниндәй?**

- Әлбиттә, минең иң көслө тәьҫораттарым олимпиаданың барышына бәйле. Беҙ ике көн ярыштыҡ, һәр көн бирелгән эштәрҙе бишәр сәғәт үтәнек. Тәүге өлөшөн насарыраҡ яҙған һымаҡ инем, алтын миҙалға бер аҙ өмөтөмдө лә өҙгәйнем. Шуға алтын миҙалсылар араһында исемемде күргәс, шул тиклем ғәжәпләндем!

Был олимпиада яңы үрҙәр яуларға этәргес биреүҙән тыш, яңы дуҫтар табырға ла ярҙам итте. Будапешт аэропортына килеп төшкәс, Сегед ҡалаһына беҙ Ҡытай һәм Черногория йыйылма командалары менән бер автобуста юлландыҡ. Ҡытайҙарҙың бик көслө ҡатнашыусылар булыуын белгәс һәм күңелемдә оло ихтирам хисе йөрөткәс, мин уларға барып һүҙ ҡушырға ҡыймайыраҡ торғайным. Ярай әле, үҙҙәре килеп танышты һәм бик ихлас аралашып, дуҫлашып ҡайттыҡ.

**➔ Өлкәндәр бөгөн бөтә балалар телефондар, гаджеттар, компьютерҙар артында ултыра, урамға сығып уйнамай, үҙ-ара аралашмай, туған телдәрен онота тип йыш зарлана. Һин нимә уйлайһың был турала?**

- Мин был мәсьәләлә өлкәндәр яҡлы, сөнки ул балаларҙың күбеһе ваҡыттарын шулай буштан-бушҡа уҙғара. Һәр хәлдә, бөтәһе лә телефондан уҡып, ниндәйҙер яңы белем үҙләштерәләр тип уйламайым. Дуҫтары менән аралашырға, социаль селтәрҙәр киңлеген гиҙергә, видеолар ҡарарға инәләр бит. Быларҙың барыһы ла кәрәк түгел. Балаға компьютер ул өҫтәмә белем алһын, үҙенә ҡыҙыҡлы өлкәлә үҫешергә ярҙам иткән мәғлүмәтте уҡыһын, ҡараһын өсөн генә бирелергә тейеш. Сөнки бөтә белемде лә мәктәп сиктәрендә генә алып бөтөп булмай, өҫтәлмә уҡырға кәрәк. Шәхсән мин компьютерҙы шуның өсөн генә ҡулланам, бер минут буш ваҡытымды ла файҙалы үткәрергә тырышам. Мин социаль селтәрҙәрҙә ултырмайым, хатта ютубҡа инеүҙе лә контролдә тотам. Ҡайһы берәүҙәрҙең ҡулынан телефон төшмәүен күреп ғәжәпләнәм, бер тапҡыр "Бәйләнештә", "Телеграм" йә башҡа селтәргә инмәй ҡалһалар ҙа бер нәмә булмаҫ ине. Шулай ҙа был насар ғәҙәттән арындырам тип, өлкәндәр балаларын әрләмәһендәр ине, үҙҙәре өлгө күрһәтеп тәрбиәләргә тырышһындар. Баланы шәхес итеп күреп һөйләшһендәр.

**➔ Шулай ҙа һиңә компьютер артында оҙаҡ ултырырға тура киләлер бит? Һаулығыңа зыян килтермәһен өсөн ниндәй саралар күрәһең?**

- Дөрөҫөн әйткәндә, ниндәйҙер махсус күнегеүҙәр яһамайым. Әммә мин бик әүҙем кеше һәм спорт яратам, футбол, баскетбол уйнайым. Компьютер артында арҡаны төҙ тотоп, билдәле бер арауыҡ һаҡлап ултырырға кәрәк, ҡояш йәки өҫтәл лампаһынан яҡты төшөп торорға тейеш икәнде беләм һәм шулай итәм. Ваҡыты-ваҡыты менән күҙҙәрҙе ял иттерер алам: мәсьәләнең сиселеше тураһында уйланған саҡта дәфтәремдә, тирә-яҡты байҡайым. Саф һауала күп йөрөйөм. Шулай ҙа үҙемдең күҙәтеүҙәрҙән сығып, кешеләрҙең күреү һәләте түбәнәйеүе гендарына ла бәйле, шикелле. Шөкөр, был йәһәттән мин бәхетле - атаәсәйем, ике яҡтан да нәҫелем һаусәләмәт, беҙгә лә сәләмәт тормош алып барыу өлгөһөн күрһәтеп йәшәгән кешеләр.

**➔ Информатиканы яҡшы белеү ниндәй һөнәрҙәргә юл аса? Был һөнәрҙәргә ҡайҙа уҡырға була?**

- Әлбиттә, программист була алам. Бөгөн был һөнәр кешеләре ҡайҙа ла кәрәк, шуға теләһә ниндәй компанияла эш табырға мөмкин. Уны үҙләштереү өсөн үҙаллы интернет мөмкинлектәрен файҙаланып, осталығыңды арттырырға ла, юғары уҡыу йорттарында махсус белем алырға ла була. Мин инде 30-40 йәшкә еткәндә берәй ҙур компанияла код ҡына яҙып ултырырға бик үк теләмәйем, үҙ эшемде асырға йәки кешелекккә кәрәкле ниндәй ҙә булһа эш башҡарырға хыялланам.

**➔ Заман башҡорто ниндәй булырға тейеш?**

- Бик ауыр һорау. Тәү сиратта, маҡсаттарына ирешеүсән һәм барыһы ла ҡулынан килеүен аңлаған кеше булырға тейештер. Асыҡ күңелле, аҡыллы, Башҡортостан менән генә сикләнмәгән булыу ҙа мөһим. Бөтә донъя беҙҙең өсөн асыҡ булырға тейеш. Ғөмүмән, үҙеңде ниндәйҙер сиктәргә индерергә ярамай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**"Һөнәре бар үргә йөҙәр", тигән боронғолар. Ғимран тап ана шундай шәп милләттәштәребеҙҙең береһе, уның үрнәге башҡаларҙы ла дәртләндерһә һәм үргә әйҙәһә - шат булырбыҙ. Үҫмер ҙә бит тиҫтерҙәренә әйтер һүҙҙәрендә: "Кеше - шул тиклем текә зат, шуға һәр кемдең ҡулынан теләгән бер эш килә ала", - тип яуап бирҙе. Тәуәкәлләгеҙ!**

**Камила ҒӘЛИЕВА әңгәмәләште.**

✓ **Ышаныслы мәғлүмәттәргә ҡарағанда, башҡорттарҙың ошо ҡаланы төҙөтөү хаҡындағы үтенесе 1573 йылда яҙылып, уларға дошмандарынан ошонда ҡасып ҡотолоу һәм һаҡланыулы булыу хаҡына бирелгән.**

*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Дүртенсе бүлек. Көньяҡ Урал гун эпохаһында



**III - IV быуаттарҙа Көньяҡ Урал далаларындағы тарихи шарттар**

Иртә урта быуаттар эпохаһында, быға тиклемгә барса боронғолоҡ осорҙарындағы кеүек үк, Көньяҡ Урал ҡәбиләләренең этносәйәси һәм мәҙәни-хужалыҡ тарихы үҫешен билдәләүсе мөһим фактор сифатында уларҙың көньяҡ ҡәбиләләре - Ҡаҙағстандың көньяғында һәм Урта Азияла йәшәгән ҡәүемдәр менән әүҙем аралашыуын атарға була. Ошо төбәктәрҙең күсмә малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе ҡәбиләләренең, малдары өсөн яҡшыраҡ көтөүлектәр эҙләп, яҙ-йәй миҙгелдәрендә даими рәүештә төньяҡҡа, Урал буйҙарына тиклем күсенеп йөрөп, көҙҙәрен көньяҡҡа - Арал буйҙарына, Түбәнге Волга һәм хатта Урта Азияға кире ҡайтып ҡышлауҙары ошондай контакттарҙың анығ билдәле формаһы булып тора. Быңдай киң күләмле миграция ағымдары сит ҡәбилә кешеләренең урындағы ҡәбиләләргә даими ҡушыла барыуына килтергән, уларҙың матди һәм рухи мәҙәниәттәре ҡазаныштарының бер-берененә үтеп инеүенә һәм улар менән алмашыуға булышлыҡ иткән. Ошо моменттарҙы иҫәпкә алып, иртә тимер быуатына ҡараған Көньяҡ Урал археологияһы буйынса тикшеренеүселәр Көньяҡ Урал һәм Көньяҡ Ҡаҙағстан территорияларын яҡын нәҫелдәш ҡәүемдәр йәшәгән берҙәм тарихи-мәҙәни өлкә сифатында ҡарарға тәҡдим итә, был турала алдағы бүлектә лә бәйән ителгәйне. Әлбиттә, үрҙә иҫкә алынған күскенселәр массаһының ошо үтә киң төбәктә далалар буйлап бер тарафтан икенсеһенә нисек теләй, шулай күсеп йөрөүен аңлатмай, урындағы властар был хәрәкәтте бик анығ көйләй алған.

Алдағы бүлектә б.э. тиклем VII - IV быуаттар арауығында Көньяҡ Ҡаҙағстан һәм уға йәнәш ятҡан Урта Азия һәм Ҡырғыҙстан территорияларында сактар дәүләте хөкөм һөргәне, б.э. тиклем III быуаттан башлап бында Кангюй һәм Усунь дәүләттәре барлыҡҡа килеүе, уларҙың составында сактарҙың урындарҙағы күсмә ҡәбиләләре менән бер рәттән, көнсығыштан килгән күскенселәрҙең әүҙем роль уйнауы хаҡында билдәләп үтелгәйне.

Биләмәләре Көньяҡ Уралға иң яҡын булған дәүләт - Кангюй, тикшеренеүселәр уның Һырдарья йылғаһының урта һәм түбәнге ағымы, Төньяҡ Арал буйындағы ерҙәрҙе, Чач тип аталған илде (хәҙерге Ташкент ҡалаһы районында) биләгәнен раҫлай. Уның Ҡытай менән әүҙем бәйләнештә булыуы ошо дәүләттең ҡеүәтен күрһәтеп торған, һәм ошо тығыҙ бәйләнештәр династиялар араһындағы никахтар менән даими нығытылған, Кангюй хакимдарының уларына Ҡытайҙың юғары дәрәжә биләгән элитаһы ҡыҙҙарынан ҡәләш әйттергәндәр.

Кангюй властының Ҡытай сығанаҡтарында "Янь" иле йә иһә "Янь дәүләте" тип иҫкә алынған Көньяҡ Уралға тиклем килеп етеүе хаҡында уҡыусыбыҙҙың хәтеренә төшөрөп ҡуйыу артыҡ булмаҫ, тибеҙ. "Янь" ере хаҡындағы сығанаҡтарҙа "дәүләт" һүҙен ҡулланыу беҙҙең эра сиктәрендә Көньяҡ Урал ҡәбиләләренең дәүләт ойошмалары булыуына дәлил, улар урындағы ҡәбиләләр тормошондағы мәсьәләләрҙе көйләгән һәм үҙҙәренең бөйөк күршеләре менән бәйләнешкә ингән. Б.э. тиклем II быуат аҙағында Кангюйҙа сәйәси власть көнсығыштан килгән юечжиҙарға күсә һәм был Урал һәм Ҡаҙағстан далалары халҡының былай ҙа ҡатмарлы составын тағы ла нығыраҡ ҡатмарлаштыра.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ ҮТЕНЕСЕ БУЙЫНСА...

## Өфө ҡалаһы төҙөлгән



**Петр Иванович Рычков, Ырымбур губернаһы канцелярияһы мөдире, географ, тарихсы һәм крайҙы өйрәнеүсе, Санкт-Петербург академияһының ағза-корреспонденты, үҙенең 1762 йылда нәшер ителгән "Ырымбур губернаһы топографияһы" тигән хеҙмәтендә Өфө ҡалаһы тураһында ошондай мәғлүмәттәр килтерә:**

"Өфө ҡалаһы Ҡаҙандың Россия скипетрына тулыһынса буйһондоролоуынан һуң бер аҙ ваҡыт үтеүгә башҡорт халҡының үтенесе буйынса батша һәм бөйөк кенәз Иоан Васильевич хакимлыҡ иткән саҡта төҙөлгән; әлеге "Топографияның" беренсе өлөшөндә, 4-се бүлектә, билдәле һәм ышаныслы булған мәғлүмәттәрҙе йыйыу мөмкинлеге тыуғас, ошо халыҡ тураһында ла бәйән ителгән ине. Бында шуларҙы аңлатыу һәм тулыландырыу менән бәйле нәмәләрҙе генә иҫкә алырға ҡала.

Ышаныслы мәғлүмәттәргә ҡарағанда, башҡорттарҙың ошо ҡаланы төҙөтөү хаҡындағы үтенесе (челобитье) 7081 йылда (йәғни, Христос Раштыуаһынан һуң 1573 йылда) яҙылып, уларға һалынған яһаҡты ошонда, үҙҙәре йәшәгән ерҙә түләүе унайлыраҡ булғаны өсөн генә түгел, ә дошмандарынан ошонда ҡасып ҡотолоу һәм һаҡланыулы булыу хаҡына бирелгән. Ул Ағиҙел йылғаһы ағымының уң яғында, бөтөн яҡтан да бейек тауҙар менән уратып алынған урында һалынған, һәм уның барлыҡ торлаҡтары һиреҙ ҙур һәм тәрән йырындар араһында урынлашҡан, ә уларҙың берене буйлап, ҡала аша арҡыры һуҙылғаны төбөнән Сутолока тип аталған йылғасыҡ аға.

Өфө атамаһының уға яныраҡ ҡушылмағанына, ә элекке̧һенең яңыртылыуына төшөнөргә була, был яҡтарҙа борондан бирле йәшәгән нуғай хандарының үҙҙәренең ҡалаһын ошолай тип атауы ысын, бит тап Ағиҙел йылғаһы өҫтөндә төҙөлгән ҡаланы, ул Өфө йылғаһына ҡарағанда ике таптҡырға ҙурыраҡ булғас, Өфө йылғаһы исеме менән атау өсөн бер ниндәй ҙә ерлек юҡ, ул үҙе Ағиҙел йылғаһы ағымының уң яғынан, ҡаланан өҫтәрәк өс саҡрым тирәһендә, бер ниндәй ҙә ҡала ҡоролмалары булмаған урында уға ҡушыла. Ошоға өҫтәп, ҡаланан биш саҡрымдар тирәһендә тап Өфө йылғаһы өҫтөндә, бейек һәм бик матур урында, әле лә ҡаласыҡ эҙҙәре күренә, һөйләүҙәренә ҡарағанда, бында нуғай хандары йәшәгән. Өфө йылғаһы ағымы буйындағы ошо ҡаласыҡтың әлеге Өфө ҡалаһынан әүәлерәк үк Өфө тип аталыуы бик мөмкин, һәм, ошоға нигеҙләнеп, Рәсәй төҙөгән ҡала ла Өфө тип атала башлаған. Башҡорттар Өфөнө Өфө-Иҙел тип атай, был Өфө йылғаһы тигәнде аңлата, ә "Белая" башҡортса - Аҡ-Иҙел, йәғни, аҡ йылға була.

Нуғай даруғаһының Ҡара Табын олоҫонан күренекле башҡорт старшинаһы Ҡыҙрас Муллаҡаев ошо хаҡта мәғлүмәт биргәнсә, Ҡаҙан батшалығы һәм башҡорттар Рәсәй скипетрына буйһонғанға тиклем бик күпкә алдараҡ тап әлеге Өфө ҡалаһы урынлашҡан ерҙә бик ҙур ҡала булып, ул Ағиҙел йылғаһы буйлап Өфө йылғаһы тамағына һәм дә ошо йылға буйындағы Өфө тауҙарына тиклем һуҙылып, бында ун саҡрымдар тирәһенә тиклем торлаҡтар булған икән.

Ошо ҡаланың һуңғы хакимы нуғай ханы Тиря-Бабату-Клюсов (Түрә-Баба Төкләсев. - **тәржемәсе иҫкәрмәһе**) бында ҡыштарын ғына йәшәп, йәй көнө Дим йылғаһы буйында, Өфө ҡалаһынан 50 саҡрымдар тирәһендә ике урында йәшәгән: Азират (Аҡ зыярат) исемле ҙур күл янында һәм дә Ыҫлаҡ йылғаһы буйындағы ҙур ғына бер ауылда; ошо күл буйында әле лә мәсет тора, ә Ыҫлаҡ йылғаһы буйында мәсет һәм таш өйҙәр ҙә бар, әммә улар инде емерек хәлдә. Тирәханға (Түрхан. - **тәржемәсе иҫкәрмәһе**) нуғайҙар һәм 12 мең олоҫо башҡорттары буйһонған, улар ханға һыуһар һәм бал менән яһаҡ түләгән.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемәһе.**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Калинковичи-Мозырь һөжүм итеү операцияһы. Мозырь рейды

Ҡорал менән дә шул уҡ хәл: алдараҡ булып үткән яуҙарҙа дивизияның байтаҡ ҡына орудиелары, миномёттары һәм пулемёттары сафтан сыҡҡан була. Оборона һуғыштарында дошманға ныҡлы ҡаршылыҡ күрһәтеү өсөн дивизияны 1 300 рядовой, 270 кесе командир, 45 офицер менән тулыландырыу мохтажлығы тыуа. Шуға ҡарамаҫтан, беҙҙең яугирҙар Сколодино, Сколодинская Гряда, Глиницы, Шестовичи ауылдары йүнәлешендә дошманға һөжүм итә. Сколодино ауылын немецтар көслө оборона нығытмаһына әүерелдереп өлгөрә, улар бейек йылға ярындағы уңайлы урынды биләй. Бында гв. майоры И.Ф. Горлатов командалыҡ иткән 60-сы гв. атлы полкы алыша. Дошман оборонаһының 2 рәттән торған траншеялары була, окоптар алдынан сәнскеле тимер сыбыҡ һуҙылған, юлдарға миналар һалынған, аҙмы-күпме машина менән үтерлек юлдар орудие, танк һәм миномет утына тотола. Сколодино гарнизонында 400-ҙән ашыу дошман һалдаты ҡаршылыҡ күрһәтә. Беҙҙең 58-се атлы полк та Сколодино өсөн алышҡа сыға. Алыш бер туҡтауһыҙ 10 көн буйына дауам итә. Белоруссияла климат йомшаҡ, шуға күрә һаҙлыҡтар туңмай, танкылар һәм үҙйөрөшлө орудиелар юлһыҙ ерҙән үтә алмай. Ә дошман ошо арала резерв көстәрен дә килтереп өлгөрә. Уҙған яуҙарҙа ныҡ таушалған дивизияның алға барырлыҡ мөмкинлеге ҡалмай, шуға күрә корпус командиры Г.А. Беловтың үтенесе буйынса Сколодино янындағы уҫтсала беҙҙең яугирҙарҙы 2-се гв. атлы корпусының 3-сө атлы дивизияһы алыштыра. 7-се гв. копусының 14-се һәм 15-се дивизиялары Замошье, Осмоленик, Симоновичи, Туров ауылдары районында хәрәкәт итә, әммә шулай уҡ дошмандың көслө ҡаршылығына осрай.

Ғинуар айының икенсе яртыһында 16-сы гв. атлы дивизияһы оборонала тора, шулай уҡ уның бер нисә эскадроны Птичь исемле ҙур торлаҡ пунктына һөжүм итеүсе 2-се гв. атлы корпусының һул флангыһын ҡаплап, әленән-әле дошман оборонаһын утҡа тота. Ғинуар аҙағында дивизияның частарын Заставник, Буйновичи, Злодин, рубежындағы яңы оборона һыҙығына күсерәләр. Февраль башында дивизияны тулыландырыу маҡсатында ни барыһы 30 ат менән 96 кеше килеп етә.

Үҙәк Полесьеның урманлы-һаҙлыҡлы ерҙәрендә беҙҙең яугирҙарыбыҙ Ҡыҙыл Армияның 26 йыллыҡ байрамын билдәләй. Уларҙы байрам менән Советтар Союзы маршалы С.М. Буденный ҡотлай. Ул ебәргән телеграммала ошондай һүҙҙәр була: "Сталинград һуғышында дошмандың 4 дивизияһын ҡыйратыу, тиҙ арала дошман тылына үтеп инеп, Мозырь һәм Калинковичи ҡалаларын алыу кеүек хәрби операциялар кавалерия тарихының сағыу биттәре итеп теркәлде. Алдағы алыштарҙа үҙҙәренең боевой традицияларына тоғро ҡалған атлыларҙың дошманды таҡы лы нығыраҡ, уны тулыһынса юҡ иткәнсе тармар итәсәгенә ышанам..."

Ҡотлауҙар Башҡортостандан да килә. ВКП(б)-ның Башҡоростан өлкә комитеты һәм республика хөкүмәте ебәргә телеграммала ошолай әйтелә: "Беҙ Башҡорт атлы дивизияһының ҡаһарманлығы өсөн гвардия исеменә лайыҡ булыуы, Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнеүе, дивизияның илленән ашыу яугирының Советтар Союзы Геройы кеүек юғары исемгә лайыҡ булыуы айҡанлы ысын йөрәктән шатланабыҙ. Совет еренән немец-фашист оккупанттарын тулыһынса ҡыуып сығарыу өсөн - алға!"

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләнә.**
**(Дауамы бар).**

# АЛТЫН

## Етәксенең аҫыл

**Тыуған илгә, дәүләткә, йәмғиәткә файҙа килтереп йәшәгән замандаштарыбыҙ менән таныштырыуҙы дауам итәбеҙ. Шундай алдынғы ҡарашлы һәм тормошта үҙ урынын тапҡан яҡташтарыбыҙҙың береһе - Иглин районы хакимиәте башлығы Гүзәл Рәис ҡыҙы НАСЫРОВА. Уның менән ҡатын-ҡыҙ асылы һәм етәксе вазифаһы, баш ҡалаға күрше урынлашҡан райондарҙы борсоған мәсьәләләр тураһында һөйләштек.**

**Беҙ, башҡорттар, беренсе тапҡыр осрашҡанда: "Ҡайһы ауылдан, ҡайһы районадан, ҡайһы ырыуҙан, кем балаһы һин?" - тип һорайбыҙ. Шул һорауҙы һеҙгә лә бирәбеҙ: һеҙҙең тамырҙарығыҙ ҡайҙан?**

- Был турала мин һәр ваҡыт ғорурланып: "Эшселәр балаһы мин!"- тип әйтәм. Әсәйем Камила сығышы менән Әлшәй районы Ибрай ауылынан булып, 36 йыл дауамында Өфөләге төҙәләштәрҙә кранда эшләне, баш ҡаланы төҙөнө. Әтайым Рәис Шишмә районынан, ул ғүмер буйы Өфөлә 1-се автомәктәптә уҡытты, умартаһы, балыҡсы, һунарсы ла ине. Беҙ Өфөнөң Владивосток урамында йәшәнек һәм Үҙәк баҙар эргәһендәге башҡорт мәктәбенә, хәҙерге Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһына уҡырға йөрөнөк. Йәйәүләп йөрөүе бер аҙ алыҫыраҡ булһа ла, әсәйем беҙгә туған телебеҙҙе өйрәтеп, рухи тәрбиә биреп үҫтереү өсөн шулай итте. Мин Әхтәм Абушахмановтың улы Айрат, Заһир Вәлитовтың ҡыҙы Айһылыу, Риф Мифтаховтың ҡыҙы Ғәлиә, Динис Бүләковтың ҡыҙы Зөһрә менән бер класта уҡыным. Башҡорт телен ошо мәктәптә тәрәндән өйрәндем һәм бөгөнгө уңыштарым, яулаған үрҙәрем өсөн дә башҡорт телемә рәхмәтлемен. Шулай уҡ "Аҡ тирмә" сараларына ла, Башҡорт дәүләт академия драма театрының барлыҡ спектаклдәренә лә йөрөнөк, өйөбөҙгә яҙыусылар, артистар ҡунаҡҡа килә торғайны.

Бер нисә йыл элек шәжәрәбеҙҙе эшләткәс, тамырҙарыбыҙ бөрйән ырыуына барып тоташыуын белдек. Элек әсәйем яғынан өләсәйемдән: "Беҙ дворяндар нәҫеленән булғанбыҙ", - тип әйтеүенә иғтибар бирмәгәнбеҙ, мин үҙем тарих факультетында белем алып, практиканы архивта үтһәм дә, был тарих менән ҡыҙыҡһынмағанмын. Нишләптер ул ваҡытта тамырҙарыңды белергә ынтылыш булмаған бит. Һәм бына шәжәрәне төҙөгәс, ҡартатайымдың атаһы дворян булыуы асыҡланды. Уға был титул 1812 йылғы Ватан һуғышындағы ҡаҙаныштары өсөн бирелгән булған. Әле Санкт-Петербургта һаҡланған батша грамоталарын тикшереп, тулыраҡ мәғлүмәт туплайһы бар был турала. Шулай ҙа балаларға тулҡынланып та, ғорурланып та һөйләр тарихыбыҙҙы беләбеҙ хәҙер. Был шәжәрә әсәйемдең атаһы яғынан, ул әсәйемә ике генә йәш булғанда, өләсәйебеҙҙе ете балаһы менән тол ҡалдырып, 1947 йылда донъя ҡуйған. Туғандар менән бергә йыйылған ваҡыттарҙа бөтәһенең дә буйға оҙон, ғәйрәтле, йыр-моңға, шиғыр яҙыуға, һүрәт төшөрөүгә маһир булыуын күреп, гел уйлана торғайным. Былар барыһы ла нәҫелдән, аҫыл-аҫыл олатайҙар тоҡомонан килгән икән...

**Хеҙмәт юлығыҙ ҡасан, ҡайҙа, ниндәй вазифала башланды?**

- Мәктәпте тамамлағас, Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетына уҡырға индем. Икенсе курстан һуң тормошҡа сыҡтым, ҡыҙыбыҙ донъяға килгәс, уҡыуҙы ситтән тороп тамамларға тура килде. Хеҙмәт юлым Өфөнөң 115-се мәктәбендә башҡорт теле уҡытыусыһы булараҡ башланды, был яҙмыш ҡушыуылыр инде. Башҡортса һөйләшеп йөрөгәнемде ишеткән күршеләр бер көндө мәктәпкә башҡорт теле уҡытыусыһы кәрәк тип килделәр. Мин бит тарих буйынса белем алдым, телсе түгел, тип, башта ризалашманым. Шулай икеләнеп йөрөгәндә урамда башҡорт теле уҡытыусым Гөлкәй Сәлмән ҡыҙын осраттым, ул: "Урыҫ мәктәбендә балаларҙы барыбер башҡорт теленә өйрәтә аласаҡһың бит, ризалаш", - тигәс, дәрт иттем. Мәктәптә талаптар бик ҡаты булды, илап та алғылай инем. Мин уҡытҡан төркөмгә башта балалар теләк буйынса яҙылды, әммә күпмелер ваҡыттан бөтә класс менән дәрестәремә йөрөй башланылар. Коллектив та мине ҡабул итте, бик әүҙем эшләнек: кабинетты махсус йыһазландырҙыҡ, конкурстарҙа, олимпиадаларҙа ҡатнаштыҡ. Директор инглиз теле уҡытыусыларының эш тәжрибәһен күҙ уңында тотоп эшләргә кәңәш иткәс, үҙемдең шәхси методикамды ла булдырҙым. Төрлө милләт балалары ҡыҙыҡһынып башҡорт телен өйрәнде.

Шулай гөрләтеп эшләп кенә китҡәйнем, мине Совет районы хакимиәтенең мәғариф бүлегенә методика буйынса етәксе итеп тәғәйенләнеләр. Унда ла көслө генә күтәрелеш булды, бик матур саралар ойоштороҙоҡ. Унан Өфө ҡала хакимиәтенең Мәғариф идаралығына эшкә алдылар. Ике йыл тирәһе эшләгәндән һуң, 2003 йылда, Аҡ йортҡа Виктор Пчелинцев етәкселегендәге Эш башҡарыу һәм граждандар мөрәжәғәте бүлегенә саҡырҙылар. Ярты йылдан Финанс-хужалыҡ эштәре идаралығына белгес итеп күсерҙеләр һәм шунда 18 йылға яҡын эшләнем. Бында бүлек етәксеһе булып та, Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары булып та эшләнем. Мортаҙа Ғөбәйҙулла улы Рәхимов, Рөстәм Зәки улы Хәмитов һәм Радий Фәрит улы Хәбиров менән дә эшләү бәхете тейҙе. Ә инде Радий Фәрит улы районға етәксе булып күсергә тәҡдим иткәс, башта икеләндем, әммә тормош иптәшемдән тыуған төйәге - Иглин районына тигәс, тәҡдимде ҡабул иттем.

**Ә һеҙ етәксе булырға ҡайҙан өйрәндегеҙ?**

- Бер уйлаһаң, атай-әсәй "Эшлә, эшләһәң, барыһы ла була", тип үҫтерҙеләр һәм бер ҡасан да "Етәксе булырға тейешһең", тимәнеләр. Хәҙерге көндән ҡарап фекер йөрөтөп, анализлап, бәләкәйҙән ниндәйҙер лидерлыҡ сифаттарым булғандыр, тип һығымта яһайым. Әммә бер ҡасан да етәксе булыуҙы маҡсат итеп ҡуйманым, эшләп йөрөйһең-йөрөйһөң дә - һиңә вазифа тәҡдим итәләр. Был кешенең үҙенән торалыр. Мин үҙем киләсәктә рейтингын артырға, үҫешергә тейешһең, тип иҫәпләйем. Мин дә ябай бер кеше, барыһы ла тырышып эшләүҙән генә тора.



*Бер нисә йыл элек шәжәрәбеҙҙе эшләткәс, тамырҙарыбыҙ бөрйән ырыуына барып тоташыуын белдек. Элек әсәйем яғынан өләсәйемдең: "Беҙ дворяндар нәҫеленән булғанбыҙ", - тип әйтеүенә иғтибар бирмәгәнбеҙ, мин үҙем тарих факультетында белем алып, практиканы архивта үтһәм дә, был тарих менән ҡыҙыҡһынмағанмын. Нишләптер ул ваҡытта тамырҙарыңды белергә ынтылыш булмаған бит. Һәм бына шәжәрәне төҙөгәс, ҡартатайымдың атаһы дворян булыуы асыҡланды. Уға был титул 1812 йылғы Ватан һуғышындағы ҡаҙаныштары өсөн бирелгән булған. Әле Санкт-Петербургта һаҡланған батша грамоталарын тикшереп, тулыраҡ мәғлүмәт туплайһы бар был турала.*

**Килен булараҡ Иглин районына ҡайтып йөрөгәндә үк ундағы тормош менән таныш булғанһығыҙҙыр, был төбәк нимәһе менән күңелегеҙгә ятты? Эште һәм кешеләрҙе яратмайынса эшләп тә булмайҙыр бит…**

- Дөрөҫөн әйткәндә, тарихсы-телселәргә хас фекер йөрөткән кеше булараҡ, мин был районға барғас, күберәк социаль проекттарҙы бойомға ашырырмын, йәштәр менән эшләрмен, тип уйлағайным. Аҡ йортта эшләгәндә миңә тап ошо әүҙемлек, йәмәғәт эштәрендә ҡайнап йәшәү етмәй ине. Әммә Иглин районына килгәс, был эштәрҙән тыш тағы ла мөһимерәк - социаль-иҡтисади үҫеште хәстәрләү кәрәклегенә төшөндөм. Шуға йүнәлештә дөрөҫ билдәләр һәм мәсьәләләрҙе комплекслы хәл итер өсөн Радий Фәрит улына Хөкүмәттең күсмә ултырышын районда ойоштороға тәҡдим иттем. Март айында эшкә килгәйнем, июндә был күсмә ултырышты үткәрҙек һәм шунда Иглин районы ауыл хужалығы үҫешкән төбәк кенә түгел, ә Өфө ҡалаһының агломерацияһы тиерлек булыуын билдәләп үттек. Иглин районы үҫешә, бындағы халыҡтың күп өлөшө баш ҡалаға йөрөп эшләй. Бына шунан килеп тыуа төрлө мәсьәләләр. Кәңәшмәлә районның юл картаһын төҙөнөк, инфраструктура, социаль объекттар булдырыу кәрәклеген билдәләнек. Районда ауыл хужалығы ла бар, шәхси йорттар төҙөлөшө лә бик етеҙ үҫешә, халыҡ һаны ла йылдан-йыл арта һәм төрлө милләт вәкилдәре күп йәшәй, хатта үҙебеҙҙең башҡорттар ҙа бында төрлө төбәктәрҙән йыйылған. Бер генә етешһеҙлеге бар - ул да булһа, эш урындары етешмәй, был бөтә районға ла хас мәсьәләләрҙең береһе.

Һәр төбәктең үҙ тарихы, мәҙәниәте, үҫеш юлы бар. Иглин районы борон ҡобау ырыуы башҡорттарының ерҙәре булған. Бөгөн ҡайһы берәүҙәр "Иглин" атамаһы "балсыҡлы" тигәнде аңлата, тип фараз яһап ҡуя. Ә бит уның ғәжәйеп үҙ тарихы бар. Заманында был яҡтарға Иглин тигән купец килеп, башҡорттарҙан ер һатып алған, әммә бик иртә донъя ҡуйған һәм бөтә малмөлкәтен ҡатыны Елена Иглинаға ҡалдырған. Ә ҡатыны 1840 йылдарҙа уҡ үҙенең крепостной крәҫтәндәрен азат итеп, һәр береһенә ер бүлеп биргән. Тап шул ирек алған крәҫтиәндәр Иглин ауылына нигеҙ һалған, бында Елена Иглина хөрмәтенә ҡорам төҙөлгән һәм хәҙер ҙә урындағы халыҡ уны бер изге йән итеп хөрмәтләй. Мин бында эшкә килгәс тә бына ошо ҡатын-ҡыҙ башланғысын тойҙом, ауырлыҡ килеп тыуғанда ла еңел генә итеп эшләйәсәкмен, тип көйләнем үҙемде. Әлегә тиклем, шөкөр, ошо көйләнеш ярҙам итә.

Күп милләтле Иглиндә Республика белорус үҙәге эшләй, Буденов, Ленин, Первомай кеүек бер нисә ауылдары бар. Күптән түгел латыштар йәшә-

***✓ Махсус хәрби операция шул тиклем ауыр тема, унда беренсе тапҡыр барғанда яугирҙар менән нимә тураһында ғына һөйләшермен икән, тип уйланып барғайным, әммә борсолоуҙарым юҡҡа булған.***

# УРТАЛЫҠТА БУЛ!

## ҡағиҙәһе был

гән Ауструм ауылының 145 йыллығын билдәләнек, уның тарихы иҫ киткес ҡыҙыҡлы. Сыуаштар ҙа күп йәшәй беҙҙә. Иҫке Ҡобау ауылында башҡорттар йәшәй, минең тормош иптәшем шул ауылдан. Ҡайным тамырҙары менән Меңъетәр ауылынан, ҡәйнәм - Иҫке Ҡобауҙан. Иглин районы Силәбе өлкәһенең Красновосходский ауыл советы менән сиктәш һәм унда Урал тауҙары башлана. Ләмәҙ ауыл советы биләмәһе - айырым бер донъя һымаҡ. Ғөмүмән, бик ҡыҙыҡ тарихлы 128 тораҡ пункт бар районда, һәр береһенең үҫеш мөмкинлектәре ҙур һәм быларҙы юл картаһына индереп, бойомға ашыра башланыҡ. Бигерәк тә туризм өлкәһендә мөмкинлектәребеҙ күп, тик башлап ебәрергә генә кәрәк.

**Иглин районына һәр ваҡыт башҡорт рухы етмәне кеүек, һеҙ шулай тип иҫәпләмәйһегеҙме?**

- Юҡ, мин улай тип иҫәпләмәйем. Башҡорттар араһынан БАССР-ҙың һәм РСФСР-ҙың халыҡ артисы Мәғәфүр Хисмәтуллин кеүек мәшһүр шәхестәр күп сыҡмаһа ла, Иглин районында рух йәшәй. Һеҙҙең кеүек, мин дә элек күп милләттәр бергә ҡатышып йәшәгәс, башҡорттар юғалып ҡалғандарҙыр, тип уйлана торғайным. Баҡтиһәң, барыһы ла үҙебеҙҙән тора икән. Һәр урында йәмәғәт фекеренә йоғонто яһай алыр шәхестәр бар һәм улар менән тығыҙ хеҙмәттәшлектә эшләргә, дөйөм мәнфәғәткә йүнәлтергә, түңәрәк ҡорға йыйылып, кәңәшләшеп тотонорға ғына кәрәк. Бына ваҡиғалар календары төҙөгәс, Меңъетәр ауылында Ҡаймаҡ байрамы үткәрҙек, Ләмәҙ ауыл советында ағинәйҙәр бик әүҙем эшләй, һабантуйҙар гөрләп үтә.

**Хәл итәһе эштәр бар, ә һеҙҙең фекерегеҙҙе уртаҡлашыр көслө шәхестәр бармы командағыҙҙа?**

- Быға тиклем дә, әле лә командаһыҙ мин бер нәмә лә эшләй алмаҫ инем. Ышанып эш ҡуша, һөҙөмтә көтә алыр командаң булыуы - иң мөһиме. Шөкөр, ундай ышаныслы кешеләр эргәмдә бар һәм улар ярҙам итеп кенә ҡалмай, беҙ эшебеҙ менән йәшәйбеҙ. Урыҫтар әйтмешләй, бер үҙең яланда яугир булып булмай.

**Хәҙер бөтә урында кадрҙарға ҡытлыҡ һиҙелә, бар ерҙә табиптар, уҡытыусылар талап ителә. Административ-идаралыҡ өлкәһендә кадрҙар етерлекме?**

- Бында ла кадрҙарға ҡытлыҡ бар. Быға хеҙмәткәр алдына ҡуйылған бурыстарҙың күплеге, ә эш хаҡының ул тиклем юғары булмауы ла булышлыҡ итмәй ҡалмайҙыр. Шуға бигерәк тә ғаиләһен аҫрарға бурыслы ир-егеттәр эшкә килә һалып бармай. Шулай ҙа мин йәштәрҙе эшкә алырға тырышам ул, тик бер аҙ ваҡыттан ҡайһы берәүҙәр: "Ғәфү итегеҙ, икенсе урынға эшкә саҡырҙылар", - тип инеп, бер аҙ кәйефте төшөрә төшөрөүгә. Ләкин барыбер, йәш кеше үҫешергә тейеш, тип ҡабул итәм. Әммә торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, төҙөлөш өлкәләренә техник һөнәрле белгестәр етешмәй. Әйтергә кәрәк, бөтә ир-егеттәр ҡатын-ҡыҙ ҡулы аҫтында эшләй ҙә алмай. Миңә инде бөтә тармаҡтарҙа ла яҡшы мөнәсәбәттәр булдырып, комплекслы эшләү өсөн барыһы менән дә матур мөғәмәлә, бәйләнеш булдырып, хакимиәткә ҡарата хөрмәт тойғоһо уятып эшләй алырлыҡ кадрҙар кәрәк.

**Һеҙ махсус хәрби операцияға гуманитар ярҙам алып барҙығыҙ. Осрашыу нисек үтте, илап ҡайттығыҙмы?**

- Юҡ, мин бер ҡасан да иламайым, юғиһә, был эштә эшләй алмаҫ инем. Махсус хәрби операция шул тиклем ауыр тема, унда беренсе тапҡыр барғанда яугирҙар менән нимә тураһында ғына һөйләшермен икән, тип уйланып барғайным, әммә борсолоуҙарым юҡҡа булған. Яугирҙар ғаиләләренең именлеген теләй, яҡташтарынан ҡош телендәй генә сәләм алыуға ла ҡыуана, балалар ебәргән өскөл хаттарҙы күҙҙәренә йәш алып уҡыйҙар. Күптәре үҙҙәренә ярҙам итеүҙе түгел, ғаиләләрен хәстәрләп борсола. Беҙ, әлбиттә, урындарҙа МХО-ла ҡатнашыусыларҙың ғаиләләренә тәүлек әйләнәһенә ярҙам итергә әҙер торабыҙ. Күптәренә матди ярҙам түгел, ә бер ултырып һөйләшеү, аралашыу кәрәк. Иглин районынан үҙ иректәре менән дә, мобилизация буйынса ла бик күп ир-егеттәр хеҙмәт итә, барыһының да иҫән-һау ҡайтыуын теләйбеҙ.

Украиналағы махсус хәрби операция бөтәһенең дә донъяға ҡарашын үҙгәртте. Беҙҙә күп кешеләр ирекмәндәр үҙәге эшенә әүҙем ҡушылып китте, гуманитар ярҙам йыйғанда Һуғыш хәрәкәттәре ветерандары берлеге ағзалары үҙҙәре генә түгел, ҡатындарын, балаларын йәлеп итте. Барыбер беҙҙең халыҡ күңелендә кешелеклек, изгелек бар, күп кешеләрҙең бына ошо сифаттары яңынан асылды. Ярҙам итергә әҙер генә торалар. Беҙ ҙә, власть, чиновниктар тиһәләр ҙә, борсолабыҙ, әммә һиҙҙермәҫкә тырышабыҙ.

**Район хакимиәте башлығының ир-егет йәки ҡатын-ҡыҙ булыуы эшендә, уға ҡарата булған мөнәсәбәттә тойоламы?**

- Ул һорауҙы бик йыш бирәләр. Эшләй башлаған ғына саҡта остаз тәғәйенләрҙәр, ул мине бер йыл дауамында эшкә өйрәтер, тип уйлағайным. Әммә вазифаға тәғәйенләнеүемә ике аҙна үткәйне, Радий Фәрит улы: "Йәш яугир курсы бөттө", - тине лә ҡуйҙы. Талапты ир-егеттәргә ҡуйған кеүек ҡуялар, эшебеҙҙең һөҙөмтәлеге өсөн берҙәй кимәлдә яуап бирәбеҙ. Әммә үҙемсә шундай айырманы күрәм: ир-егеттәр ваҡ-төйәккә иғтибар итеп бармаусан бит. Мин көслө заттарға тиңләшеп эшләйем эшләүгә, ләкин ҡайһы бер осраҡта ҡатын-ҡыҙҙарға хас булғанса, ғәфү итә беләм. Шулай уҡ беҙҙең һиҙемләү һәләтебеҙ ҙә көслө, ниндәйҙер мәсьәләләрҙе хәл иткәндә был да ярҙам итә. Бер йыл эшләгәндән һуң, ир-егет коллегаларҙың да миңә булған ҡарашы ыңғайға үҙгәргәнен тоям.

**Был вазифаны йөкләгәс, яҡындарығыҙ яғынан аңлау таптығыҙмы?**

- Тормош иптәшем, балаларым яғынан аңлау тапмаҫмын, тигән уй башыма ла инмәй. Сөнки улар минең һәр ҡарарымды ҡабул итә, ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер. Иптәшем Венер менән ике ҡыҙ үҫтерҙек, өлкәнебеҙ күптән тормошта, ике ейәнгә олатай-өләсәйбеҙ. Әлбиттә, иптәшемә ауырыраҡҡа тура килә, шулай ҙа мин өйҙә башлыҡ түгел, унда мин ир ҡатыны. Шуға өйҙә булғанда ашарға бешерәм, яҡындарыма күңел йылымды бүләм. Әсәйем янына оҙаҡҡа ҡайтып йөрөй алмағас, уға ҡыйыныраҡҡа тура килә. Әммә мин үҙ юлымды, үҙ урынымды ошо эштә табыуымды аңлағас, иҫән-һау ғына эшлә, тип тора. Әсәйем ҡайсаҡ "Нишләп шулайтмайһың?", "Нишләп ауыл хужалығын ҡарамайһың?" тип уҫал ғына итеп шылтыратып та ала...

**Заман башҡорто ниндәй булырға тейеш, тип уйлайһығыҙ?**

- Тәү сиратта, интеллектуаль яҡтан үҫешкән булырға тейеш. Бер белем алыу менән генә үҙен белемле тип иҫәпләп, туҡтап ҡалмаҫҡа һәм көн һайын үҙ өҫтөндә эшләргә бурыслы ул. Саҡ ҡына һығылмалыраҡ булыу ҙа ҡамасауламаҫ, тип һәр ваҡыт әйтәм. Был кемдеңдер йоғонтоһона бирелеү, сигенеү тигәнде аңлатмай, алтын урталыҡ һаҡлай белеү мөһим. Бөгөн иҡтисади, сәйәси мөнәсәбәттәр бик ҡатмарлы, шуға башҡорттар тураһындағы ҡалыплашҡан образдарға йәбешеп кенә йәшәп булмай. Рухиәтебеҙҙе һаҡларға, заманға яраҡлашырға һәм үҫешергә кәрәк беҙгә. Ә үткер йәштәребеҙ бар, ундайҙарҙы мин һәр ваҡыт күрәм, эшкә саҡырам. Үткер тигәндән, беҙҙең башҡорт кешеһе, хатта йәштәр ҙә нишләптер "Һүҙ һөйләй белмәйем", тип ситтә тороп ҡалыусан ул. Бына ошо комплекстан арынырға кәрәк.

Мин үҙем дә башта шулай тип иҫәпләй инем һәм күмәк кеше алдында сығыш яһауҙан баш тарта торғайным. Халыҡ алдына сығып, ҡағыҙҙан уҡып тороу менән фекеренде асыҡ итеп әйтеү араһында айырма ер менән күк араһындағы кеүек. Был ҡурҡыуымды шулай еңдем: тоттом да һөйләй башланым, ни тиклем күберәк сығыш яһайһың, шул тиклем телмәрең шымара, тулҡынланыуың бөтә.

**Эшегеҙ бик тынғыһыҙ, халыҡ менән даими бәйләнештә булыуҙы талап итә. Ял минуттарығыҙҙы нисек үткәрәһегеҙ?**

- Мин спорт яратам, һәр көнөмдө кәмендә 15 минутлыҡ гимнастиканан башлайым, баскетбол уйнайым һәм хатта әле коллективыбыҙҙа баскетбол командаһы төҙөп тә алдыҡ. Ә инде иң мөһиме - мин әүҙем ял яратҡан турист. Башҡортостандың хозур тәбиғәтен бик яратам, республикабыҙҙы арҡырыһына-буйына йөрөп сыҡтым, тиерлек. Тауҙарға үрмәләү, йылғалар буйлап һалда ағып төшөү, йәйәүләп йөрөү - бына шул көс бирә. Ирәмәлдә 11 тапҡыр булдым, быйыл Әй йылғаһы буйлап һалда аҡтыҡ. Аҡ йортта эшләгәндә коллегаларҙы Янғантауға алып барғайным, яңы вазифама күскәс, район хакимиәте башлыҡтарын бер автобусҡа ултыртып, Бөрйән районының иҫ киткес тәбиғәтен күрһәтеп алып ҡайттым.

***Мин спорт яратам, һәр көнөмдө кәмендә 15 минутлыҡ гимнастиканан башлайым, баскетбол уйнайым һәм хатта әле коллективыбыҙҙа баскетбол командаһы төҙөп тә алдыҡ. Ә инде иң мөһиме - мин әүҙем ял яратҡан турист. Башҡортостандың хозур тәбиғәтен бик яратам, республикабыҙҙы арҡырыһына-буйына йөрөп сыҡтым, тиерлек. Тауҙарға үрмәләү, йылғалар буйлап һалда ағып төшөү, йәйәүләп йөрөү - бына шул көс бирә. Ирәмәлдә 11 тапҡыр булдым, быйыл Әй йылғаһы буйлап һалда аҡтыҡ. Аҡ йортта эшләгәндә коллегаларҙы Янғантауға алып барғайным, яңы вазифама күскәс, район хакимиәте башлыҡтарын бер автобусҡа ултыртып, Бөрйән районының иҫ киткес тәбиғәтен күрһәтеп алып ҡайттым.***

Ғаиләм менән дә шундай әүҙем ялды яратабыҙ. Ваҡыт етмәһә лә, маҡсат итеп ҡуйһаң, дәртләнеп эшләйһең һәм көтөп алаһың шул ял минуттарын.

Бындай әүҙем ялға беҙ мәктәп йылдарынан уҡ өйрәндек, ул ваҡытта уҡыусыларҙы походтарға йыш йөрөттөләр, ҡырағай тәбиғәт шарттарында үҙеңде нисек тоторға өйрәтә торғайнылар бит. Ә бына сит илдә ял итеүгә килгәндә, ундағы халыҡтың йәшәү шарттарын күреү, тәжрибә туплау, донъяға ҡарашыңды арттырыу өсөн тулыр-тулмаҫ бер аҙнаға ғына барып ҡайтҡылайбыҙ. Быны ла бер етәксе кеше кәңәш итмәһә, сит илгә йөрөргә уйымда ла юҡ ине. Был тыуған яҡҡа ҡарата һөйөү балаларға ла күсә икәненә инанғанбыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Бөгөн һәр чиновник халыҡҡа асыҡ, барыһын да тыңларға әҙер һәм тәнҡит, зар, ҡайсаҡ хатта ғәҙелһеҙ кире фекерҙәр яуғанда ла рәхмәтле булырға тейеш. Тәнҡит һүҙе - дөрөҫ эш йүнәлеше алырға ярҙам итә, ә уны әйткән кеше менән өҫтәл артында ултырып һөйләшә лә алһаң - мәсьәлә хәл ителә. Ғөмүмән, мин һөйләшеү, аңлашыу яҡлы. Шуға һәр шишәмбене - граждандарҙы ҡабул итеү көнөн түҙемһеҙлек менән көтөп алам", - ти Гүзәл Рәис ҡыҙы. Быға инде "Кәңәшле эш тарҡалмаҫ", тиергә һәм Иглин районы ҡыйыу эш итә белгән, асыҡ күңелле, ихлас һәм шул уҡ ваҡытта алдынғы ҡарашлы етәксе ҡулы аҫтында артабан да үҫешер, тип әйтергә генә ҡала.**

Сәриә ҒАРИПОВА
яҙып алды.

***✓ Әллә кавалеристар Ҡыҙыл Армияның командирҙары араһында ғына тип уйлайһығыҙмы? Бик тәрән яңылышаһығыҙ. Мировой лирик тенор Лемешев башта кем булған тип уйлайһығыҙ? Ул да беҙҙең брат-кавалерист.***

# АТЛЫ БАШҠОРТ

**Рамаҙан ӨМӨТБАЕВ**

**Повесть**



Бөгөн үҙ атына атланған Ғилмишәриф тә, үҙ хужаһын атландырып манеж буйлап уҡ һымаҡ атылған бурыл айғыр ҙа һуңғы көндәрҙә уларҙы солғап алған ғазаплы бәләләрҙән әрселеп, күңелдәрен тыныслап таң сыҡтылар. Училищеның казармалары ла икенсе төрлөрәк. Ике ҡатлы ағас һәндерә урынына тимер карауат, курсанттар ятып йөрөгән одеял-түшәктәре лә яңыраҡ. Нисә әйтһәң дә, училище инде, бында уҡыған курсанттары ла башҡасараҡ күренә. Нигеҙҙә, заманына күрә төплө белем алған бер сама йәштәр. Ашатыу-эсереү ҙә бүтәнсәрәк. Эскадронда өсөнсө тип йөрөтөлгән норма урынына курсанттарға аҙыҡ-түлек паегының туғыҙынсыһын бирәләр. Был инде һәр курсантҡа көнөнә илле грамм һары май, етмеш биш грамм ит һәм кеше башына бирелгән арыш икмәгенең ике йөҙ грамы аҡ икмәк тигән һүҙ.

Бындағы курсанттарҙың киске самоподготовка ваҡытында үҙ-ара һөйләшеүҙәре лә бөтөнләй икенсе. Эскадронда буш ваҡытта ҡыҙылармееңтар араһында һүҙ күберәк ауылда тороп ҡалған ҡатын, бала-саға, мал-тыуар, утын-бесән тураһында барһа, бында бөтөнләй киреһенсә. Казармала өйкөм-өйкөм булып йыйылып ултырған курсанттарҙың дөйөм хәбәре тик фронт хаҡында ғына. Бөтә халыҡ фронтҡа ашҡына, хатта ҡайһы бер сабырһыҙыраҡтарының станция аша фронтҡа үткән эшелонға тағылып алғы һыҙыҡҡа ҡасып китеү осраҡтары ла булғылап тора икән. Бына бөгөн дә ҡыҙыл мөйөштәге ваҡ ҡына флагтар менән төрлө урынынан ҡаҙалып бөткән СССР-ҙың картаһы алдында өйөлөп торған курсанттар араһында шаулы ғына һөйләшеү булып алды. Дүрт һанлы, төп кеүек йыуантыҡ бер курсант уртаға сыҡты ла, тоҡорой ҡулына ҡылыс тотҡан шикелле, һауала һелтәнә-һелтәнә һүҙгә кереште.

- Бында туғыҙынсы паек кимереп нишләп ятырға? Ҡорал бирһендәр ҙә фронтҡа оҙатһындар.

- Дөрөҫ, дөрөҫ! Беҙ барып немецтың яғаһынан алмаһаҡ, кем булдыра алһын уны?

- Беҙҙең ҡылыстар ҡайралған, аттарыбыҙ әҙер, команда ғына булһын, унан күҙе тонған фашисты нишләтергә белербеҙ беҙ!

Бындай һүҙҙәр - ғәҙәттә, "кавалерия - ҡыҙыл армияның кендеге", "ҡайҙа данлыҡлы атлы ғәскәр - унда еңеү" тигән традицияларҙа тәрбиәләнгән, үҙен бөтә төр ғәскәрҙән өҫтөн ҡуйып танау сөйгән курсанттар хәбәре. Ғөмүмән, кавалеристар - борсаҡ шыттырыбыраҡ һөйләшә, шапырыныуҙы ярата торған, тәкәббсрерәк халыҡ. Араларындағы бер нисә кеше баҙнатһыҙ ғына икеләнеү кеүегерәк һүҙ ысҡындырҙы:

- Әле ошо көнгә тиклем беҙ ысын пушкаларҙан атҡаныбыҙ ҙа юҡ бит әле.

- Программа буйынса ҡаралған "Кавалерия полкы эскадроны оборонала" тигән тактик занятиеларҙы ла үтмәгәнбеҙ, ул нисек була инде?

Икеләнеүсе был бер нисә кешене ҡалғандары шундуҡ бөрөп алдылар:

- Ағас пушканан аттың да инде, шул һиңә етмәгәнме ни?

- Бер көн күрше артдивизионда пушкаларҙың атҡанын ҡарап торҙоң бит, еткән!

- Хәҙер оборонаны түгел, һөжүм итеүҙе өйрәнергә кәрәк, шул оборонаны яҡшы белгән өсөн Волгаға килеп еттек бит инде!

- Бында ятып барыбер һуғышырға йүнләп өйрәнеп булмай инде ул, тиҙерәк фронтҡа, вот все! Фронт үҙе өйрәтер әле.

Ә ҡайһы берәүҙәре үтәрәк тә фәстереп ебәрә. Бөгөн кискә казармаға ҡайтып ингән курсанттар ауыҙынан Ғилмишәриф тағы ла ҡыҙығыраҡ, тағы ла мөһимерәк һүҙҙәр ишетте. Улар араһында үҙенең ике яҡҡа тырпайып торған ажар мыйығы менән дә, оло йәше менән дә айырылып торған сверхсрочник, взвод командирының ярҙамсыһы, башҡаларға ҡарағанда ла ашараҡ һуҡтырып ебәрҙе. Ҡыҙыл Армияның күренекле полководецтары тураһында һүҙ сыҡҡас, ул ике күҙенең береһен дә йоммай:

- Әгәр ошо беҙҙең атлы ғәскәр булмаһа, Ҡыҙыл Армияла телгә алырлыҡ йүнле хәрби начальник булыр инеме? - тип үҙенә үҙе һорау бирҙе лә ҡул бармаҡтарын бөгә-бөгә һанарға кереште. Ленинград фронтында, Мәскәү аҫтында фашистарҙың кәрәген биргән армия генералы Жуков кем? Һуғыштан алдағы атлы полк, атлы дивизия командиры. Һигеҙ йыл буйы Белоруссияла атлы дивизия менән командирлыҡ итеүе бушҡа түгел. Атлы дивизия Ҡыҙыл Армияның стратегик* ғәскәре ул. Әгәр ул атлы ғәскәрҙә хеҙмәт итмәһә, иптәш Сталин уны Халхин-Голға япондарға ҡаршы Совет ғәскәрҙәре төркөмөнә командующий итеп ебәрәме? Сроды ла ебәрмәй. - Үҙен һырып алған, унын хәбәренән ҡыҙыҡһынып күҙҙәре янып торган йәш кавалеристарға ул бер ҡараш һирпеп алды ла һүҙен дауам итте: - Ана, беҙҙең батька Вербицкий унын полкында эскадрон командиры булып хеҙмәт иткән. Ул Жуковты үҙен дә, кешене лә йәлләмәй торған, бик талапсан командир ине, тип һөйләй.

Взвод командиры ярҙамсыһы рәтендәге бер нисә кеше уны хуплап һүҙгә ҡыҫыла:

- Хоть беҙҙең Семен Михайлович Буденныйҙы ал. Атлы ғәскәр менән командалыҡ итмәһә, ул разе маршалға тиклем барып етә алыр инеме?

Унын һүҙен башҡалар ҙа элеп ала:

- Ә маршал Тимошенко кем? Граждандар һуғышы ваҡытында Деникинды ҡыйратып, Врангелды Ҡара диңгеҙгә алып барып ауҙарған Беренсе Атлы армияла комбриг булған түгелме?

Башҡалар ҙа унын һүҙен ҡеүәтләй:

- Конечно, булған. Дөп-дөрөҫ.

- Ә маршал Ворошилов? Беренсе Атлы армияла ул да атҡа атланып хәрби Совет ағзаһы булып йөрөгән дә баһа.

- Ә генерал-лейтенант Рокоссовский?

- Уныһы кем һуң?

- Фашисты Мәскәүгә ебәрмәй тотоп торған. 16-сы армияның командующийы.

- Һанап китһәң, күптәр әле ул. Беҙ унын эре-төрөһөн, газетала баҫылғандарын ғына беләбеҙ.

Ҡайҙандыр килеп араға ҡыҫылған музыканттар взводының трубачы ла тауыш сығарып ҡуйҙы:

- Әллә кавалеристар Ҡыҙыл Армияның командирҙары араһында ғына тип уйлайһығыҙмы? Бик тәрән яңылышаһығыҙ. Мировой лирик тенор Сергей Яковлевич Лемешев башта кем булған тип уйлайһығыҙ? Белә белһәгеҙ, ул да беҙҙең брат-кавалерист. Йырсы булырҙан алда ул башта кавалерия училищеһына инеп уҡып сыҡҡан, белдегеҙме?

- Ә батшаның күренекле генералдары Брусилов, Игнатьев һәм башҡалары кем? - тип кемдер был һүрелә башлаған әңгәмәне оҙайтырға теләп тауыш бирә.

- Ҡуй әле, шул батшаға тәрилкә тотоп йөрөгән генералдарынды!

- Эй, уларҙың бысағымамы кәрәктәре? Совет атлы ғәскәренән үҫеп сыҡҡан үҙебеҙ кеүек ярлы-ялпы генералдар бөткәнме?

Шулай итеп, бөтә күренекле йүнле командирҙар барыһы ла ҡасандыр атҡа атланып, улар һымаҡ уҡ ат ҡойроғона йәбешеп йөрөгән ябай атлылар булыуын, әгәр инде кавалеристар әйтмәксе "ат ергә бәреп һуҡмаһа, шпорҙар ҡамасауламаһа" бындағы әңгәмәлә ҡатнашҡан һәр икенсеһе, полкты булмаһа ла, кәм тигәндә эскадронды дошман өҫтөнә атакаға ташларға әҙер икәнлегенә ысын күңелдәренән ышанып, һәр кем үҙ йомошона тарала. Ҡыҙыҡ халыҡ ул кавалеристар!

Ситтә генә һүҙгә ҡушылмай былар хәбәрен тыңлап торган Ғилмишәриф тә эстән генә уларҙың күбеһенең фекерен хуплай. Ул да фронтҡа ашҡына, тик уны бер генә нәмә борсой - үҙ Әүхәҙие кем менән ҡала? Ярай ҙа һуң үҙ айғырын уға бөтөнләй беркетһәләр, ҡайһылай ҙа шәп булыр ине. "Башҡа курсанттарҙың барыһының да үҙҙәренә беркетелгән аттары бар ҙа һуң. Мин кемдән кәм. Уға атланабыҙ тип бер тапҡыр маташып ҡаранылар ҙа инде. Бының аҙағы ни менән бөттө? Етмәһә, мин училищела башҡа курсанттар хоҡуғында ла түгел. Минең буйһонған хужам хәҙергә майор Пустовой бит әле. Мин бында ла шул ат өйрәтеү менән ғүмер уҙҙырырмын микән?" - тип уфтана Ғилмишәриф.

"Подъем"дан һуң ат һарайында Әүхәҙиҙе таҙартып бөтөүгә башҡа курсанттар үҙ аттарының саңын йәһәт кенә ҡаҡҡылап алдылар ҙа эскадронлап стройға теҙелделәр. Бына гел генә туры төҫтәге аттарға атланған беренсе курсанттар эскадроны ат һарайы эргәһенән Ғилмишәрифтең былай ҙа ашҡынған йөрәген елкендереп ер һелкетеп үтеп китте. Фуражкаһына һыймаған сәсен сикәһенә сығарып алғы шеренгыла барған бер курсант, баҫҡан өҙәңгеләренә майшәм кеүек күтәрелә биреп, йыр башлап ебәрҙе:

Если есть запас патронов,
То товарищу отдай.

Бөтә эскадрон ул башлаған көйҙө йоҡонан уянып мыжғый башлаған ҡаланы, иртәнге һалҡынса һауаны яңғыратып берҙәм эләктереп алды ла ҙур дәрт менән артабан дауам итте:

Эй, вы поля, зеленые поля,
Красна кавалерия, садись на коня.
Да, да, эй вы поля...

Ғилмишәриф бөтә бөтмөшө менән стройға ынтылды. Бер ниндәй дошман да ҡаршы торалмаҫлыҡ, алдындағы бөтә кәртәләрҙе лә емереп үтерлек булып тойолған бына-бына һуғыш яланына оҙатылырға тейешле эскадронға ашҡынды.

Майор Пустовой Ғилмишәриф менән индивидуаль занятиеларға күсте.

Башҡа учебный эскадрондар өсөн программа буйынса спорт ярыштарына өйрәнеү, ат сабыштырыу, конкурҙа ҡуйылған төрлө бейеклектәр аша һикереүҙәр ҡаралһа ла, училищеның командованиеһы уны ныҡ ҡына ҡыҫҡартып, подразделениеларҙы тиҙерәк һуғышҡа әҙерләү занятиелары менән алыштырҙы. Курсанттар "Эскадрон оборонала", "Атлы полк дошманға ҡаршы һөжүмдә" тигән занятиелар, яҡын бойҙа ҡылыс менән эш итеү, атлы ғәскәр атакаһында эйәр өҫтөндә карабиндан атыу алымдарын өйрәнделәр. Үҙ аттарын әкренләп атыш тауышына, ғөмүмән, киләсәк һуғыш шау-шыуына өйрәттеләр. Һуңғы ваҡыттарҙа "Училище бөтөнләйе менән фронтҡа оҙатыла икән", "башта унын бер нисә эскадронын ғына ебәрәләр икән" тигән хәбәр көндән-көн ҡуйыра, йышая башланы. Бер көн шулай ошо хәбәрҙе ҡаға-һуға булһа ла ишетеп ҡалған Ғилмишәриф, ҡаты режимда тороп эстәре тартылып, бөтә тороҡ оҙон кәүҙәһе тағы ла һомғоллана төшкән айғырын етәкләп һарайҙан сығып килгәндә, майор Пустовойға тап булды. Хәҙер ул үҙ командирын бик һирәк осрата башланы. Иртән тора ла үҙ атына атланып эскадрондарға олаға. Ғилмишәрифкә ике аҙнаға расписание төҙөп биргән дә унын менән тик бер нисә спорт алымдарын өйрәнеп бөткәс, имтихан алған шикелле генә осратып үҙ фекерен әйтә лә тағы юғала. Ә бына бөгөн һарай ишегендә үҙе күренде. Ғилмишәриф теҙгенде һул ҡулына алды ла уң ҡулы менән честь бирҙе. Майор ҡайҙалыр ашыға ине, шуның өсөн үҙ ҡыҙылармеецының һуңғы көндәрҙәге эше менән артыҡ ҡыҙыҡһынып торманы. Ләкин ниндәйҙер һораулы күҙ ҡарашы менән төбәлгән Ғилмишәриф эргәһенән майор былай ғына үтеп китә алманы. Асығын ғына әйткәндә, донъяның байтаҡ әсе-сөсөһөн татыған төрлө ат эйәренә ышҡып тиҫтәләгән салбар туҙҙырған майор күптәнән инде ошо Ғилмишәриф һымаҡ ат йәнле, әйткәнде урын-еренә еткереп башҡара торған, арыу-талыуҙы белмәй бөтә ғүмерен атҡа бағышлаған кешене эҙләй ине. Әмәлгә ярағандай, бына унын ҡулына "күктән көткәнен ерҙән килтереп бирҙе хоҙай". Аты ла, үҙе лә сыҙамлы, беше ике йән майор күңеленә хуш килде. Майор ҙа эстән генә генералды өгөтләп ошо егеткә офицер званиеһы бирҙереп, үҙенең урынына, ваҡытлыса ғына булһа ла, ҡалдырып фронтҡа китеү теләге менән яна ине.

**(Дауамы. Башы 29-36-сы һандарҙа).**

**Дошманға ҡаршы оборона тотоу һәм һөжүм итеү мәсьәләләрен үҙ аллы хәл итә торған соединение. Бынан тыш уҡсы соединениелар составында тактик тип аталған кавалерия ла була.*

*✓ Исемлектәге эштәрҙе эшләй барабыҙ, һыҙа барабыҙ. Бына ошо ваҡытымды планлаштыра белеү, үҙаллылыҡ, кемдеңдер әйткәнен көтөп тормай эшләй белеү, биргән вәғәҙәң алдындағы яуаплылыҡ миңә әле лә ярҙам итә.*



*ТАЛАНТЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

**Юрматы ырыуының Илсек Тимер тоҡомон дауам итеүсе данлы нәҫел ул Ҡотошовтар. Нәҫел шәжәрәләре барланған: дәүләт эшмәкәрҙәре, төрлө кимәлдәге етәкселәр, яҙыусы-ғалимдар, гәзит-журнал мөхәррирҙәре, тарих, философия, хоҡуҡ, иҡтисад, медицина фәндәре белгестәре, уҡытыусылар - Ҡотошовтар шәжәрәһенең төп асылы. Салауат башҡорт дәүләт драма театрының директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Айбулат Ҡотошовтоң атаһы Минеғәле Зәйнәғәле улы менән әсәһе Хәлимә Хариж ҡыҙын бар ғүмерҙәрен балаларға белем биреүгә арнаған хөрмәтле уҡытыусы-остаздар тип беләм. Минеғәле Зәйнәғәле улы күп йылдар Әхмәр урта мәктәбен етәкләне, Хәлимә Хариж ҡыҙы ошо мәктәптә уҡыу-уҡытыу буйынса директор урынбаҫары, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләне. Һоҡланғыс уҡытыусылар! Айбулат Минеғәле улы менән әңгәмәне лә ошо юҫыҡта башланыҡ.**

# ЯҘМЫШТЫҢ ҮҘЕНӘ ТӘҒӘЙЕНЕН...

## тамырҙарынан һут алғанын һайлаған

**➔ Артист булып китеүегеҙ осраҡлылыҡ түгелме? Һайлау алдында торғанда бизмәндең икенсе яғында уҡытыусы һөнәре булғандыр бит?**

- Сәнғәт, бигерәк тә театр сәнғәте, унда осраҡлы килгәндәрҙең урыны түгел ул. Артист яҙмышына яҙылғандарҙы сәхнә өсөн тыуғандар ғына күтәрә ала. Ә һөнәр һайлағанда икеләнеүҙәр булды, әлбиттә. Әммә бизмәндең бер яғында - минең, икенсе яғында атай-әсәйемдең, Рамазан бабайымдың (философия фәндәре кандидаты, яҙыусы, журналист Рамазан Ҡотошов) теләге ине. Нәҫелебеҙҙә уҡытыусылар күп, уларҙың дөйөм эш стажы 500 йылдан ашыу. Шуға күрә атай-әсәйемдең, бигерәк тә Рамазан бабайымдың мине лә уҡытыусы итеп күрергә теләүенә аптырайһы түгел. Уларҙы еңдем, күндерҙем, тип әйтә алмайым, ҡасып та сығып китмәнем, документтарҙы тапшырырға Өфөгә атай менән бергә барҙыҡ. Өфө-Белорет араһы яҡын ғына ер түгел, документтарҙы иртәгә иртән тапшырырбыҙ, тип, Рамазан бабайҙарҙа туҡталдыҡ. Ул беҙҙе: "Һунланығыҙ, сәнғәт институтына документтар ҡабул итеү туҡталды", - тип ҡаршы алды. Ысын булғанмылыр ул хәл, бушмылыр - барып тикшереп торманыҡ, Стәрлетамаҡҡа, педагогия институтына юлландыҡ. Тарих факультетына инеп, уҡый ҙа башлағайным инде, 3-4 айҙан документтарымды алып ҡайттым да киттем.

**➔ Үҙ белдегең менән институтты ташлап ҡайтып китеүеңде баш-баштаҡлыҡ итеп ҡабул итмәнеме атайығыҙ? Ҡайтҡас эләкмәнеме?**

- Атайым беҙҙе бәләкәйҙән: "Тормошоғоҙҙа нимә генә булһа ла иң тәүҙә өйгә ҡайтығыҙ, бәләгә тарыныҡыҙмы, кәнәш кәрәкме - хәл-әхүәлегеҙҙе иң тәүҙә атай-әсәйегеҙгә һөйләгеҙ", - тип өйрәтте. Документтарымды ҡулға алғас, тура өйгә ҡайтмаһам, әләгер ине, моғайын. Беҙҙең өйҙәң түбәһендә сыбыҡ эленеп торҙо тороуын, әммә яҙмышты хәл иткән һорауҙар сыбыҡ менән түгел, һөйләшеп, кәңәшләшеп хәл ителде. Кеше үҙенең күнеле яткан һөнәрҙә һайларға тейеш, тигәнерәк аңлатмамды атайым тыныс ҡабул итте һәм: "Уҡыу оҡшамаған, эшләп ашайһың инде, ана, клуб бикле тора, мөдире юҡ, эшләп ҡара әле", - тип, яҙмышымды Макаренкоса хәл итте. Ең һыҙғанып эшкә тотондом, клуб гөрләп торҙо. Бәләкәй генә ауылдыҡы булһын, сәхнә сәхнә инде ул - минең сәнғәт институтына барам тигән теләгемде көсәйтте генә. Киләһе йылына актерҙар бүлегендә уҡый башланым.

**➔ Уҡытыусылар династияһының сылбыры һеҙҙә өҙөлмәгәндер бит?**

- Беҙ - игеҙәктәр. Минең һыңарым Салауат - физкультура уҡытыусыһы. Беҙҙең сылбырҙа династияны ул дауам итә. Бәләкәй ҡустыбыҙ ҙа уҡытыусы һөнәрен һайланы. Уларҙың ҡатындары ла уҡытыусылар. Ә минең маңлайыма икенсерәк яҙмыш яҙылған булғандыр, күрәһең. Сәнғәт юлынан киткәнемә һис кенә лә үкенмәйем. Яҙмыштың үҙемә тәғәйенен һайлағанмындыр, тим.

**➔ Ә сәнғәткә һөйөү нисек яралды?**

- Ул һөйөү минең менән бергә яралғандыр ул. Гармун уйнай башлағанда миңә 5-6 йәштәр самаһы ине. Ул гармунды ла үҙем "эшләп" алдым. Атайым директор булғас, район үҙәгенә йыш бара, төрлө ярыштарҙа ла ул алып ҡайта. Шулай бер көндө ҡайҙандыр ҡайтып инеү менән әсәйемә "Кустыңдың улы бар!" тип һөйөнсөләне. Шул хәбәрҙе ишетеү менән мин ауылдың икенсе осона тот та сап. Барып, һөйөнсөләп, һөйөнсөһөнә гармун әйттереп ҡайттым. Алып бирҙеләр әй гармун! Уйнарға өйрәнеп алғас, бер сама йырлай ҙа белгәс, тиҙ арала ауыл клубының иң бәләкәй артисенә әйләндем дә ҡуйҙым. Шунан алып сәхнәләмен инде.

Ә тәүге күреп белгән артистарым - атайым менән әсәйем. Элегерәк ауыл уҡытыусыһы уҡытыусы ғына түгел, агитатор ҙа, артист та булды бит инде. Минең атай-әсәйем дә көндөҙ - мәктәптә, кисәрен клубта ине. Уҡытыусылар коллективы менән ҡуйған концерт-спектаклдәрен репетициялары ваҡытында уҡ күреп-йөрөп үҫтек, реквизиттарын ғаилә менән бергә әҙерләп, бергә ҡайнап йәшәнек. Ролдәрен уларҙан алда ятлап бөтөп, атай-әсәйем өйҙә юҡта шул ролдәргә тәғәйен кейемдәрҙе кейеп, үҙебеҙсә гримм һалып, урындыҡты сәхнә итеп уйнай торғайныҡ. Ауылға килгән артистар һәр ваҡыт беҙгә туҡтала ине. Уларҙы ҡаршы алыу, кистәрен концертҡа барыу, концерттан һуң төн ауғансы аралашып, йырлашып ултырыуҙар - береһе лә эҙһеҙ үтмәгәндер, сәхнәгә һөйөү шулай яралғандыр.

Әхмәт ағай Лотфуллин да йәйҙәрен беҙгә йыш килә, Мөхәмәт ауылының тирә-яғына сығып, шунда ял итергә ярата ине. Атайым менән бергәләп тәбиғәткә сығалар, беҙҙе лә үҙҙәре менән алалар. Уларҙың сәғәттәр буйы һөйләшеүҙәренә ҡолаҡ һалып, күңелгә һеңдереп йөрөйһөң. Берәй ағас күләгәһенә ултырып алалар ҙа, атайым йырлап ебәрә, Әхмәт ағай мөкиббән китеп, уның йырын тыңлай, ҡат-ҡат һорап йырлата ине. Атайымдың тауышы ғәжәп моңло, мин әле һаман уның йырлағанын яратып тыңлайым. Уҡытыусы булмаһа, ул, моғайын, профессиональ йырсы булыр ине. Ул Өфөлә, әлеге Рәми Ғарипов исемендәге гимназияла уҡыған. Шул саҡта уҡ радио, телевидение фондына уның башҡарыуында йырҙар яҙҙырып алғандар, Рафиҡ Сәлмәнов, Нариман Сабитов, Заһир Исмәғилев кеүек композиторҙарҙың юбилей концерттарында ла йырлаған. Заһир Исмәғилев уны йырсы итеп күрергә теләгән дә бит, әлеге лә баяғы Рамазан бабайым еңгән. Әсәйем дә күңеле менән сәнғәт кешеһе ул: сценарийҙар, шиғырҙар яҙа, шиғырҙарҙы һәр өнө йөрәгенә аша үтерлек итеп уҡый. Әйткәндәй, мәктәптә уҡығанда әсәйем етәкләгән драма түңәрәгенә йөрөнөм, тәүге тапҡыр сәхнәгә мине ул алып сыҡты. Тормошҡа ҡарашымды, һайлаған һөнәремә мөнәсәбәтемде формалаштырыусылар ҙа, сәхнәгә аяҡ баҫҡаны бирле тәүге тәнҡитселәрем дә атайым менән әсәйем булды. Шуға күрә сәнғәткә һөйөү ҡаныбыҙҙан килә, тип әйтергә тулы ерлегем бар.

**➔ Ояһында ни күрһә, осҡанында - шул, тиҙәр бит. Сәхнәне ташлап, тәүҙә Ишембай районы мәҙәниәт бүлеге начальнигы булып эшләйһегеҙ. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң һеҙҙе ҡабаттан Сибайға, театр-концерт берекмәһенә директор итеп саҡыралар. Инде бына нисә йыл Салауат театрын етәкләйһегеҙ. Буй-һыныҡығҙа ғына түгел, холоҡ-фиғелегеҙгә һеңгән етәкселек әҙәптәре атайығыҙҙың ғына мәктәбеме, әллә башҡа серҙәре лә бармы?**

- Кем булып китеүеңдә тәрбиәләнгән мөхиттеһ йоғонтоһо ҙур, әлбиттә. Атаһынан күргән - уҡ юнған, тигәне лә бар бит мәҡәлдең. Үҙемде белә-белгәнә бирле мәктәп директоры булып эшләгән атайымдың етәкселек ғәмәлдәре ҡанымда ла, аңыма ла һеңгәндер инде. Ауылда клуб мөдире булып эшләгән ваҡытта миңә ун һигеҙ генә йәш ине. Кәүҙә елле булһа ла, мин ниндәй етәксе инде ул йәштә? Белем дә, тәжрибә лә юҡ. Тәүге аҙымдарым, тәүге ҡарарҙарым, әлбиттә, атайымдың күҙәтеүе аҫтында булды. Биргән кәңәштәре - ғүмерлек һабаҡ. Ҡайҙа ғына эшләһәм дә, ниндәй генә үрҙәргә үрләһәң дә кеше булып ҡалырға кәрәклеге атайым һәм ғүмере буйы эштә лә, өйҙә лә уның кәңәшсеһе, тәнҡитсеһе булған әсәйем миҫалында шулай уҡ бәләкәйҙән ҡаныма һеңгән.

Ә ҡан хәтере көслө бит ул. Нәҫел ағасыбыҙҙа ғәжәйеп биографиялы шәхестәр бар. Әсәйемдең өләсәһе бик көслө имсе, кендек әбейе була. Им-ырымдар, ҡул йылыһы менән ҡатын-ҡыҙҙарҙы дауалай. Хатта ваҡытынан алда ҡолон һалырға йыйынған бейәләрҙе ҡолонлатмай туктата ала. Ҡулың белгәнендә сәбәләнмәй, һөрәнләмәй генә эшләй йөрөргә беҙгә әсәйемдең әсәһе өйрәтте. Уның тәрбиәһе хаҡында ла йыш уйланам. Олоғая килә, ул өйрәткән доғалар ҙа йыш уҡыла хәҙер. Тыуған ауылымда мәктәп һигеҙ генә йыллыҡ булғанлыҡтан, 9-10 класты күрше Миндәк ауылында уҡыным, әсәйемдең апаһы, шағир Вил Ғүмәровтың әсәһе Мәфтуха инәйемдәрҙә йәшәнем. Ул ике йыл да минең өсөн рухи тәрбиә мәктәбе булды.

Атайым яғынан Әхмәт олатайым - Вәлидиҙең көрәштәше, 18-19 ғына йәшендә Башҡорт хөкүмәте ағзаһы булған. Мәскәүҙә журналистика институтын тамамлап ҡайтҡас, "Башҡортостан" гәзитендә баш мөхәррир урынбаҫары, Башҡортостан "Китап" нәшриәтенең баш мөхәррире вазифаларында эшләгән, башҡорт алфавитын латин графикаһынан кириллицаға күсереү буйынса терминология комиссияһы ағзаһы булған, Мопассан, Александр Дюма, Л.Н.Толстой, Чехов әҫәрҙәрен башҡорт теленә тәржемә иткән, 1948 йылда Мәскәүҙә нәшер ителгән русса-башҡортса һүҙлек төҙөүҙә ҡатнашҡан. Ошо олатай-өләсәйҙәремдең яҙмышын уйлайым да, әле мин улар эшләгәндең сиреген дә эшләмәгәнмен бит әле, тип, ҙур яуаплылыҡ менән тотонам һәр эшкә. Эшкә бер тотонғас, хатта ял итергә лә онотоп, ҡулдан килгәндең барыһын да эшләргә күнеккәнмен. Быныһы - әсәйем тәрбиәһенән дә киләлер. Беҙҙе бер-ике көнгә өйҙә үҙебеҙҙе генә ҡалдырып киттеләрме, әсәйем оҙон итеп беҙ эшләйһе эштәрҙе яҙып ҡалдыра. Беребеҙ бер көн өйҙәге өй йыйыштырыу, иҙән йыуыу, ашарға бешереү кеүек көндәлек эштәр менән булһа, иртәгәһенә тышҡа, малайҙар эшенә сығабыҙ. Исемлектәге эштәрҙе эшләй барабыҙ, һыҙа барабыҙ. Бына ошо ваҡытымды, көнөмдө планлаштыра белеү, үҙаллылыҡ, кемдеңдер әйткәнен көтөп тормай эшләй белеү, әйткән һүҙең, биргән вәғәҙәң алдындағы яуаплылыҡ миңә әле лә ярҙам итә.

**➔ Һәр уңышлы ир-егет артында ҡатын-ҡыҙ тора, тигән әйтем менән килешәһегеҙме?**

- Килешәм. Эргәңдә һәр ваҡыт һине аңлап торған ҡатын-ҡыҙ булыуы бәхет ул. Һәр ир-егеттең Мостай Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" әҫәрендәге кеүек Оло инәйе булһа, ҡайһылай һәйбәт булыр ине: улар тормошондағы бик күп яңылышлыҡтар, гонаһтар, ҡоро аҡыл менән генә ҡабул ителгән ҡарарҙар булмаҫ ине. Ҡайһы саҡта ситуацияға ҡатын-ҡыҙ күңеленең һиҙгерлеге, һығылмалы аҡылы һәм йөрәге аша ҡарарға кәрәк була. Шундай осраҡта эргәңдәге ҡатын-ҡыҙ ышаныслы ла булһа, бигерәк һәйбәт. Был йәһәттән мин нык уңдым: кәңәш-доғалары менән хәтеремдә йәшәгән өләсәйем, тормошомдоң иң ауыр мәлдәрендә миңә терәк-таяныс булған, беҙ айҙар буйы гастролдәрҙә йөрөгәндә балаларыбыҙҙы ҡарап-үҫтерешкән әсәйем һәм, йырҙа йырланғанса, мин ҡайҙа - ул шунда йөрөгән, минең барлыҡ уйхәстәрҙәремдә уртаҡлашҡан ҡатыным бар.

**➔ Ғаиләлә өс малай үҫкәнһегеҙ. Һәр берегеҙ - бәләкәйҙән лидер. Үҙ-ара мөнәсәбәттәрегеҙ нисек булды? Ниндәйерәк ағай булдығыҙ?**

- Был һорауҙы миңә йыш бирәләр. Үҙ-ара һуғыша торғайныҡыҙмы, тип һорағандары ла бар. Бик дуҫ, татыу үҫтек, нимәлер бүлешә алмай йөрөгәнебеҙҙе бөтөнләй хәтерләмәйем. Бәләкәй саҡта эш араһында ла, кис йоҡларға яткас та оҙаҡ итеп һөйләшә торғайныҡ. Дөрөҫөрәге, күберәген мин һөйләй инем, һынарым тыңлай ине. Хәҙер, киреһенсә, ул һөйләй, мин тыңлайым. Ә бәләкәсебеҙ менән беҙҙең арала ун бер йәш. Йүргәктә саҡта бергәләп ҡараштыҡ, атлап киткәс, беҙҙең арала сүкеш-ҡаҙаҡ тотоп үҫте, ҡулыбыҙ белгәнде уға ла өйрәттек. Беҙ сығып киткәндә ул бала ғына ине әле. Өйгә уны һағынып ҡайта инек. Институтта уҡыған йылдарында (ул ваҡытта мин Сибайҙа инем) институттың бөтә шарттары булған матур ятағы булһа ла, беҙҙең балаларҙы ҡарашып, уларҙың оло ағайҙары булып, беҙҙә йәшәне. Әле лә атай-әсәй янында бер-беребеҙҙе һағынышып осрашабыҙ.

(Дауамы 16-сы биттә).

ИНТЕРНЕТТАН



## ҮҘЕҢДЕКЕ - ФАЙҘАЛЫРАҠ

■ Гастроэнтеролог Елена Манило ашҡаҙан-эсәк тракты ауырыуҙарынан иң файҙалы эсемлек тип кесәлде атай. СССР заманында кесәл ябығыу өсөн киң файҙаланыла. Уның ашҡаҙан әселеген түбәнәйтеү сифаты ла билдәле. Бынан тыш, ашҡаҙанды тынысландыра, түбән калориялы булыуына ҡарамаҫтан, туҡлыҡлы. Дисбактериоз - эсәк микрофлораһы боҙолғанда кесәл файҙалы. Составындағы кукуруз йәки картуф крахмалы эсәктәрҙә бифидо- һәм лактобактерияларҙың үрсеүенә килтерә. Шуға ла онотола төшкән был эсемлекте кире туҡланыу рационына ҡайтарыу бик урынлы.

■ Көҙ сәләмәтлек өсөн һынау мәле лә ул. Йәйгә йәйрәп, йылыға өйрәнгән организм һалҡында өшөп бара. Ошо мәлдә ауырымай ғына үткәреп ебәреү өсөн дөрөҫ туҡланырға һәм йоҡоно туйҙырырға кәрәк, ти диетолог, нутрициолог Анна Ивашкевич. "Киске 11-гә тиклем йоҡларға ятып, 7-лә торһағыҙ, гормондар ритмына тура килерһегеҙ" - ти ул. Шулай ҙа улай оҙаҡ йоҡлай алмайһығыҙ икән, иртә ятығыҙ һәм иртә тороғоҙ. Иң мөһиме, организм төнгө 1-гә тиклем ял итергә тейеш, юғиһә, иртән арып килеп торасаҡһығыҙ. Ниндәйҙер эштәр булғанда ла төн уртаһына тиклем ултырмай, ҡара таңдан тороп эшләү организм өсөн дөрөҫөрәк. Йәйәү йөрөү - көҙгө шөғөлдәрегеҙҙең береһе булһын. Көнөнә 7-10 мең аҙым үтеү физик йәһәттән әүҙем булып ҡалырға һәм яҡшы кәйефте һаҡларға ярҙам итә. Йоҡлар алдынан аяҡтарҙы һалҡын һыу менән сайып алыу иһә сыныҡтырасаҡ. Рационға яйлап туҡлыҡлы ризыҡтар ҡайта, һыуыҡтар мәлендә йәшелсә-емеш ашап ҡына йөрөү дөрөҫ түгел, ти белгес. Һырғанаҡ, ҡабаҡ, кишер ашарға тырышығыҙ, улар сирҙәрҙән һаҡлаясаҡ, витаминдар менән байытасаҡ. Шулай уҡ имбер, борос, керән, гәрсис, һарымһаҡ вирустарға ҡаршы көрәшергә булышлыҡ итә. Һыу эсеүҙе гәҙәткә индереү кәрәк, юғиһә, кеше йәй һыу эсә, ә ҡышын таҙа һыу эсеүҙе онота. Иртән торғас, төшкө һәм киске аш алдынан ҡайнарыраҡ итеп һыу эсеү иң яҡшыһы. Көн дауамында иһә үлән сәйҙәре эсеп алығыҙ.

■ Бөтнөк сәйе стресҡа ҡаршы көрәшә - табип-диетолог, медицина фәндәре докторы Марият Мухина шулай тип белдерә. Стресс кисереү организмға төрлөсә тәьҫир итә, йышыраҡ ҡан баҫымы күтәрелә, йөрәк тибеше йышая, ҡан ҡуйыра һәм ҡан тамырҙары ҡыҫыла. Бөтнөктә ментол күп, ул дауалаусы һәм тынысландырыусы сифаттарға эйә икән. Бөтнөк ҡан тамырҙарын киңәйтә, ҡан яҡшыраҡ йөрөй башлай. А, С һәм В төркөмө витаминдарына ла бай. "Стрестан төрлө эсемлектәр бар, әммә беҙ йәшәгән төбәк өсөн иң ҡулайлыһы - бөтнөк сәйе. Ситтән килтерелгән үсемлек түгел, үҙебеҙҙә үҫә, билдәле булыуынса, үҙ ерендә үҫкәндең генә организм өсөн файҙаһы бар. Шулай уҡ уның составындағы витаминдар баш мейеһе эшмәкәрлегенә ыңғай йоғонто яһай, үт бүленеп сығыуға булышлыҡ итә", - тине Мәскәү24 каналы журналисы менән әңгәмәһендә Марият Мухина.

■ Медицина фәндәре кандидаты Зөһрә Павлова билдәләүенсә, ас ҡарынға алма ашарға кәрәкмәй. Унда глюкоза менән фруктоза күп, улар аппетитты күтәрә, әммә энергия кимәлен түбәнәйтә. Шуға ла, әйтәйек, иртәнге аш менән төшкө аш араһында файҙалы ғына итеп ҡапҡылап алырға теләһәгеҙ, бының өсөн алма һайламағыҙ. Иң яҡшыһы - йомортҡа икән. Шуға бөтәүләй йомортҡа бешереп һалып алығыҙ. Алманы иһә аш бер аҙ һеңгәс, десерт итеп ҡулланырға була.

ӘЛӘСӘЙҘӘР ҺАБАҒЫ

# ҠОМАЛАҠ ЙЫЯЙЫҠ ТА...

## магазин сүпрәһенән ҡотолайыҡ!

**Шифалы үләндәр йыйыу ваҡыты тип, гәҙәттә, йәй миҙгеле исәпләнә. Ә бына үҙе үк муллыҡ, байлыҡ, етешлек сағылышы булған көҙөн ниндәй үсемлектәр йыйып өлгөрөргә була? Ошо һорау менән сәләмәтлек, дөрөҫ туҡланыу, халҡыбыҙға хас дауаланыу ысулдарын өйрәнгән, уларҙы ғәмәлдә әүҙем ҡулланған яҡташыбыҙ, Ейәнсура ҡыҙы, әлеге көндә Татарстандың Әлмәт ҡалаһында йәшәүсе Зәүхиә НИЗАМИЕВАға мөрәжәғәт иттек.**



**➔ Зәүхиә апай, һеҙҙе шифалы үләндәр, халыҡ дауаһы буйынса белгес итеп беләбеҙ, интернет киңлектәрендә үҙегеҙҙең тәжрибә менән дә әүҙем уртаҡлашаһығыҙ. Һәр үләндең үҙенең йыйыу мәле була, әлеге ваҡытта нимәләр йыйырға кәңәш итер инегеҙ?**

- Алтын көҙҙөң беренсе айында мотлаҡ ҡомалаҡ йыйып ҡалығыҙ, тип әйтер инем. Быйыл көҙ йылы, әлеге ваҡытта урман ситтәрендәге, һыу буйҙарындағы ағастарға, ҡыуаҡтарға үрмәләп үҫкән ҡомалаҡ тубырсыҡтары йәшкелт-һары төҫкә инеп, өлгөрөп, тирә-яҡҡа тәмле еҫен таратып, үҙҙәрен килеп йыйғанды көтөп ултыра. Мин Биштирәк ауылында тыуғанмын, беҙ бала саҡта муйыл күп була торғайны. Муйыл Ергәйеш менән Яланйыр йылғалары ярҙарын яҙын ап-аҡ сәскәһе менән, көҙөн ҡап-ҡара емештәре менән биҙәп ултырыр ине. Уны йыйғанда ҡышҡылыҡҡа етерлек ҡомалаҡ та йыйып ҡайта инек. Ул ваҡытта һәр бер өйҙә бары тик ҡомалаҡтан яһалған сүпрә менән генә хуш еҫле тәмле икмәк бешерәләр ине. Бөгөнгө йәштәр иһә уның нимә икәнен дә белмәй.

**➔ Икмәкһеҙ тормошто күҙ алдына килтермәгән кеүек, икмәктең зыянлы булыуы тураһында уйлауы ла ҡыйын бит. Яһалма сүпрә - ул ағыу тигәнен ишетә йөрөһәк тә, аҙым һайын булған икмәк кибеттәрендәге ҡабарып торған йылы икмәктән баш тарта алмайбыҙ...**

- Улар беҙҙең һаулыҡты ҡайғыртып эш итмәй инде, эшҡыуарҙар аҡса эшләй. Ҡомалаҡ сүпрәһе менән икмәк әсетеп, уны бер нисә тапҡыр ҡабартып, ҡабат-ҡабат баҫып бешерһәң, тотош көнөң үтә. Ул бөгөнгө мамыҡ кеүек икмәктәр шикелле ҡабарып та китмәй. Килем уйлаусыға ниндәй файҙа булһын?

Бөгөн магазиндарҙа сүпрә тулып ята. Өйҙә лә ошо сүпрә менән бешереү гәҙәткә инде. Уңайлы, һүҙ ҙә юҡ, синтетик сүпрәне ебетеп, ҡамыр баҫаһың да, бер сәғәттән ҡабарып та сыға. Тиҙ ҡабарғанын күҙ уңында тотоп, "Атомлы сүпрә" тиҙәр уны. Әммә уның зыяны ла шул атом зыянынан кәм түгел. Быны ғалимдар күптән иҫбатлаған, табип яҙмаларын, видеоларын ҡарай алаһығыҙ. Аш һеңдереү, ашҡаҙан, эсәктәге төрлө шештәр, шул иҫәптән яман шештең дә күп осраҡта синтетик йәки термофиль сүпрәгә бәйле икәне билдәле. Яһалма сүпрәнең составындағы ГМО, төрлө зыянлы өҫтәлмәләр, химик элементтар организмда әсеп, ҡабарып, беҙҙә эстән сереүгә, иммун системаһының көсһеҙләнеүенә еткерә, кешене тиҙ ҡартайта, тип саң ҡаға ғалимдар. Былар барыһы ла лабораторияларҙа иҫбатланған. Кәсеҙ организмға башҡа сирҙәр ҙә йәбешеп кенә бара. Ғөмүмән, миңә ниндәй ауырыу менән генә кәңәш һорап мөрәжәғәт итһәләр ҙә, тәүҙә ашауҙы яйға һалырға, сүпрә ҡамырынан бешерелгән тәм-томдан баш тартырға кәңәш бирәм. Шунһыҙ һаулыҡ юҡ. Юғиһә, ул организмды эстән һаҙлыҡҡа әйләндерә. Һаҙлыҡта инде вирус, микроб, бактериялар рәхәтләнеп йәшәй, үрсей.

Ә ҡомалаҡтан яһалған сүпрәне тәбиғәт беҙгә һаулыҡҡа зыян һала торған элементтар ҡушмайынса, ГМОларһыҙ, ЕЕ-ларһыҙ, саф көйөнсә бирә. Йәки ҡомалаҡ - тәбиғи, саф продукт. Ҡомалаҡтан ҡамырҙы ҡабартыу өсөн үҙебеҙгә зыяны булмаған бер күҙәнәкле бәшмәктән торған сүпрә яһай, уны ҡурҡыуһыҙ ҡуллана алабыҙ. Сөнки тәбиғәттең лабораторияһында барыһы ла саф шарттарҙа яһала. Иң беренсе йылы ҡояш нурҙары иркәләп үҫтерә, шифалы ямғыр ҡойондора, елдәре сыныҡтыра, изге ер беҙгә кәрәкле бар витаминдарҙы, минералдарҙы, элементтарҙы бирә. Һәм шуныһы, ҡомалаҡ та бары тик үҙенә үҫергә тейешле ерҙә генә үҫә. Тимәк, ул ерҙә уға үҫергә мөмкинлек биргән шарттар бар.

Аллаһы Тәғәлә ҡомалаҡты юҡҡа ғына үҫтермәгән Ер йөҙөндә. Һәр бер үсемлектең кешеләргә файҙа бирергә тигән миссияһы бар. Ҡомалаҡ беҙгә ондо тәмле, ҡабарып, йомшаҡ булып бешкән хуш еҫле икмәккә әйләндерергә ярҙам итеү миссияһын ғына үтәмәй. Составында организм өсөн кәрәкле витаминдар (В1, В3, В6, РР), аскорбин кислотаһы, липулин, эфир майы, һ.б. файҙалы элементтар табылған. Ғәрәп медицинаһында уның һигеҙенсе быуатта уҡ ҡулланыла башлауы билдәле.

Халыҡ дауаһында иһә порошогын һыйыр майы менән бутап, подагра, ревматизм, артрит кеүек быуын сирҙәрендә һеңдереп һөртәләр. 1 балғалаҡ кипкән ҡомалаҡты 1 стакан ҡайнар һыуҙа төнәтеп, ашҡаҙан ауыртҡанда, пиолонефрит, энурез сирҙәренән ашарҙан ярты сәғәт алда эсәләр.

**➔ Ҡомалаҡ Башҡортостандың бар районында ла үҫә. Уны йыйыу, һаҡлауҙың тәртибе ниндәй?**

- Эйе, ҡомалаҡты йыйыу, сеймалға әйләндереү, һаҡлауҙың үҙ тәртибе бар. Беренсенән, һәр емештең өлгөрөү стадияһы була. Сүпрә яһау өсөн алтын, һарғылт-йәшел төҫкә ингән тубырсыҡтарҙы йыяһың. Әгәр ҙә төҫө уңып, көрәнәйеп, ҡарайып киткән икән, һуңлағанһығыҙ. Икенсенән, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараште булыу - һәр кешенең бурысы. Ҡомалаҡ лиана һымаҡ һуҙылып, үрмәләргә нимә бар, шуға йәбешеп үҫә. Ҡайһы бер ағастарҙың осона хәтлем менеп етеп, аҫылынып тора. Уны алам тип, ағасты һындырып, умырып төшөрмәгеҙ. 1-1,5 метрлыҡ баҫҡыс, ҡайсы, секатор алығыҙ. Буй етерлек ерҙә булһа, тубырсыҡтарын шунда уҡ йыйып алырға була. Өсөнсөнән, ҡомалаҡты ҡоро көндә, ямғыр яуған булһа, кипкәс кенә йыйырға кәрәк.

✓ *Үткәндәр менән йәшәү - ул машинаның артҡы күренеште күрһәткән көҙгөһөнә генә ҡарап хәрәкәт итеү. Һеҙ шул көҙгөнән күҙегеҙҙе алмай ғына идара итһәгеҙ, машина менән бергә юлдан ситкә осасаҡһығыҙ.*



Еүеш тубырсыҡтарҙы киптереүе оҙаҡ, күгәреүе лә ихтимал. Унан һуң, ямғыр кәрәкле ферменттарын йыуа. Уға ҡояш, ай нурҙары аҫтында, еләп, яңынан ферментланырға мөмкинлек бирергә кәрәк. Һәр үҫемлекте йыйғанда яҡшы, изге уйҙар менән генә йыйырға һәм рәхмәтле булырға кәрәклеген онотмау ҙа мөһим. Йыйған тубырсыҡтарҙы алып ҡайтҡансы дымланмай торған һауыҡта һалыу һәйбәт булыр.

Ҡомалаҡты дөрөҫ киптереү, һаҡлау ҙа шулай уҡ бик мөһим. Алып ҡайтҡас, иҫкерә башлаған тубырсыҡтарҙы ташлайбыҙ. Ҡояш нурҙары тура төшмәй торған, күләгәле, еләп торған урында, йоҡа сепрәк өҫтөнә йәйеп киптерәбеҙ. 5-6 тәүлектә кибеп тә өлгөрә. Шытырлап, ҡулға әҙ генә ыҫмалаһы йәбешеп тора. Киптереү өсөн беҙ, мәҫәлән, тимер сеткаларға сепрәк йәйеп һалабыҙ, аҫтан да, өҫтән дә еләп тора. Һаҡлауҙың төрлө ысулдары бар. Ҡағыҙ йәшниккә кизе, киндер туҡыма йәйеп, шунда тултырып, өҫтөнә шул уҡ сепрәкте ябып ҡуйып һаҡларға була. Күп урын алмаһын тиһәк, өҫтөнә баҫҡылағыҙ, йә берәр ауыр әйбер ҡуйып, баҫтырығыҙ. Шулай уҡ ҡағыҙ, киндер тоҡтарҙа, ағас һауыттарҙа һаҡларға тәҡдим ителә. Еүеш, насар еҫле ерҙәргә ҡуйһағыҙ, сифаты ныҡ насарая, күгәрә, еҫ һеңә.

Халыҡ телендә "Касып китһәң дә, сәсеп кит" тигән мәҡәл бар. Был осраҡта мин: "Йыйып китһәң дә, киләһе уңышҡа тамыр ултыртып кит", - тип әйтәм. Ҡомалаҡты ҡаҙып алып, икенсе йыл килеп йыйырға уңайлыраҡ ергә күсереп ултыртып китеү ҙә хуплана. Ә бына быйыл уңыш биргән, үҙенең бурысын үтәгән ҡомалаҡтың төбөнән 15-20 см оҙонлоғонда ҡалдырып ҡырҡып, быйылғы ботаҡтарынан арындырып, тирә-яғын таҙартып китһәк, ул икенсе йыл тағын да ҡуйыраҡ булып үҫеп, мул уңыш бирә. Кемдәрҙер баҡсаһында йәки яҡын-тирә урман ситтәрендә үҫтерә. Йәш үҫентеләрҙе күсереп ултыртаһығыҙмы, орлогонан сәсәһегеҙме, ботағынан тамыр ебәртәһегеҙме - үҙегеҙ ҡарағыҙ. Уны шулай уҡ ял итә торған урындарҙы, беседкаларҙы ҡаплап тора торған йәшел, матур ҡойма булараҡ та үҫтерәләр. Тиҙ үҫә, әрһеҙ, ҡуйы була, эҫе ҡояштан ҡорма булып тора, ел дә үткәрмәй.

➔ **Ҡомалаҡ йыйыу - бер эш, унан сүпрә яһай белергә лә кәрәк бит әле...**

- Мин ун йыллап инде сөсө ҡамыр ғына ашайым. Ҡомалаҡ сүпрәһенән икмәк бешергән таныштарым бар, ҡайһы саҡта уларҙан алам. Ә былай ҡомалаҡты йыл һайын йыям. Әсәйемдең сүпрә яһағаны иҫтә ныҡ ҡалған. Кипкән ҡомалаҡты алюмин сәйнүккә тултырғансы һала ла, өҫтөнә сыҡҡансы һыу ҡоя. Мейестең ҡуҙын алғараҡ тарта ла, шунда сәйнүкте ултырта. Ҡайнап сыҡҡас, ҡырыйына әҙ генә ҡуҙ тарта-тарта, тағы 30-40 минуттай ҡайната ине. Газ плитәһе барлыҡҡа килгәс, ул сәйнүк шунда күсте. Алдан уҡ иләп, табаҡҡа һалып ҡуйылған онға сәйнүктәге ҡыҙғылт-һары төҫкә ингән һыуҙы ҡоя ла, тиҙ генә ныҡ итеп болғата. Уртаса шыйыҡлыҡтағы ҡамыр иҙмәһе килеп сыға. Уны һыуытырға ҡуя. Бармаҡ тығып, йылылығын тикшерә. Яңы һауған һөт йылылығы хәтлем булғас, шуға әсетке һала. Шунан табаҡтың өҫтөн ябып, төрөп, йылы урынға ҡуялар. 5-6 сәғәттән сүпрә бик ныҡ ҡабара, унда ҡыуыҡтар барлыҡҡа килә. Ныҡ әсетергә лә ярамай, самаһын һиҙемләү кәрәк. Беҙ үҫкәндә һыуытҡыстар бар ине, банкаға һалып, шунда ҡуя ине. Бөгөн дә ҡомалаҡтан икмәк бешереүсе апайҙар бар, улар оҫталыҡ дәрестәре лә үткәрә, сүпрә өсөн баш та бирә, шуға теләгән кеше үҙе хәстәрен күрә ала.

Халыҡта "Сүпрәгә килдеңме әллә?" тигән шаяртыу бөгөн дә бар. Элек беҙ, ысынлап та, күрше-тирәгә йомошҡа күберәк сүпрә һорап бара инек. Нисектер сиратлап яһайҙар һымаҡ ине, бер күршенекә бөтә башлауға, икенсеһе яһап ҡуя ине. Мейестәр оло, бер юлы 5-6 таба, формалар һыя. Икмәк мейескә ингәнсе ҡабарып, табаға, формаға тулышып етешә, шулай ҙа мейескә ултырҡас та, тығынды япмайҙар. Бер аҙ ҡабарғас ҡына төнлөктө баҫалар. Һәр кем үҙ мейесенең көйөн белә, кемдер бер сәғәттә, кемдер оҙағыраҡ бешерә. Ҡомалаҡҡа бәйле хәтирәләр уның әскелт тәмен иҫкә төшөрөп, йөрәкте елкендереп ебәрҙе әле.

Аллаһы Тәғәлә ҡомалаҡҡа бер ҡасан да үҙгәрмәҫ мәғлүмәт ядроһын - хәҙерге замандың модалы һүҙе менән әйтһәк, матрица йәки мәғлүмәт майҙанын биргән. Ниндәйҙер яһалма аппараттың мәғлүмәтен үҙгәртергә, хатта кешене ҡыйратыу ҡоралына әйләндерергә була, тик Аллаһы Тәғәләнең мәғлүмәтен үҙгәртә алмайбыҙ. Ул бит әҙәм балаһы өсөн тәбиғәт менән берлектә, уға берегеп йәшәһендәр тигән маҡсат менән ошо донъяны бар иткән. Ергә сәселгән һәр бер үҫемлектең орлоғона изге ниәт һалынған. Шуға ошо асылыбыҙҙы һаҡлайыҡсы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Зәүхиә апайҙың һүҙҙәренә ҡеүәт итеп, әйҙәгеҙ, күмәкләп ҡомалаҡ икмәге бешерергә өйрәнәйек, тип әйтәбеҙ һеҙгә. Әллә ниндәй белемдәр эстәп, әллә ниндәй уҡыу йорттарында уҡымаһалар ҙа, башҡорт халҡының бөтөн булмышы менән тәбиғәт балаһы икәненә, борондан үҙен, киләсәк быуынын физик һәм рухи яҡтан сәләмәт итеп һаҡларлыҡ һәм үҫтерерлек тәбиғи һиҙемләүенең камиллығына ҡабат-ҡабат хайран ҡалаһың. Ябай ғына икмәктең дә әллә ниндәй бәләләрҙең башында тороуы ихтимал, бәхтиәң. Шуға ла көнитмешебеҙгә ҡомалаҡ икмәген кире ҡайтарайыҡ.**

*Ләйсән ВӘЛИЕВА*
*әңгәмәләште.*

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ЭТ АҪРАҒАН ЙОРТҠА...

## фәрештә инмәҫ



**Йәйгеһен кем йылға буйында һыу инергә, ял итергә яратмаһын! Мин дә берҙән-бер көндө эштән һуң ҡала янындағы пляжға барып ҡайтырға булдым.**

Яр буйындағы кешенең күплеге хайран итте. Уларҙы аңларға була - көн ныҡ эҫе, томра. Шәхси секторҙа йәшәгәндәргә еңелерәк, ә фатир тәҙрәһенән иртәнән кискә тиклем ҡояш ҡыҙҙырһа, кискә табан үҙенде ярылған мунсалағылай хис итәһең шул. Икенсенән, йәй ғүмере ҡыҫҡа, ҡояшта ҡыҙынып, йылғала йөҙөп тә алғы килә.

Әммә мине нимә аптырашта ҡалдырҙы? Баҡтиһәң, күптәр йылға буйына эт-бесәйҙәрен дә алып килә икән! Килтереү генә түгел, халыҡ күпләп һыу ингән пляжда хайуандарын йыуындыра, тарай! Бына йылғанан хужаһынан алда сыҡҡан йөнтәҫ ҙур эт ярҙа ҡыҙынып ятыусылар эргәһенән үткәндә һыу тамсылары менән кешеләрҙе "ҡойондорҙо". Кемгә оҡшаһын был хәл - йылға буйында, ысын мәғәнәһендә, ғауға башланды. Берәүҙәр ғәмһеҙ эт хужаһын тетте, икенселәре гуманлылыҡ күрһәтеп, телефон аша хайуандарҙы һыу индереү закон тарафынан яҡланыуын дәлилләгән ҡағыҙҙәрҙе күрһәтте. Күптәрҙең тыныс ҡына ялы боҙолдо, ҡайнар ҡояш, йылы һыу ҙа кәйефте күтәрә алманы. Беҙ ҙә ҡайтыр яҡҡа йүнәлдек.

Ысынлап та, кемдәрҙер бәләкәй балалары менән килә һыу инергә, ә иркен йөрөгән эт йыш ҡына ана шул бәләкәстәрҙе ҡурҡыта. Икенсенән, үҙенән саҡ ҡына өҫтәрәк йөҙгән эттең ҡойолған йөнө тәненә йәбешеүе лә ытырғаныс.

Һуңғы йылдарҙа йортонда бесәй генә түгел, икешәрләп эт аҫрағандар арта. Сәбәбен аңлата алмайым - улар һинең менән аш бүлмәһенә генә түгел, өҫтәл янына уҡ яҡын урынлашып, башын өҫтәлгә һала, һинең һәр ҡабымыңды күҙәтә. Ә телен һәләндереп, ауыҙынан өҫтәлгә һеләгәйе аҡҡанын күрһәң, был урындан тиҙерәк ҡасҡы килә. Йоҡо бүлмәһендә карауатҡа ла менеп ята улар. Нисек кенә таҙа тоторға тырышһаң да, уларҙың йөнө араһында ниндәй генә микроорганизм йәшәмәй. Эт йәшәгән йортта үҙенсәлекле еҫ тә булыуын онотмайыҡ.

Йортта эт аҫрау дин буйынса ла тыйыла. Уның тыны Ислам буйынса нәжес тип һанала. Һеләгәйе намаҙ уҡыу урынына, кейемгә тейһә, был кейемдә һәм урында намаҙ ҡылыу дөрөҫ булмай, тиелә. Эт аҫраған йортҡа фәрештә инмәҫ, тип тә әйтелә. Нинә ошо ҡағиҙә-хәҡиҡәт-тыйыу ҡолаҡтарына инмәй икән эт хужаларының?!

*Рәфилә СИБӘҒӘТУЛЛИНА.*
*Мәләүез ҡалаһы.*

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

## Аңды ыҙалатыусы ике сәбәп: хәтер һәм ваҡыт

Тормош, башынан аҙағына тиклем, хәҙерге ваҡытта үтә. Хәтер көсө шул тиклем ҡеүәтле, ул әле йәшәгән һәм бер ваҡытта ла кире ҡайтмаясаҡ ваҡытығыҙҙы даими рәүештә емереп тора. Беҙ барыбыҙ ҙа ҡасан да булһа баҡыйлыҡҡа күсәбеҙ. Шуға күрә, ниңә был хаҡта алдан нервы бөтөрөргә һәм көйәләнергә? Был донъянан китеү һеҙҙең менән булған иң насар нәмәме?

Ғәфү итегеҙ, яңылыш әйттем. Эйе, һеҙ үлемдән ҡурҡаһығыҙ. Ул - иң насары. Ләкин алдан хафаланыуҙарығыҙҙы туҡтатығыҙ, сөнки һәр хәлдә был мәл һәр ҡайһыбыҙға киләсәк. Тимәк, унан бер нисек тә ҡасып ҡотолоп булмай, быны ҡабул итергә, уның тураһында уйлауҙы туҡтатырға һәм алдан ҡайғырмаҫҡа кәрәк.

Шулай уҡ барлыҡ үткәндәрегеҙҙе хәтерегеҙҙән алып ташлағыҙ. Һеҙҙең барыһын да аҡ ҡағыҙҙан башлау мөмкинлегегеҙ бар. Ул ҡағыҙ алдығыҙҙа ята һәм уны үткәндәрҙе уйлап, бысратмаҫҡа кәрәк. Үткәндәр - улар бары тик хәтерҙә генә йәшәй.

Был тормоштан теләгән нәмәгеҙҙе - уңыш, кинәнес... был ерҙәге ожмахта ылыҡтырған бөтә нәмәне - алыр өсөн күпме ваҡыт кәрәклеген беләһегеҙме? Бер секунд! Бармаҡ шартлатыу етә һәм һеҙ ерҙәге ожмахта, сөнки барыһы ла һеҙҙең башығыҙҙа ята. Хатта секундтың бер өлөшөндә миллионер булырға мөмкин. Һеҙҙән башҡа бер нәмә лә талап ителмәй. Бармаҡ шартлаттығыҙ - һәм һеҙ бай! Миллионерҙар клубына рәхим итегеҙ! Нисек, һеҙгә бында оҡшаймы?

Ысынбарлыҡта барыһы ла улай еңел генә түгел. Шуға күрә, әйҙәгеҙ, алға барайыҡ. Беҙҙең маҡсат - ошо әйтелгәндәрҙең барыһына ла ышаныу, шулаймы? Аңығыҙ һаман да раҫлау талап иткәнлектән, тағы бер тәжрибә үткәреп ҡарайыҡ. Белеүебеҙсә, теорияларҙың файҙаһы юҡ, тәжрибә ҙур әһәмиәткә эйә. Алдағы дүрт сәғәткә барлыҡ эштәрегеҙҙе ҡалдырып тороғоҙ, сәғәттәрегеҙҙе лә йәшерегеҙ һәм ваҡыт тураһында онотоп, дүрт йәшлек бала һымаҡ ошонда һәм хәҙер йәшәгеҙ. Һеҙ ашығыс эшкә, алдан планлаштырылған осрашыуҙарға һылтана башлаясаҡһығыҙ. Әйҙәгеҙ, бер ниндәй аҡланыу эҙләмәйек. Барыһы ла яҡшы булыр. Һеҙ бит шундай тормош тураһында хыялландығыҙ. Ошо мәлдән алып һеҙҙең өсөн киләсәк тә, үткәндәр ҙә юҡ. Һеҙ киләсәгегеҙҙе, уны теләгән ваҡытта үҙгәртеп, үҙегеҙ һайлайһығыҙ. Көн тәртибенә бәйлелек һеҙҙе билдәле бер юл үтергә мәжбүр итеп, сикләй. А-нан Б-ға тиклем арауыҡтың тап һеҙгә тура килеүен кем белә? Бары тик күрәҙәсе генә, ә үҙ яҙмышығыҙҙың күрәҙәсеһе - үҙегеҙ. Һеҙ бары тик үҙегеҙ өсөн иң яҡшы Б пунктын ғына һайлап, әлеге ваҡытта нимә булғаны-на иғтибар туплай алаһығыҙ.

Үткәндәр менән йәшәү - ул машинаның артҡы күренеште күрһәткән көҙгөһөнә генә ҡарап хәрәкәт итеү. Һеҙ тормошоғоҙ менән ошо көҙгөнән (үткән тормош) күҙегеҙҙе алмай йәки юл картаһына (киләсәк) ышанып ҡына идара итһәгеҙ, машина менән бергә юлдан ситкә осасаҡһығыҙ.

**Пьер МОРАСИ.**



## 25 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 0.10, 0.55, 1.35, 2.15, 3.05, 3.45, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.50, 14.15, 19.00, 22.40 Информационный канал. [16+]
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Спроси Марту". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Доктор Краснов". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия-4". [12+]
3.50 Т/с "Морозова". [16+]
4.42 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**11.00, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**11.45, 14.45, 18.15, 19.30, 20.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Спортивная история. [12+]**
**12.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**12.45, 4.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "Этно-краса". [12+]**
**15.30 Преград. Net. [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.00 "Уҙаман". [12+]**
**16.45 Специальный репортаж. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30 "Айда играть". [6+]**
**19.00, 3.45 "Бай". [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Вечерний телецентр.**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Д/ф "Донбасс. Война. Лето-2014". [16+]**
**0.45 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.15 "Эх, невеста, невестушка!.." [12+]**
**3.00 "Замандаш". [12+]**
**3.15 Үткән ғүмер. [12+]**
**5.00 Вечерний телецентр.** [12+]
**6.00 Следопыт. [12+]**

## 26 СЕНТЯБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Спроси Марту". [16+]
0.10, 0.55, 1.35, 2.15, 3.05, 3.45, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Доктор Краснов". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия-4". [12+]
3.50 Т/с "Морозова". [16+]
4.42 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Ете егет". [12+]**
**10.45, 23.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**11.00, 3.15 Автограф. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 22.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 18.15, 19.30, 20.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Детей много не бывает. [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**16.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**16.45 Криминальный спектр. [16+]**
**17.00, 6.00 "Дорога к храму". [6+]**
**17.30 Пофутболим? [12+]**
**17.45 "История одной любви". [12+]**
**19.00 "Елкән". [6+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Вечерний телецентр.**
**22.00, 3.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Д/с "Герои". [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**0.45 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.15 Спектакль "Хаджи эфэнди женится". [12+]**
**4.15 Счастливый час. [12+]**
**5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 27 СЕНТЯБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Спроси Марту". [16+]
0.10, 0.55, 1.35, 2.15, 3.05, 3.45, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Доктор Краснов". [16+]
22.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия-4". [12+]
3.50 Т/с "Морозова". [16+]
4.42 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Әлләсе... [6+]**
**10.45, 23.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 18.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Надо знать. [12+]**
**12.30 Новости спорта (на рус. яз).**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "КультУра". [6+]**
**15.45 МузКәрәҙ. [6+]**
**16.00, 6.00 Тайм-аут. [12+]**
**16.45, 3.30 История одного села. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30 История признания. [12+]**
**18.00 Финликбез. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Трактор" (Челябинск). КХЛ.**
**22.00, 3.45 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Автограф. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**0.45 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.15 Спектакль "Счастье". [12+]**
**3.00 Тормош. [12+]**
**4.15 Счастливый час. [12+]**
**5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 28 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Спроси Марту". [16+]
0.10, 0.55, 1.35, 2.15, 3.05, 3.45, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Доктор Краснов". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия-4". [12+]
3.50 Т/с "Морозова". [16+]
4.42 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Автограф. [12+]**
**10.30 Тормош. [12+]**
**11.00 "Атайсал. Знай наших!" [6+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 18.15, 19.30, 20.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "Сулпылар". [6+]**
**15.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.45 Криминальный спектр. [16+]**
**17.00, 3.15 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**17.30 Д/с "Герои". [12+]**
**19.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Вечерний телецентр.**
**22.00, 3.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**0.45 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.15 Спектакль "Сваха". [12+]**
**4.15 Счастливый час. [12+]**
**5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 "Это моя профессия". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 29 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 16.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 17.10 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.10 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
16.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Премьера. "Голос. Уже не дети". [12+]
23.50 Х/ф Премьера. "Один на один". [12+]
1.40, 2.20, 3.00, 3.35, 4.10, 4.45, 5.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 Ну-ка, все вместе! [12+]
0.10 Истории Большой Страны. [12+]
1.10 Х/ф "Сжигая мосты". [12+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 17.45 "Йома". [6+]**
**10.30, 3.30 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 18.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 История одного села. [12+]**
**12.15 Д/ф "Вернуться из боя..." [16+]**
**12.45 Автограф. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**15.00 "Гора новостей". [6+]**
**15.15 Лит-ра. [6+]**
**15.45 "Этно-краса". [12+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [6+]**
**16.45 Патриот РФ. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Металлург" (Магнитогорск). КХЛ.**
**22.00, 6.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 "Автограф". [12+]**
**0.45 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.15 Спектакль "Вой волчицы". [12+]**
**4.00 Историческая среда. [12+]**
**4.15 Д/ф "Свет во тьме". [12+]**
**5.00 Тормош. [12+]**
**5.30 "Бай". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 30 СЕНТЯБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Наше всё". [12+]
11.05 Премьера. "ПроУют". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Поехали!". [12+]
13.10 Х/ф "Бег". К 100-летию Александра Алова. [12+]
17.00 Д/ф "Человек века". Ко дню рождения Юрия Любимова. [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Михаил Задорнов: вся жизнь". [16+]
19.10 Премьера. "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]
20.00 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?". [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.15 Д/ф "Юрий Любимов. Человек века". [12+]
0.10, 0.50, 2.15, 2.30, 3.10, 3.45, 4.25, 5.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
1.15 Бокс. Вечер Чемпионов IBA. Мурат Гассиев (Россия) - Отто Валлин (Швеция). Бой за титул WBA Inter-Continental в тяжелом весе. Прямая трансляция из Турции.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 В кругу друзей.
12.50 Доктор Мясников. [12+]
14.50 Юморина. [16+]
17.50 Привет, Андрей! [12+]
21.05 Вести. Местное время.
21.20 Большой праздничный концерт "Россия - Донбасс - Новороссия". Трансляция с Красной площади.
23.20 Х/ф "Движение вверх". [6+]
1.50 Д/ф "Новороссия". [12+]
3.15 Х/ф "Балканский рубеж". [16+]
5.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ете егет". [12+]**
**8.30 Д/ф "Свет во тьме". [12+]**
**9.15 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**9.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 Елкән. [6+]**
**10.30 Лит-ра. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 "Созвездие талантов". [6+]**
**11.45 МузКәрәҙ. [6+]**
**12.00 Автограф. [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**13.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Спектакль "Верность". [12+]**
**19.00 Интервью. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**22.00, 4.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Концерт заслуженной артистки РБ Лилии Биктимировой. [12+]**
**2.00 Спектакль "Пустая колыбель". [12+]**
**4.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Мистический Башкортостан. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 1 ОКТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 1.20, 2.00, 2.35, 3.10, 3.45, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.45 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.30 "Часовой". [12+]
8.00 "Здоровье". [16+]
9.05 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Премьера. "Жизнь своих". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
14.20 Х/ф "Покровские ворота". [12+]
17.05 Д/ф "Специальное расследование. "Кто взорвал "Северные потоки"?" [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". Финал. [16+]
21.00 "Время".
22.35 "Что? Где? Когда?" Осенняя серия игр. [16+]
23.45 "ArtMasters". Церемония награждения в Большом театре. [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

6.15, 2.30 Х/ф "Последняя жертва". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 16.00 Вести.
11.50 Праздничный концерт.
13.45 Х/ф "Самая любимая". [12+]
16.50 Песни от всей души. [12+]
19.00 Вести недели.
21.30 Москва. Кремль. Путин.
22.00 Д/ф "1993 год. Перелом". [12+]
23.35 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.13 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [6+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 "Атайсал. Знай наших!" [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 "Дорога к храму". [6+]**
**15.30, 4.15 Историческая среда. [12+]**
**16.00 "Честно говоря". [12+]**
**16.45 К Международному Дню музыки. Золотые страницы башкирской классики. К 105-летию композитора З.Исмагилова. [12+]**
**18.00 "Елкән". [6+]**
**20.00 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**21.00, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**21.15 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 3.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Х/ф "Ночью можно". [12+]**
**23.30 Спектакль "Кукольный дом". [12+]**
**1.45 Тайм-аут. [12+]**
**2.15 История одного села. [12+]**
**2.30 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**3.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1445 һижри йыл.*

| Сентябрь - Октябрь (Рабиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 25 (10) дүшәмбе | 5:37 | 7:07 | 13:30 | 16:42 | 19:06 | 20:36 |
| 26 (11) шишәмбе | 5:39 | 7:09 | 13:30 | 16:40 | 19:04 | 20:34 |
| 27 (12) шаршамбы | 5:41 | 7:11 | 13:30 | 16:37 | 19:01 | 20:31 |
| 28 (13) кесе йома | 5:43 | 7:13 | 13:30 | 16:35 | 18:58 | 20:28 |
| 29 (14) йома | 5:45 | 7:15 | 13:30 | 16:33 | 18:56 | 20:26 |
| 30 (15) шәмбе | 5:47 | 7:17 | 13:30 | 16:31 | 18:53 | 20:23 |
| 1 (16) йәкшәмбе | 5:49 | 7:19 | 13:30 | 16:30 | 18:51 | 20:21 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# СТӘРЛЕТАМАҠ ДӘҮЛӘТ ТЕАТР-КОНЦЕРТ БЕРЛӘШМӘҺЕ



**Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһендә ике ижади коллектив: И. Йомағолов исемендәге Башҡорт драма театры һәм филармония эшләй. Үҙ тарихы, ҡаҙаныштары булған һәр төркөм ҡаланың ғына түгел, Башҡортостандың йөҙөк ҡашына әүерелгән. Берләшмәнең директоры - БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Харис Зәбих улы Әбдрәхимов. Бөгөнгө башваҡкысыбыҙҙа театр коллективы тураһында бер аҙ мәғлүмәт биреп китмәксебеҙ.**

Башҡорт драма театры 1990 йылдың 1 декабрендә Стәрлетамаҡ театрҙар берекмәһе нигеҙендә барлыҡҡа килә. Был идеяны ул ваҡытта Стәрлетамаҡ рус театрын етәкләгән Анатолий Полянкин, режиссер, БР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Гөлдәр Ильясова, БАССР-ҙың һәм РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы Илшат Йомағолов күтәреп сыға. Ул осорҙағы республиканың мәҙәниәт министры Салауат Әминев һәм Стәрлетамаҡ ҡалаһы хакимиәте башлығы Спартак Әхмәтов хуплай һәм етди ярҙам күрһәтә.

Яңы театрҙа беренсе премьера 1991 йылдың 7 апрелендә күрһәтелә. Дулат Исабеков пьесаһы буйынса "Көтөр кешем бар минең" спектаклен Гөлдәр Ильясова сәхнәгә сығара. 2021 йылда Башҡорт драма театры үҙенең 30 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Ә 2022 йылдың 6 октябренән Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһенең Башҡорт драма театры уға нигеҙ һалыусыларҙың береһе, БАССР-ҙың һәм РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы, драматург, педагог Илшат Хәлил улы Йомағоловтың исемен йөрөтә башланы.

Бөгөн театр артистары Стәрлетамаҡ ҡалаһы халҡын ғына түгел, тирә-яҡ ауыл-ҡалаларҙағы тамашасыларын да күркәм ижады менән ҡыуандыра, Рәсәйҙең төрлө төбәктәренә лә гастролдәр яһай. Унда милли классик һәм заман драма әҫәрҙәре берҙәй уңышлы ҡуйыла. Театр актерҙарын телевизор ҡараусылар ҙа танып-белеп тора: "Күңелле йәшәйбеҙ" юмористик тележурнал, күп сериялы "Бәхет ҡошо", "Сируси", "Күршеләр" фильмдары, ҡыҫҡа метрлы "Өс хат", "Кластан тыш дәрес" фильмдарында төшкән улар. Һәр яҡлап та һөнәри үҫешкә ынтылған, ижад ҡомарҙары ташып торан коллективтың художество етәксеһе бөгөнгө көндә БР-ҙың халыҡ артисы Илһам Ринат улы Рәхимов.




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**36-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Архив. Исламов. Набат. Банка. Һамаҡ. Лайка. Махорка. Тубыҡ. Мәрәкә. Талым. Бит. Арҡан. Әҙәм. Өгөт. Бүкән. Исраф. Ваба. Өбөрө. Рәсәй. Хөрәфәт. Рәт. Ҡош.

**Вертикаль буйынса:** Мортазин. Бухгалтер. Ритм. Өфө. Ишәк. Блюхер. Алама. Аҡлан. Батыр. Өйрәк. Бикчәнтәев. Алиһә. Виват. Төш. Һөт. Амбар. Убыр. Ыҙма. Ҡаҡ. Нәнәй.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**29 сентябрь "Яҙыусы, драматург Наил Ғәйетбаевҡа - 75!"** театрлаштырылған тамаша. 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**26 сентябрь** "Сулпан" балалар театры гастролдә **"Ике һайыҫҡан"** (Н. Ғәйетбайев), әкиәт. 11.00 0+

**27-30 сентябрь** Брянск төбәк йәш тамашасы театры гастролдәр менән килә.

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

*Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:*

**27 сентябрь "Ике һайыҫҡан"** (Н. Ғәйетбайев), музыкаль әкиәт. 11.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**28 сентябрь "Sauerfest"** халыҡ-ара орган фестивале. 6+

**"Джаз классикаһы. Джазда классика"** концерт. 6+

**29 сентябрь "Музыка Северной Пальмиры"** концерт. 6+

**1 октябрь "Классиктар һәм замандаштар"** 85-се юбилей сезонын асыу. 18.00 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**28 сентябрь "Ҡыҙҙар килде ауылға"** (Н. Ғәйетбайев), музыкаль комедияһы менән М.Ғафури ис. БАДТ сәхнәһендә. 12+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**"Һинән - фатир, минән - ир!"** (Н. Ғәйетбайев), комедия-гротеск менән **25 сентябрь -** Өфө ҡалаһында, **26 сентябрь -** Иглин, **27 сентябрь -** Абҙаҡ, **28 сентябрь -** Сәрмән, **29 сентябрь -** Шығай ауылдарында гастролдәр. 16+

**"Әлдермештән Әлмәндәр"** (Т. Миңнуллин), фантасмагория менән **25 сентябрь -** Асҡар, **26 сентябрь -** Баймаҡ, **27 сентябрь -** Аҡъяр ауылдарында, **28 сентябрь -** Магнитогорск ҡалаһында гастролдәр. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**27 сентябрь "Нисек кейәүгә сығырға?"** (Н. Ғәйетбайев), комедияһы менән М.Ғафури ис. БАДТ сәхнәһендә. 16+

*АҢЛАТАБЫҘ...*

# ЭШ ТАБЫШАЛАР

Хыялыңдағы эште эҙләйһеңме? "Рәсәй эше" кадрҙар үҙәгенә мөрәжәғәт итергә мөмкин. Унда вакансиялар табырға, әңгәмәгә әҙерләнергә ярҙам итерҙәр һәм карьера буйынса план да төҙөп бирерҙәр.

Мәшғүллек бүлектәре көндән-көн уңайлыраҡ эшләй. Мәҫәлән, берҙәм һанлы платформа ярҙамында эшкә урынлашырға мөмкинлек бирелә: эш эҙләүселәр тиҙерәк яҡшы эш таба ала. Шулай уҡ кадрҙар үҙәктәре халыҡ өсөн уңайлыраҡ эшләй, ә хеҙмәтләндереү сифатын яҡшыртыу өсөн консультанттар даими рәүештә үҙ квалификацияһын күтәрә, эш эҙләүселәр һәм эш биреүселәргә уларҙың тормош йәки бизнес-хәлдәрен иҫәпкә алып, ярҙам итәләр. Мәшғүллек үҙәктәре "Демография" милли проекты буйынса яңыртыла. Хәҙер тотош илдә ошондай 178 бүлексә эшләй, шуларҙың өсәүһе - Башҡортостанда.

*✔ Буш ваҡытым булған һайын уҡырға тырышам. Һуңғы уҡыған китаптарым - Йәдкәр Бәшировтың әҫәрҙәре булды. Гәзит-журналдар алдырам. Килгән бер номерын уҡып өлгөрөп тә булмай, шулай ҙа яҙылмай ҡалғаным юҡ.*

ТАЛАНТЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# ЯҘМЫШТЫҢ ҮҘЕНӘ ТӘҒӘЙЕНЕН...

## тамырҙарынан һут алғанын һайлаған



(Башы 11-се биттә).

**➔ Ғаиләгеҙҙәге үҙ-ара мөнәсәбәттәрегеҙгә иғтибар иткәнем бар: һеҙҙең ҡатындарығыҙ ҙа бер туғандар һымаҡ бит.**

- Эйе, улар әсәйемдең ҡыҙҙары йә әхирәттәре һымаҡ, күрешкәндә һөйләшеп, серләшеп һүҙҙәре бөтмәй. Улар араһында ғәҙәттә килен-ҡәйнә араһында була торған аңлашмаусанлыҡтар ҙа булғаны юҡ. Әсәйем оло ейәнсәре, минең ҡыҙым Айзиләгә лә әхирәт була белә.

**➔ Балаларығыҙҙың исемдәре матур. Уларға исемде кем ҡушты? Исемдәре есемдәренә тап киләме?**

- Тәүге ҡыҙыбыҙға Айнур ҡустым тәҡдим иткән исемде ҡыуанып ҡабул иттек: минең исемдән - Ай, Минзиләнән - Зилә. Беҙ бит абитуриент ваҡытта уҡ бер-беребеҙгә үлә яҙып ғашиҡ булып, беренсе курстың көҙөндә үк өйләнешеп тә ҡуйҙыҡ. Икенсе балабыҙҙы көткәндә, улым тыуһа, дини исем ҡушам, тип йөрөй инем. Бер көн эштән буласаҡ улыма исем уйлап ҡайтып барғанда, ҡапыл аҙан тауышы ишеттем. Улымдың исеменә иҫкәрмә итеп ҡабул иттем аҙанды: тыумаҫ элек Динислам тип ҡуштыҡ исемен. "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ"ты уҡығандан һуң, бала саҡта уҡ, үҫкәс, ҡыҙым булһа, Аҡйондоҙ тип ҡушам исемен, тип уйлап ҡуйғайным. Минзилә Алтынай тип ҡушайыҡ, тигәйне лә, исем ҡағыҙын Аҡйондоҙ тип алдым да ҡайттым. Төпсөгөбөҙ Айгүзәлгә исемде апайҙары һымаҡ гүзәл, сибәр булһын тип ҡуштыҡ. Аллаға шөкөр, балаларыбыҙҙың исемдәре лә, холоҡтары ла матур, ошоға тиклем ҡыуандырып ҡына торҙолар, бынан һуң да шулай тәүфиҡлы, итәғәтле булһындар. Беҙ уларҙы һаман яратып туя алмайбыҙ. Үҫкәндә лә икенсе балабыҙ тыуғансы уртабыҙҙа ғына ятып йоҡлап үҫтеләр, әле лә Айзиләбеҙгә тиклем, инде үҙе әсәй булһа ла, килгән һайын арҡаһынан тупылдатып яраттырып тора. Күпме генә яратһаң да уларға биреп бөтөлмәгән наҙ ҡалған һымаҡ. Ниңә бишәү итмәгәнбеҙ икән, тип үкенәбеҙ. Ярай әле ейәнсәребеҙ бар. Олатай-өләсәй булғас, ошо тойғоно бүләк иткән балалар тағы ла яҡыныраҡ булып китә икән ул.

**➔ Хәҙер күп ғаиләләрҙә атай-әсәйҙәр - бер бүлмәлә, балалар - икенсе бүлмәлә. Һеҙ ниндәйерәк алымдар менән тәрбиәләнегеҙ яратып туйғыһыҙ балаларҙы?**

- Беҙҙекеләр ҙә, күп артист балалары кеүек, сәхнә артында йөрөп үҫте. Динислам өс йәшенән сәхнәлә. Беҙ оҙайлы гастролдәрҙә йөрөгәндә атай-әсәйем эргәһендә булдылар. Әле лә оҙайлы каникулдарҙа ла, ял араларында ла ауылдабыҙ. Өләсәләре уларҙы китап уҡырға ултыртып ҡуя, аҙаҡ улар китап буйынса фекер алышалар, бәхәс ҡоралар. Ауыл ерендә эш тә күп, эш белеп үҫәләр. Рәхәтләнеп үҙебеҙсә аралашып, тел тәмен, хеҙмәт тәмен белеп үҫеүгә етәме ни? Ауыл, өләсәй, хеҙмәт мәктәбе - иң һәйбәт тәрбиә. Шуға бына уҡыусыларҙы хеҙмәткә йәлеп итеү буйынса үҙгәрештәр индерелеүенә ифрат та шатмын. Эшләп үҫкән кешелә генә өмөт бар.

**➔ Сәхнә кешеһенең күңел донъяһы бай булырға тейеш: милли әҙәбиәт кенә түгел, донъя әҙәбиәте өлгөләре менән танышып барырға тейештер сәнғәт әһелдәре. Уҡырға ваҡытығыҙ ҡаламы?**

- Буш ваҡытым булған һайын уҡырға тырышам. Ә ваҡыт юҡ, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы. Йәл, элек күберәк уҡымағанмын, тип әрләйем хәҙер үҙемде. Һуңғы уҡыған китаптарым - Йәдкәр Бәшировтың әҫәрҙәре булды. Гәзит-журналдар алдырам. Килгән бер номерын уҡып өлгөрөп тә булмай, шулай ҙа яҙылмай ҡалғаным юҡ. "Мин булмаһам, кем?" тигән принциптан сығып булһа ла яҙылам - ҡулыңа алғас, һис юғы ҡараштырып булһа ла сығаһың бит инде барыбер.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Заман һынауҙарын йөрәге аша үткәргән етәксенең үҙенә лә бик күп һынауҙар аша үтергә тура килә: яңы ерҙә, яңы коллективта эш башлап, төпләнеп йәшәй генә башлағас, әллә нисә тапҡыр эш урынын да, йәшәү урынын да алмаштыра. "Ауыр булғандыр?" тигән һорауыма: "Мин уларҙың барыһын да яңы тәжрибә итеп ҡабул иттем, сөнки беләм: ямғырҙан һуң мотлаҡ ҡояш сыға, төндө һәр ваҡыт көн алмаштыра... Ә мин һынауҙар аша үтеп сыныҡырға тейеш булғанмындыр",- тип яуапланы. Их, тим, ошондай ихлас һөйләшеү-аралашыуҙарҙы түкмәй-сәсмәй гәзит уҡыусыларға еткереп булһа икән... Әңгәмәнән һуң тыуған уй-фекерҙәрҙең яҙылғандарына ҡарағанда яҙылмай ҡалғандары күберәк шул. Әңгәмәсемдең милли театрҙарҙың бөгөнгөһө һәм киләсәге, театр сәнғәте аша телебеҙгә, рухиәтебеҙгә арымай-талмай хеҙмәт иткән артистар иңенә ятҡан проблемалар, милләт, ил-көн яҙмышы хаҡындағы борсолоулы уйҙары бер мәҡәләгә һыймай ҡалды. "Бөгөнгө көн менән йәшәргә кәрәк, тип йәштәрҙе боҙалар. Киреһенсә, киләсәк менән, киләсәккә ҡарап, хатта 200-300 йылдан телем, илем, халҡым менән ни була, тип йәшәргә кәрәк. Халҡыбыҙ, милли мәҙәниәтебеҙ, телебеҙ хаҡында беҙ ҡайғыртмаһаҡ, кем ҡайғырта?" - тип борсола ул. Айбулат Минеғәле улының киләсәккә ҡарап йәшәр көсө - рухи тамырҙарында. Тамырҙарыбыҙҙан айырылмайыҡ!**

**Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯҠШЫ КЕШЕНЕ...

## йомошоң төшкәндә белерһең

Яҡшы һүҙ әйтте, тип һөйөнмә, ихласлығын белмәйенсә,
Яман һүҙ әйтте, тип көйөнмә, көнсөллөктән икәнен белмәйенсә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Үткәндәрҙең яманлығы шунда: кешеләрҙән ҡол яһағандар. Киләсәктең яманлығы шунда: кешеләрҙе роботҡа әйләндереүҙәре ихтимал.

**(Э. Фромм).**

Ҡартлыҡ беҙҙең шатлыҡтар бөтөүе менән түгел, ә өмөттәр һүрелеүе менән ҡурҡыныс.

**(Жан Поль).**

Бөйөк аҡылдар үҙ алдына маҡсат ҡуя, ҡалғандар үҙенең ҡырағай теләге артынан эйәрә.

**(У. Ирвинг).**

Ярты юлда туҡтағансы, эште башламауың хәйерле.

**(Кесе Сенека).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер саҡ ишкәксе үҙенең кәмәһендә олпат ҡына ҡартты йылға аша сығарып ҡуйырға була. Ҡарт кәмәнең ситенә һаҡһыҙ эйелә лә, һыуға ҡолап төшә һәм бата башлай. Ишкәксе уны кейеменән эләктереп алып, кәмәгә һөйрәп мендерә.**
**- Рәхмәт һиңә, - ти уға ҡарт. - Һин ярҙам итмәһәң, батып үлер инем, йөҙә белмәйем бит мин...**
**- Эйе, батып үлер инең, - ти ишкәксе ғорур ҡиәфәттә. - Ә һин ҡайҙа юл тоттоң һуң?**
**- Мин батша эргәһенә китеп барам. Ул мине үҙенә кәңәшсе итеп саҡырҙы, - ти ҡарт.**
**- Ҡалай ғәҙелһеҙ был донъя! - тип ҡысҡырып ебәрә ишкәксе. - Һин йөҙә белмәйһең, ә мин һыуҙа балыҡ кеүекмен. Ниңә батша кәңәшсе итеп мине түгел, ә һине саҡырған?**
**- Һин ишкәксе, шуның өсөн дә иң мөһиме йөҙә белеү, тип иҫәпләйһең. Крәҫтиән, иң мөһиме икмәк үҫтереү, ти. Һунарсы, кейектәрҙең ҡылығын өйрәнгән кеше мөһим, ти. Яугир иһә, тура атыусыны барыһынан да мөһимерәк кеше тип һанай. Ләкин улар барыһы ла яңылыша. Берәүҙәрҙең яҡшы йөҙөүе, икенселәрҙең яҡшы итеп икмәк уңышы үҫтереүе кәрәк. Кемдәрҙеңдер кейектәрҙең ҡылығын яҡшы белеүе, икенселәренең тура атыуы ла кәрәк. Шул саҡта ғына дәүләт ҡеүәтле һәм бай буласаҡ. Һин бына ошо хәҡиҡәткә төшөнмәгәнһең әле, шуға ла ғүмереӊ ахырына тиклем ишкәксе генә булып ҡаласаҡһың. Ә мин, йөҙә белмәгән ҡарт, батшаға дәүләт менән идара итергә ярҙам итергә ниәтләнәм..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 22 сентябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 3177
Заказ - 1299

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.